ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

3-9 август (урағай)

2019

№31 (865)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Иғтибар! Таныштарығыҙ, дуҫтарығыҙ араһында 2019 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғандар булһа, беҙҙең сәләмде тапшырығыҙ, зинһар: 17 августҡа тиклем яҙылып өлгөрһәләр, гәзитте сентябрҙән алдыра башлаясаҡтар. Индекстар үҙгәреүен дә белеп ҡуйығыҙ: ПР905 индексы "Киске Өфө" гәзитенә ҡалған 4 ай өсөн 416 һумға яҙыла алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Булған илдең аҫыл улдары…

3

Демография көҙгөһөндә…

башҡорт йөҙө

8-10

Аҡсаны үтескә бирһәң - сауап,

процентҡа бирһәң - оло гонаһ

12-13

Оҙаҡ йәшәү сере ниҙә?

12-13

ТВ-программа 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Ни өсөн тормошобоҙҙа негатив күбәйҙе?

Тәлғәт СОЛТАНОВ, хирург, Сибай ҡала поликлиникаһының бүлек мөдире: Кемгә нисектер, ләкин һорауҙың шулай ҡуйылышы менән мин килешеп етмәйем, сөнки негатив - ул аҙыраҡ йә, киреһенсә, күберәк тип күләмләп үлсәй торған төшөнсә түгел; ул йә бар, йә юҡ. Ә тормошобоҙҙа ул, бер кемгә лә сер түгел: һәр ваҡыт бар, тик бына уның тәьҫирен үҙең аша үткәреү, уны кисереү, үҙеңдә тойомлау барыбер кешенең тормошҡа булған мөнәсәбәтенә, ә бәлки, хатта холоҡ-фиғеленә лә бәйле, минеңсә. Шәхсән үҙемә килгәндә, ғаиләм менән 20 йылдан ашыу Сибайҙа йәшәйем, үҙем - хирург, ҡатыным уҡытыусы булып эшләне. Улыбыҙ ҙа табип һөнәрен үҙ итте, киленебеҙ - шулай уҡ уҡытыусы, Өфөлә йәшәйҙәр. Бынан алда Аҡъяр дауаханаһында эшләгәйнем. Ғүмеремде һаулыҡ һаҡлауға бағышланым. Әле лә бына хаҡлы ялда булһам да (беҙҙең быуынды юҡҡа ғына "старая гвардия" тип йөрөтмәйҙәр) эшемде дауам итәм, сөнки, үҙегеҙгә лә яҡшы мәғлүм - табиптар етешмәй. Быны инде бер нисек тә "негатив" тип әйтеп булмай, был дәүләт кимәлендә хәл ителергә тейешле етди проблема. Әйткәндәй, Сибайҙағы экологик хәл тураһында һораша күптәр, ғауғалашып, күсеп китеүселәр ҙә бар. Ғүмер буйы йәшәгән урындан бер ҡайҙа ла китергә йыйынмайбыҙ. Экологик йәһәттән Сибай бер ҡасан да маҡтанырлыҡ булманы, әлбиттә, шулай ҙа ғүмер буйы йәшәп, донъя ҡорған урыныңдан ҡубарылып ҡайҙа сығып китәһең? Һәр хәлдә, үҙемде ошонда кәрәкмен тип иҫәпләйем. Әйтерһең дә, бындай проблемалар элек булмаған! Булды, тик ул хаҡта өндәшмәүҙе хуп күрҙеләр. Өҫтәүенә, бер кем килеп тикшереп тә йөрөмәне, халыҡ иҙеннә лә асығын ғына белмәне. Бөгөн, әйтергә кәрәк, Сибай проблемаларына иғтибар көсәйҙе. Халыҡҡа ла эштең айышын аңлатып, һөйләп торалар. Был йәһәттән республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбировтың мәсьәләне үҙ контролендә тотоуы руда яныу эҙемтәләренә ҡаршы эште күпкә тиҙләтте, шул арҡала яныуҙы туҡтатыу өсөн төрлө ысулдар ҡулланыла. Әлеге ваҡытта ҡалала һулар һауа торошо даими үлсәнә һәм контролдә тотола, ошо нигеҙҙә һәр төрлө паника һәм негатив сафсаталарға юл ҡуйылмай. Һуңғы ваҡыттарҙа атмосферала зарарлы матдәләр ПДК-ны нормаға яраҡлы, ти белгестәр. Ышанабыҙ инде, сөнки ПДК норманан ашып киткәндә көкөртлө газ еҫе былай ҙа иҙелә бит ул. Әле, әйтеүемсә, хәл түҙерлек. Шулай үҙебеҙҙе ыңғайға көйләп, халҡыбыҙ файҙаһына кәрәкле эш менән мәшғүл булып йәшәһәң, тормошта осрап торған негатив күренештәргә, әгәр улар ысынбарлыҡты дөрөҫ сағылдырмай икән, иғтибарыңды бүлеп, көсөңдө сарыф итеп тороуҙың да кәрәге юҡтыр, тип уйлайым, сөнки негатив - ул емереүсе көскә эйә кире хистойғо йәки күп осраҡта агрессив энергия. Шуға күрә негативҡа "тукланырға аҙыҡ" бирмәһең, ул үҙенән-үҙе юҡҡа сығасаҡ, тигән уйҙамын.

(Дауамы 2-се биттә).

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

БЕҘҘЕ ЛӘ ИШЕТҺЕНДӘР

Ошо рубрика аҫтында үҙемдең ҡайһы бер уй-фекерҙәрем менән бүлешеп китергә булдым. Гәзит уҡыусыға үҙен борсоған да, ҡыуандырған да хәл-ваҡиғалар тураһында әйтергә мөмкинлек бирелеп, "Киске Өфө" бөтәбеҙ өсөн дә кәрәкле һәм файҙалы эш эшләне. Беҙ - власты, ул - халыҡты ишетер, тип өмөтләнәм.

Тәүге һүҙем күп һорау һәм һүҙ тыуҙырған сүп-сар системаһы тураһында. Бөтә яңы реформаны тик кире яҡтан ғына ҡарап ҡабул итеү дөрөҫ аҙым түгел. Һәр яңы башланғыста ла тәүҙә аңлашылмаусанлыҡтар була, уныһыҙ мөмкин түгел. Бөтәһе лә яйға һалыныр һәм буласаҡ һөҙөмтәләр ике яҡты ла (власть һәм халыҡ) ҡәнәғәтләндерер, тип ышанам. Мин, мәҫәлән, тәүге ыңғай яҡты күрҙем дә инде. Мәҫәлән, Мәләүез районы Һарыш ауылына яҡын урман янында оло юлға яҡын ғына ерҙә күпләп сүп-сар өйөмдәре ятыр ине. Башҡа ҙур ҡыйлыҡтарҙағы кеүек үк, унда алып барып түккән сүп-сар төрлө яҡҡа таралып, полиэтилен ҡапсыҡ, пакеттар урман һәм ялан буйлап осоп йөрөр ине. Ләкин йәй башында ул сүплекте тулыһынса таҙалап ҡуйҙылар. Тирә-яҡтың нисек йәмләнеп, матурайып китеүен әйтеп аңлатып булмай. Ләкин ҡайһы бер әҙәмдәр хәҙер сүп-сарын урман эсенә инә биреп түгә башланы. Һуң, аҡса түләүен түләгәс, шул сүп-сарҙы машинаға тейәп ебәреп булмаймы икән ни? Машина килмәй, тиер инең, аҙна һайын даими йөрөп тора. Был ҡылыҡтары менән нимә әйтергә, иҫбат итергә теләйҙәр ундайҙар - аңлап булмай.

(Дауамы 2-се биттә).

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

"АҪЫЛТАШ"ҠА...

аҫыл йәштәр йыйылды

Йәйге каникулдар мәлендә йәштәрҙең мәшғүллеген хәстәрләп, БР Йәш яҡташтар берлектәре ассоциацияһы һәм "Берҙәм Рәсәй Йәш Гвардияһы" ойошмаһы сираттағы "Аҫылташ" башҡорт мәҙәниәте республика форумын уҙғарҙы. Сара өсөнсө йыл рәттән Баймаҡ районы Граф күле буйында республика һәм Рәсәйҙең төрлө өлкәләренән башҡорт мәҙәниәте, тарихы, ғөрөф-ғәҙәттәре менән ҡыҙыҡһыныусыларҙы йыя. Быйыл унда Башҡортостандың төрлө район-ҡалаларынан, Силәбе, Свердловск, Ырымбур, Пермь өлкәләренән, Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡаҙан ҡалаларынан 300 кеше ҡатнашҡан. Форумдың һөҙөмтәләре тураһында ҡатнашыусыларҙың үҙҙәренән белештек.

(Дауамы 6-сы биттә).

12+

✓ ***Бөгөнгө негатив күренештәрҙән мин ғаилә институтының юҡҡа сығыуын миҫал итеп килтерер инем. Ғаилә ҡиммәттәре ергә һалып тапалған. Нимә ул ғаилә, ул ниндәй булырға тейеш икәнен белмәгән заман эсендә йәшәп ятабыҙ.***

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

БЕҘҘЕ ЛӘ ИШЕТЬЕНДӘР

(Башы 1-се биттә).

Бөтә Башҡортостан буйлап барған "Сәләмәт республика" акцияһы хеҙмәткәрҙәре райондар халҡы өсөн ҙур эш атҡара. Барыһы ла баш ҡалаға барып, һаулығын тикшертә алмай, шуға күрә ауылдар буйлап махсуслаштырылған машиналар ебәреүҙең ни тиклем ҙур әһәмиәткә эйә булыуын билдәләмәйенсә булмай. Бигерәк тә оло йәштәгеләр өсөн шатланам. Минең 75 йәшлек атайым, машиналарҙың Архангелгә килеүенән файҙаланып, флюорография ла үткән, кардиоүҙәк һәм Республика клиник дауаханаһының диагностик үҙәге белгестәренә лә күренгән, "теш табиптарына ҡалған ғына 5 тешемде лә күрһәтеп ҡалдым", тип бик яҡшы кәйефтә шылтыратып, тәьҫораттары менән бүлеште. Дөйөм алғанда, әлеге акцияны тик яҡшы яҡтан ғына телгә алырға була, сөнки һау халыҡ - төбәктең ныҡлы терәге.

Республика бөтә яҡлап та хеҙмәттәшлек даирәһен киң йәйелдереүен күрәбеҙ. Әле яңы ғына Абхазия, Никарагуа, Австрия, Ҡырғыҙстан һәм Бөйөк Британияның вәкилдәре Башҡортостан менән тауар әйләнешен булдырыу һәм арттырыу тураһында теләк белдереүен ишетеп шатландым. Үҙебеҙҙә етештерелгән төрлө тауар һәм продукцияның сит илдә һатылыуы шәп бит. Эшҡыуар егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ донъя кимәленә сығып эшләрлек мөмкинлек ала. Тик сос һәм ҡыйыу булырға кәрәк.

Һуңғы йылдарҙа республикала төрлө конкурс, фестиваль, ярыштар йыш уҙа. Йәшенән алып ҡартына тиклем унда ҡатнашып, үҙҙәрен күрһәтеп, башҡаларға ҡарап, дәрт-дарман туплап ҡайта. Ауылдарҙың, райондарҙың үҙ-ара аралашыуы яҡшы күренеш, ләкин бер үк бәйгене йәки йыйынды йыл да үткәреү уның бәҫен төшөрмәйме? "Салауат йыйыны"ның беренсеһе шәп кимәлдә үтте. Ундағы масштаблыҡ, әҙерлек, ҡунаҡтарҙың күплеге - барыһы ла күңелгә ятты. Алыҫ араларға ҡарамайынса, халыҡ унда атлығып барҙы. Ләкин йыл да бер үк төрлө сценарийлы (һүҙҙәре генә алмашына, миңә ҡалһа), бер үк төрлө ярыштарҙы үҙ эсенә алған йыйынды ҡарау күңелһеҙ һәм ялҡыта. Сараны 5 йылға бер үткәреү яҡшыраҡ булмаҫмы? Милли батырыбыҙ иҫтәлегенә арналған олуғ йыйынды эш планы блокнотында ҡуйыласаҡ билдә өсөн генә үткәреү яҙыҡтыр ул.

Йәштәр ҙә әүҙемләште хәҙер. Ниндәй генә төрлө саралар үткәрмәйҙәр. Һәм уларҙың айыҡ сара итеп иғлан ителеүе бигерәк тә һәйбәт. Ғөмүмән, айыҡ аҡыллы, тырыш йәштәребеҙ күбәйеүен күреп ҡыуанам. Ләкин ошондай сарала ла "бөтә көтөүҙе боҙған һыйырҙар" осрай. Яңы ғына йырлы-моңло фестивалдә булырға тура килде. Ҡайһы бер артистарҙың эскән килеш сәхнәгә сығып, былғандап тороуына ныҡ йән көйҙө. Хөрмәтле кешеләрҙең үҙҙәрен шулай тотоуы насар күренеш булды. Ойоштороусылар алдағы йылдарҙа ошондай моменттарға иғтибарлыраҡ булыр, тип өмөтләнәм. Күпме тырышлыҡ һалып үткәргән сарағыҙҙың бәҫен ебәреүгә ҡул ҡуймағыҙ.

Фәнил ӘҠСӘНОВ.
Стәрлетамаҡ ҡалаһы.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Ни өсөн тормошобоҙҙа негатив күбәйҙе?

(Башы 1-се биттә).

Көнһылыу КОТЛОБАЕВА, биолог, педагогика ветераны: Бик сетерекле һорау. Негатив һәм позитив, йәғни тиҫкәре һәм ыңғай күренештәр тигәндә кем нимәне күҙҙә тоталыр бит... Фекеремде еткерә алыу өсөн миҫал килтереп ҡарайым. Беҙ ултырған нигеҙ Аратау битендә ине. Өләсәйем, һуғыштан элек ул тау тотош урман, ишек алды аша шишмә аға ине, тип һөйләй торғайны. Мин белгәндә ул тауҙағы урман юҡ, әммә итәге тас ҡуйы үлән, аллы-гөллө сәскәләр һәм туп-тулы еләклек булды. Хәҙер ул шайтан таяҡтары баҫып алған таҡыр битләү булып ҡалған.

Бөтөн илде солғап алған ошондай күренештәр, тәбиғәттең ярлыланыуы, бөлөүе йөрәк ярыр негативтарҙың береһе инде. Әммә был миҫал менән баяғы төшөнсәләрҙе асыҡларға ине ниәтем. Һәр быуын үҙен уратып алған тормоштоң ғына шаһиты. Һәм күптәргә тирә-йүн мәңге ошондай булған һәм шулай булырға тейеш кеүек тойола. Шуға ла, ҡурсаулыҡтарҙың төп бурысы - тәбиғәтте тәү булмышында, боҙолмаған килешендә эталон итеп һаҡлап ҡалыу; башҡа тарафтарҙағы үҙгәрештәрҙе ваҡытында асыҡлау, сәбәптәрен аныҡлау, тәбиғәткә төҙәлгеһеҙ яралар һалмаҫ элек тейешле саралар күреп өлгөрөр өсөн.

Йәмғиәт эсендә лә шундай уҡ хәлдәр күҙәтелә. Болғаныш, ҡыйралыш, йәнһыйыш йылдары йәмғиәт өсөн дә эҙһеҙ үтмәгән. Бөгөн ана шул үткәнебеҙҙең ғибрәтле ваҡиғалары халыҡ тарихына битараф булмаған күңелдәрҙә бик ныҡ негатив тыуҙыра. Бөгөнгө негатив күренештәрҙән мин йәмғиәт нигеҙе булған ғаилә институтының юҡҡа сығыуын миҫал итеп килтерер инем. Ғаилә ҡиммәттәре ергә һалып тапалған. Нимә ул ғаилә, ул ысынында ниндәй булырға тейеш икәнен белмәгән заман эсендә йәшәп ятабыҙ. Нәк магазиндарҙағы кеүек хәл: уның да кәштәләре күптән инде ысын ризыҡтың йәшкә тауарҙың ҡайһылай була икәнен белмәй. Яһалма фальсификаттар, күсермәләр, муляждар менән тулған ул. Аҡ-ҡара, яҡшыяман, изге-яуыз, хәләл-харам һәм башҡа йәмғиәтте йәмғиәт итә торған төшөнсәләр бөтөнләй буталды. Әҙәп ҡағиҙәләре иҫкелек ҡалдығы итеп сүплеккә ырғытылған. Ошо мәхшәр эсендә нисектер һаҡланып ҡалған өлгөлө, ысын ғаиләләр ысын мәғәнәһендә маҡтаулы, яҡлаулы, һаҡлаулы, өҫтөнлөклө урын биләй алмай.

Ер йөҙөндәге дәүләт программалары эсендә "Өлгөлө ғаилә булыу - отошло" тигәне булғаны юҡ. Ирһеҙ бала табыу (ә бит был бала атайҙы һәм ярты туғандарын белмәй үҫә), йәштәрҙең ятаҡ хәлендәге никахһыҙ тормош менән йәшәп ятыуы, айырылышыуҙар, ярым-ярты ғаиләләр ғәҙәти хәлгә әйләнеп бөттө инде. Эскелек, наркомания, суицид һәм аҙғынлыҡ кеүек күренештәрҙең тамыры ла тап ғаиләлә ята.

Ғаилә ҡиммәттәрен тергеҙеү өсөн үрнәктәр булған, бар. Атабыҙ Әҙәм ғ.с һәм әсәбеҙ Һауа (р.ғ) ғаиләһе, бар ғаләмгә бәйғәмбәр итеп ебәрелгән Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм тормошо, ғаиләһе барыбыҙ өсөн дә йәшәү өлгөһө булып тора. Аллаһ Тәғәлә тарафынан төшөрөлгән Көрьән Кәримебеҙ бар кешелек өсөн йәшәү инструкцияһы, күрһәтмә ул. Уның ҡөҙрәте тормоштағы бөтөн тиҫкәре энергияны юҡҡа сығара ала. Ислам иң беренсе нәүбәттә - йәшәйеш ҡануны. Тап бына ул ҙур бәләләрҙең башы булыр негативтарҙан аралап тора ла инде әҙәм балаһын.

Ғөлфиә ХӘБИРОВА, компания хеҙмәткәре: Кешенең донъяны ҡабул итеүенә, үҙенең эске кисерештәренә бәйле негатив хаҡында һүҙ бара икән, мин уны күбәйҙе тип уйламайым, сөнки күп нәмә кешенең үҙенә, уның кәйефенә, һаулығына һәм башҡа шундай факторҙарға бәйле бит. Мәҫәлән, ауырыу кеше үҙенең хәле менән бәйле насар уйҙарға, төшөнкөлөккә бирелә, кәйефе булмай. Икенсе берәү тормошо менән ҡәнәғәт түгел: эшен яратмай йә эш хаҡы аҙ, йә ғаиләһендә тыныслыҡ юҡ, ти. Был кешенең үҙенә ҡарай йүнәлтелгән эске негатив булһа, йыш ҡына ул тышҡа ла бәреп сыға һәм кире энергия, хатта агрессия рәүешендә башҡаларҙың да тормошон ағыулай. Шул уҡ ваҡытта негатив объектив сәбәптәргә лә бәйле. Ҡиммәтселек, эшһеҙлек, эш хаҡтарының, пенсия-пособиеларҙың әҙ булыуы, социаль ғәҙелһеҙлек кешелә кире тойғолар, асыу, агрессия тыуҙырмаймы ни? Әлеге сирле кеше миҫалын дауам иткәндә генә лә асыҡ күренә: күпме негативҡа дусар ул! Табипҡа алдан яҙылыу тарихынан башлап. Ярай, берәй аҙна-ун көндән ул, ниһайәт, табип ишеге төбөндә тора, ти. Табипҡа сират - үҙе бер "сират күпере" икәне поликлиникаға йылына бер-ике барып киткән кешегә лә хатта яҡшы таныш. Һәр кем сиратһыҙ "инеп кенә" сығырға теләй: кемдер анализ һөҙөмтәһен ала, кемдер - ҡул ҡуйҙыра, кемдеңдер - температураһы юғары... Ниһайәт, табипҡа эләгеү ҙә еңеллек килтермәй: ул һөйләшер-һөйләшмәҫ, кәйефе юҡ икәне күренеп тора; башын күтәрмәй яҙа ла яҙа, йә компьютерға текәләп ҡата. Уны ла аңларға була: медицина хеҙмәткәрҙәренә ҡасандан бирле вәғәҙә ителгән "лайыҡлы эш хаҡы" уларҙың төштәренә лә инеп сыҡҡаны юҡ бит. Ә бына шул арҡала килеп тыуған негативтар сирле башына өйөлә. Ғөмүмән, негатив кешене өйҙә, эш урынында, урамда, йәмәғәт транспортында, дауаханала, магазинда, хатта театрҙа - бөтөн ерҙә һағалай. Хәлде үҙ контролендә тотмаған, тиҙ ҡабыныусан, ғәрсел, үпкәсел ҡайһы берәүҙәр ана шул өйөрмә эсенә килеп эләгә лә, үҙе лә һиҙмәҫтән, ошо негативты үҙенә ҡабул итә, шуның менән "ауырый" башлай: асыулана, ғәрләнә, йәне көйә, ҡан баҫымы күтәрелә, нервылары ҡаҡшай, йоҡлай алмай интегә... Иң мөһиме - негативтың бына ошондай ауына эләгеүҙән һаҡ булырға, быныңөсөн үҙеңдә тыныслыҡ һәм көслө ихтыяр тәрбиәләргә, үҙеңдең кимәленән түбән төшмәҫкә; нахаҡ, ғәйбәт, мыҫҡыллау кеүек ҡайһы бер ыуаҡай быҫраҡлыҡтарҙы төптө ҡабул итмәҫкә, доға, йога йә башҡа берәй психологик алым ярҙамында таҙарынырға, позитив көйләнешкә өйрәнергә кәрәк. Шул ваҡытта психикағыҙ ныҡ, сәләмәт булыр һәм бер ниндәй негатив та энергетик балансығыҙҙы боҙа, емерә алмаясаҡ.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
яҙып алды.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡоролоҡ һөҙөмтәһендә Хәйбулла, Көйөргәҙе, Йылайыр һәм Баймаҡ райондарында ғәҙәттән тыш хәл режимы индерергә ниәтләй. Ҡоролоҡ һөҙөмтәһендә сәсеүҙәр һәләк була тип 20 райондан сигнал килгән. Ә бына Хәйбулла, Көйөргәҙе, Йылайыр һәм Баймаҡ райондарында ситуация көрсөк хәленә килеп еткән, шуға күрә лә был муниципалитеттарҙа тикшереүҙән һуң ғәҙәттән тыш хәл режимы иғлан итеүҙәре мөмкин.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында Әр-Рәхим мәсете төҙөлөшө тергеҙелде, объектта техника эшләй башланы. Салауат Юлаев проспектында Өфөнөң иң матур мәсеттәренең береһенең төҙөлөшө 2016 йылда туҡтатыла. Өфөләге иң билдәле оҙаҡ төҙөлгән бина, Әр-Рәхим мәсете 2000 йылдар башынан төҙөлә. 2011 йылда "Урал" хәйриә фонды төҙөлөштөң берҙәнбер бағыусыһы була.

✓Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров рәйеслегендә Башҡортостан хөкүмәтенең аҙна һайын уҙғарылған оператив кәңәшмәһен хәҙер "Бәйләнештә" социаль селтәрендә төбәк етәксеһе хакимиәтенең сәхифәһенә яҙылыусылар тура эфирҙа ҡарай ала. Беренсе тура эфир дүшәмбе, 22 июлдә, булды. Башҡортостан Хөкүмәтенең YouTube-каналдағы трансляцияһы ла буласаҡ. Ул иртәнге сәғәт 10-да башлана.

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Өфөлә 26-27 сентябрҙә Рәсәй субъекттарының һәм сит дәүләттәрҙең рәсми делегациялары ҡатнашлығында Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС илдәре төбәктәренең Бишенсе кесе эшҡыуарлыҡ форумын уҙғарыу тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.

✓Өфөнөң бөтә райондарын һәм Өфө районын тоташтырасаҡ йылға маршруты проектын мэр Өлфәт Мостафин рәйеслегендә "Инвестсәғәт" ҡала кәңәшмәһендә тикшерҙеләр. "Позитив" компанияһы бәләкәй судноларөсөн ете туҡтау урыны булдырырға, көтөү урыны, кафе, ресторандар, "Әсә һәм бала" бүлмәһе, медпункттар, ҡотҡарыу станциялары һәм бер нисә ҡунаҡхана бүлмәһе эшләргә күҙаллай.

✓ *"Заманалар булған элгәре, булған илдең батыр улдары..." тип йыуанырға тура килә беҙгә бөгөн. Кәрәк саҡта ҡалҡандай булып илен, халҡын, хәҡиҡәтте яҡларҙай, ил терәге булырҙай ир-азаматтар ҡайҙа бөгөн, ау!*

БЫЛ АЙҘА...

Йәйҙең һуңғы айы - урағай ҙа килеп етте. Исеменән үк күренеүенсә, был айҙа уңыш йыйыу, ураҡ эштәре башлана. Быйылғы йәйҙең һауа торошо, урыны менән күҙәтелгән ҡоролоҡ касафаты әллә ни мул уңышҡа булышлыҡ итмәһә лә, һәр йыл үҙ һыйы, үҙ ризығы менән менән килә. Урағай ҙа беҙҙе булғанына ҡәнәғәтлек ҡылырға өйрәтер. Илдә булһа, иренгә тейә, ти халыҡ әйтеме. Рәсәйҙең быйылғы йыл уңышына күҙаллауҙар буйынса, ул былтырғынан яҡшыраҡ булыр, тип тә көтөлә, һәм ул нигеҙҙә сәсеүлек майҙандарын арттырыу иҫәбенә тәьмин ителәсәк. РФ ауыл хужалығы министры Д.Патрушевтың әйтеүенә ҡарағанда, Рәсәй иген һатыу буйынса быйыл да донъя лидерҙары рәтендә ҡала. Башҡортостанда ла бөртөклөләр уңышын арттырыу тактикаһын ужым культуралары сәсеүлектәрен йылдан-йыл киңәйтеүҙә күрәләр. Игенде юғалтыуһыҙ, ҡоро көндәрҙә йыйып алыу - уңыштың яртыһы, тип тә әйтергә була, шуға ла урағайҙың беҙгә аяҙ, матур көндәр бүләк итеүен теләйек.

БУЛҒАН ИЛДЕҢ АҪЫЛ УЛДАРЫ...

Урағайҙың тап ана шундай ҡыҙыу, ҡояшлы, эшсән ай икәне уның йондоҙлоҡ билдәләренән дә күренеп тора: планетаһы - Ҡояш, тылсым билдәһе - Арыҫлан, металы Алтын булған был айҙа башҡорт халҡының бына тигән ир арыҫландары тыуған. Уларҙың вазифа-дәрәжәләрен атап тормайынса, исемшәрифтәрен әйтеү генә лә был легендар шәхестәрҙең бөйөклөгөн бөтөн ҡөҙрәтендә һәр кемебеҙҙең күҙ алдына баҫтыра: Булат Рафиҡов, Миңлеғәли Шаймуратов, Зәкәриә Аҡназаров, Әхиәр Хәкимов, Харис Йософов... Шуныһы ла мәртәбә: башҡорттоң ошо бөйөк улдарының ҡаһарманлыҡ өлгөһө, эшмәкәрлек даирәһе беҙҙең үҙ милләтебеҙ мөхитенән тыш та киң билдәле. Исемдәре ғаләм күгенең сағыу йондоҙҙары рәтендә балҡыған шәхестәребеҙ иҫтәлеген һәр кемебеҙ күңелендә йөрөтә. Иҫән булһа, әгәр, мәҫәлән, Булат ағай Рафиҡов, бөгөн ул 85-ен тултырған аҡһаҡал рәүешендә, кәңәш-төңәш түренән төшмәй, рухиәтебеҙ арғымағының йүгәнен ҡаҡҡылап, хаҡлыҡ юлын күҙәтеп, зирәк аҡылын артабан да милләт үҫешенә бағышлап йәшәр, тағы ла матур-матур әҫәрҙәр ижад итер ине. Яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре, 1981-1988 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы секретары, 1988-1998 йылдарҙа "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире, 1990 йылдарҙа башҡорт ырыуҙары йәмәғәт хәрәкәте лидеры, С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры **Булат Рафиҡовтың тыуыуына быйыл 4 августа 85 йыл тула.** "Әҙәби, мәҙәни мөхиттә, халҡыбыҙҙың ижтимағи-фәлсәфәүи донъяһында, милләттең үҙаңын үҫтереүҙә Булат Рафиҡовтың өлөшө ҙур булды...Милләт тип, халҡым тип яныусыларҙың береһе булды ул, шуға ла ҡалын тарих ҡатламдарын аҡтарып, романдар ижад итте - замандаштарына ҡанлы һәм данлы үткәнебеҙҙе күрһәтеп, беҙҙең дә бәләкәй халыҡ түгел икәнде аңлатырға тырышты", - тип яҙғайны Булат Заһретдин улы хаҡында яҙыусы Әмир Әминев "Йәшлек" гәзитендә (1999, 5 август). Үҙе иҫән сағында Булат ағайҙың Яҙыусылар йыйылышында шулай тип әйткән һүҙҙәре теркәлгән: "Тарихсылар тотонмағас, мин үҙем халҡым тарихы ҡоҙоғона төшөргә йөрьәт итәм. Беҙҙең тарихыбыҙ бик тәрәндә ята... шулай уҡ боронғо бөтә донъя тарихына барып тоташа..." Ғүмеренең һуңғы ун йылы тирәһендә бер-бер артлы тарихи романдар ижад иткән яҙыусының ырыуҙар хәрәкәтен ойоштороп, йыйындар үткәреп, милләтте берләштереү йүнәлешендәге ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлеге һуңынаныраҡ "башҡорт милли идеяһын тыуҙырыуға булышлыҡ итте" тип бик дөрөҫ билдәләнде.



Ошо ай уртаһында, **15 августа** (1914 йыл), тағы бер ҡаһарман шәхесебеҙ - 78 һуғышсыһы Советтар Союзы Геройы исемен алған легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал-майор **Миңлеғәли Шаймуратовтың тыуыуына 120 йыл тула.** Һуғыш ваҡытында хәрби журналист булған билдәле шағир Константин Симонов "Башҡорт дивизияһында" тигән очеркында Шаймуратов хаҡында "... ул инглиз, ҡытай, уйғыр, ҡаҙаҡ телдәрен яҡшы белә, шуға ла, күрәһең, Хөкүмәт заданиеһы буйынса ярты донъяны урап сыҡҡан кеше", тип яҙа. Ысынлап та, һуғыштан алда Шаймуратов Ҡыҙыл армия Генераль штабының Разведка идаралығы начальнигы ярҙамсыһы, унан Төркиәлә, аҙаҡ Ҡытайҙа хәрби илсе булып эшләй. Һуғыш башланғанда ул Ҡыҙыл Армия Генераль штабының бүлек начальнигы ярҙамсыһы, шул уҡ ваҡытта Кремлде һаҡлаусы часть командиры булып хеҙмәт итә. Биографияһының ошо юлдары Миңлеғәли Минһажетдин улын грамоталы хәрби белгес, талантлы стратег булараҡ ҡына түгел, ә юғары мәҙәниле, интеллектуал шәхес итеп тә күҙ алдына баҫтыра.

Халҡыбыҙҙың яратҡан улдарының береһе - сирек быуат Башҡортостан Хөкүмәтенә етәкселек итеп (1962-1986), эшмәкәрлеге "Аҡназаров феномены" исемен алған **Зәкәриә Аҡназаровтың тыуыуына (1924 йыл, 22 август) 95 йыл тула.** Ҙур вазифалы шәхес булһа ла уның иҫ киткес кеселеклеге, баҫалҡылығы, ябайлығы һәм эшлеклеләге хаҡында бөгөн дә заманында уны күреп-белгән кешеләр легенда итеп һөйләй. Был айҙа **(23)** тағы ла бер легенда - Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, әҙәби тәнкитсе, тәржемәсе, филология фәндәре кандидаты, С.Юлаев исемендәге премия лауреаты, 25 йыл буйына Мәскәүҙә "Литературная газета"ла бүлек мөдире булып эшләгән һәм ижад иткән **Әхиәр Хәкимов** донъяға килгән (1929-2003). 14 йәшендә ҡасып һуғышҡа китә, парашюттан һикерергә өйрәнә, радист курсында уҡый. Аҙаҡ билдәле кинорежиссер булып киткән Григорий Чухрай уның командиры була. 1943 йыл һауа-десант ғәскәрҙәре составында "полк улы" сифатында һуғыштарҙа ҡатнаша. Легендалар, легендалар... Башҡа тағы ҡайһы халыҡтың шундайын да бөйөк яҙмышлы ҡаһарман ир-егеттәре бар икән! Салауат батырыбыҙҙың ерҙәше, тағы бер баһадирыбыҙ бар әле урағай айында тыуған: **24 августа** милли һәм ирекле көрәш буйынса иң тәүге РСФСР чемпионы, күп тапҡырҙар Башҡортостан чемпионы, самбо, классик, ирекле һәм милли көрәш төрҙәре буйынса СССР спорт мастеры, Көньяҡ Уралда дзюдо мәктәбенә нигеҙ һалыусы, дзюдо буйынса СССР-ҙың йыйылма командаһы тренеры, Почет һәм Салауат Юлаев ордендары кавалеры **Харис Йософовтың тыуыуына - 90 йыл (1929-2009)**. Тренер булараҡ, көрәш төрҙәре буйынса 4 - донъя, 14 Европа чемпионы, 250 спорт мастеры әҙерләгән.

Быйылғы йәй ҡайһы бер райондар ерен ямғырһыҙ сарсатты, ләкин тағы бер тулы ай бар әле: ҡорғаҡһыған ерҙәр шифалы ямғыр көҫәй. Билдәһе - Арыҫлан, планетаһы - Ҡояш, металы Алтын булған урағай шифалы ямғырҙан һуң шытым бирер яңы үрсемдәр көтә. Милләтебеҙ хас та әлеге ҡорғаҡһыған тупраҡ ише: ул да бит, атлаһа, ер һелкетер, эшләһә, йәрәк елкетер, әйтһә, хаҡлыҡ тергеҙер аҡыллы һәм ғәйрәтле уландарын көтә. "Заманалар булған элгәре, булған илдең батыр улдары..." тип йыуанырға тура килә беҙгә бөгөн. Кәрәк саҡта ҡалҡандай булып илен, халҡын, хәҡиҡәтте яҡларҙай, ил терәге булырҙай ир-азаматтар ҡайҙа бөгөн, ау!

Урағайҙың ҡайһы бер күренекле көндәрен барлайыҡ: Һауа-десант ғәскәрҙәре **(2)**, Тимер юлсылар **(4)** көндәре, Хиросима көнө. Ядро ҡоралын тыйыу өсөн Бөтөн донъя ғәмәлдәр, шулай уҡ "Донъя табиптары - тыныслыҡ өсөн" халыҡ-ара **(6)**, Донъялағы аҫаба халыҡтар халыҡ-ара көнө **(9)**, Физкультурниктар **(10)** көнө, Ҡорбан байрам **(11)**, ошо уҡ көндә Төҙөүсе, БР умартасылар көндәре; Хәрби-Һауа көстәре, Йәштәр көндәре **(12)**, Рәсәй Һауа Флоты **(18)**, Терроризм ҡорбандарын халыҡ-ара иҫкә алыу **(21)**, РФ Дәүләт флагы **(22)**, Шахтер **(25)**, Рәсәй киноһы **(27)**, Халыҡ-ара дуҫлыҡ **(30)** көндәре билдәләнә.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияны тапшырыу буйынса комиссия документтар ҡабул итә башланы. Материалдар 2019 йылдың 1 сентябренә тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, Башҡортостан Журналистар союзы, 912-се офис (Матбуғат йортоноң 9-сы ҡатында). Телефон (факс): (347) 276-42-66.

✓Күп фатирлы йорттар төҙөүгә ер участкаларын бүлеү законлылығын төбәктә хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү кәңәшмәһендә тикшерҙеләр. Уны Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров үткәрҙе. Республика алданған өлөшсөләр һаны буйынса Волга буйы федераль округында "лидер" һәм уның нисек шулай килеп сығыуын асыҡларға кәрәк, тине төбәк етәксеһе.

✓10 августа сәғәт 11-ҙә "Башҡортостан" милли паркы биләмәһендә өсөнсө "Тәбиғи бал" фестивале уҙғарыла. Фестиваль Нөгөш һыу һаҡлағысы, "Спартаксы" балалар һауыҡтырыу лагеры эргәһендә була. Программала: башҡорт балын һәм ҡортсолоҡ продуктын тәмләп ҡарау һәм һатыу, экологик яҡтан таҙа аҙыҡ-түлек һәм ҡул эштәре йәрминкәһе, уҡтан атыу, үлән сәйҙәре әҙерләү, ағас һырлау буйынса оҫталыҡ дәрестәре һәм башҡалар.

✓Һуңғы туғыҙ айҙа Башҡортостанда 12 ғаилә яңы тыуған малайҙарына Радий тип исем ҡушҡан. "Башинформ" агентлығына төбәк Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетында һөйләүҙәренсә, былтырҙан республикала - Өфөлә, Белоретта, Бөрөлә, Баймаҡта, Ишембайҙа, шулай уҡ бер нисә районда 12 бәләкәй Радий теркәлгән.

✓"Ҡунаҡһарай" сауҙа-эш комплексында 6 августа "Башҡортостан Республикаһының туристик сувениры" республика конкурсы ойошторола. Еңеүселәр һәм призерҙар октябрҙә Һарытауҙа "Туристик сувенир" Бөтә Рәсәй конкурсының дөйөм милли финалында ҡатнашасаҡ. Конкурс барышында семинарҙар һәм оҫталыҡ дәрестәре, "Туристик сувенир" Бөтә Рәсәй фестиваль-конкурсына нигеҙ һалған Геннадий Шаталовтың сығышы ҡаралған.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ *"Старосталарҙың үҙ бурыстарын йәмғәт башланғысында тормошҡа ашырасағын иҫәпкә алып, старосталарҙы дәртләндереү маҡсатында конкурстар һәм башҡа саралар үткәреү айырыуса көнүҙәк", - тип иҫәпләй Константин Толкачев.*

ҠЫҪҠАСА

БӘЛӘБӘЙҘӘ...

✓**Радий Хәбиров Францияның Рәсәйҙәге илсеһе Сильви Берманды ҡабул итте. Яҡтар иҡтисади, гуманитар һәм социаль өлкәләрҙә хеҙмәттәшлекте тикшереҙе.** 23 июлдә төбәк етәксеһе Франция илсеһе менән бергә Бәләбәй һөт комбинатына йомшаҡ сырҙар етештереү төҙөлөшөнә беренсе таш һалыуҙа ҡатнашты. "Беҙ күптән Рәсәйҙә ошондай предприятие асырға ниәтләнә инек, Бәләбәйҙе һайлағанға тиклем илегеҙҙе арҡыры ла буй ҙа үттек. Бында үҙ эшен белгән һәм яратҡан иң киткес профессионалдар командаһы эшләй. Бында бик яҡшы сырҙар етештерелә, беҙ шәп завод таптыҡ", - тине Торри әфәнде. Ул шулай уҡ эксперттарҙың баһаһы буйынса башҡа төбәктәрҙән урындағы һөттөң ярайһы уҡ юғары сифатлы булыуын билдәләне. Ул етештереү урынын һайлауҙа төп шарттарҙың береһе булды. Бәләбәй һөт комбинатында бөгөнгө көнгә 750 кеше эшләй, заводта 23 сыр төрө етештерелә. Йыл һайын комбинат республика бюджетына 500 миллион һумға тиклем һалым күсерә.

✓**Башҡортостанда башҡорт телен ҙурлы өйрәнеү өсөн веб-ресурс булдырыла.** "Интерактив башҡорт теле" проекты дәүләт телдәрен һәм республика халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса 2,9 миллион һум күләмендә Башҡортостан Башлығы грантын алды. Веб-ресурс өҫтөндә Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институты командаһы эшләй. Проект сайтында интерактив онлайн-дәрестәр, видеороликтар, һүҙлектәр урынлаштырыласаҡ. 34 тематик дәрес уҙғарыу өсөн материалдарҙа - сәләмләү, һөйләшеү этикеты һүҙҙәре, ҙурлы күнекмә өсөн күнегеүҙәр. Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты ярҙамында 2019 йылда заманса тел ресурстары, аудиокитаптар, йәнһүрәттәр барлыҡҡа киләсәк, балалар өсөн донъя әҙәбиәте классиктарының тәржемәләре башҡорт телендә нәшер ителәсәк, фестивалдәр, байрамдар һәм мәҙәни-мәғариф акциялар уҙғарыласаҡ.

✓**Августан 2018 йылда эшләгән республика пенсионерҙары арттырылған пенсия ала башлай.** Эшләгән пенсионерҙарҙың страховка пенсияһын августа яңынан иҫәпләү буйынса бөтә кәрәкле эштәр тамамланған. "Август өҫтәмәһенең күләме индивидуаль һәм эшләгән осорға, эш биреүселәрҙән Пенсия фондына күсерелгән страховка взностарының суммаһына бәйле. Республиканың 248 мең пенсионеры яңы күләмдәге пенсия аласаҡ. Түләүгә сығымдарҙы финанслау тулы күләмдә тәьмин ителгән", - тине Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров. График буйынса пенсия түләү почта элемтәһе бүлексәләрендә 2 августан 24-енә тиклем башҡарыла. Кредит ойошмаларына аҡса килешеүҙә билдәләнгән ваҡытта күсерелә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

АСЫҠ ҺАЙЛАУҘАР

Һайлау участкаһы эшенә ниндәй ҙә булһа ҡыҫылыш ҡырҡа бөтөрөләсәк, тип белдерҙе журналистарға Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Илона Макаренко.

"Ошондай теләһә ниндәй ҡыҫылыштар ҡырҡа бөтөрөлһөн өсөн бөтә көсөбөҙҙө һаласаҡбыҙ. Һайлау системаһы иҫәбенә үҙҙәренә ниндәйҙер дивиденд, мәрәй эшләргә теләүселәргә юл ҡуймайбыҙ", - тип билдәләне ул. 8 сентябрҙә Өфөлә 410 һайлау участкаһын видеокамералар менән тәьмин итәләр. Барлығы 69 территориаль һайлау комиссияһы ла видеокамералар менән йыһазландырыласаҡ. Тотош республика буйынса 225 һайлау бюллетенен эшкәртеү комплексы (КОИБ) ҡулланыласаҡ. Майҙан алып һайлауҙарҙы ойоштороусыларҙы, йәғни 28 меңдән ашыу участка комиссияһы ағзаларын уҡытыу ойоштороlған.

Әйткәндәй, Башҡортостан башлығы вазифаһына 11 кандидаттан һигеҙ кеше теркәлгән. Уларҙан - "Берҙәм Рәсәй" партияһынан Радий Хәбиров, ЛДПР-ҙан - Иван Сухарев, "Ғәҙел Рәсәй"ҙән - Юрий Игнатьев, КПРФ-тан - Юнир Ҡотлоғужин, "Граждандар көсө"нән - Владимир Барабаш, Рәсәйҙең Пенсионерҙар социаль ғәҙеллек өсөн партияһынан - Владимир Кобзев, "Яблоко"нан - Зөлфиә Ғайсина, "Рәсәй патриоттары"нан - Рәфис Ҡадиров.

АУЫЛ СТАРОСТАҺЫ

БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары ҡабул иткән "Башҡортостан Республикаһында ауыл старосталары тураһында" закон үҙ көсөнә инде.

Шуға ярашлы, старосталарҙы биләмәләрҙең йәки ҡала советтарының (тораҡ пункт ҡала составына ингән осраҡта) вәкәләтле органдары тәғәйенләргә тейеш. Ауыл старосталары вәкәләттәре ваҡыты - икенән биш йылға тиклем. "Беҙ старосталарҙы урындағы үҙидара органдарының беренсе ярҙамсылары булараҡ ҡарайбыҙ, - тип билдәләне Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев. - Ауылда йәшәүселәр араһында йәмғиәт өсөн әһәмиәтле, мәҫәлән, тораҡ пункттарҙы төҙөкләндереү, йәмәғәт тәртибен һаҡлау, физик культураны, художестволы ижадты, халыҡ кәсептәрен үҫтереү менән бәйле мәсьәләләрҙе хәл итергә теләгән һәм үҙ өҫтөнә алырға әҙер булған әүҙем кешеләр бар". "Старосталарҙың үҙ бурыстарын йәмғәт башланғысында йәғни бының өсөн аҡса алмайынса тормошҡа ашырасағын иҫәпкә алып, старосталарҙы дәртләндереү маҡсатында конкурстар һәм башҡа саралар үткәреү айырыуса көнүҙәк", - тип иҫәпләй Дәүләт Йыйылышы рәйесе.

Старосталар граждандар сходы тәҡдиме менән тәғәйенләнә. Документта шулай уҡ ауыл старостаһы булырға теләгән кешеләргә талаптар, старосталарҙың вәкәләттәре яҙылған.

ТЫУЫМ КӘМЕЙ...

Башҡортостан Республикаһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығы коллегияһының киңәйтелгән ултырышында республикала 2019 йылдың тәүге ярты йыллығы йомғаҡтары буйынса төп демографик күрһәткестәр билдәләнде.

Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, быйыл алты айҙа төбәктә тыуымдың кәмеүе күҙәтелә, халыҡтың тәбиғи кәмеүе 4808 кеше тәшкил иткән. Башҡортостанда йыл башынан 19 622 бала донъяға килгән, ул уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 3540 сабыйға аҙыраҡ.

Билдәләгән осорҙа 24 430 кеше үлгән. Былтыр был һан 1548 кешегә күберәк булған. Дөйөм үлем структураһында, элекесә, алдынғы урынды ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙары биләй. Яман шештән үлем осраҡтарының аҙайыуы билдәләнә. Республикала үлем күрһәткесен кәметеү өсөн төбәк ҡан тамырҙары үҙәктәрен һәм беренсел ҡан тамырҙары бүлектәрен ҡайтанан медицина ҡорамалдары менән йыһазландырыу алып барыла, башланғыс стадияла онкологик ауырыуҙарҙы асыҡлау буйынса смотр кабинеттары булдырыу, флюорография үткәреү, төрлө профҡарауҙар, иртә стадияла бер яман шеш осрағын асыҡлаған өсөн 5 мең һум күләмендә дәртләндереү түләүҙәре кеүек саралар уҙғарыла.

МОБИЛЬ ҺАЙЛАУСЫ

2019 йылдың 8 сентябрендә теркәлгән урынынан ситкә киткән: командировкаға юлланғандар, икенсе ҡалала белем алғандар, ялдағылар, теркәлгән урыны буйынса йәшәмәгәндәр, шулай уҡ аҙ хәрәкәт иткән граждандар "Мобиль һайлаусы" механизмы менән файҙалана ала.

Торған урын буйынса тауыш биреү мөмкинлеге менән Башҡортостан Башлығын һайлауҙа һәм бер мандатлы округтарҙа (Өфө ҡалаһының Октябрь районында 9-сы Ҡояшлы һәм Нефтекама ҡалаһында 16 -сы Комсомол) Дәүләт Йыйылышы депутаттарын өҫтәмә һайлауҙа ҡулланырға була, тип белдерҙе Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе урынбаҫары Марат Ғәҙелов. "24 июлдән 4 сентябргә тиклем "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында республика биләмәһендәге 69 территориаль һайлау комиссияларының, Күп функциялы үҙәк бүлексәләренең һәм 97 филиалдың телефон ҡайһыһына торған урын буйынса һайлаусылар исемлегенә индереү тураһында ғариза бирергә мөмкин. Ә 28 августан 4 сентябргәсә республиканың 3 397 участка һайлау комиссияһының береһендә ғаризаны теркәргә була", - тип билдәләне Марат Ғәҙелов. Уның һүҙҙәренсә, ғариза бер тапҡыр ғына тапшырыла. Бер нисә ғариза бирелгән осраҡта, беренсеһе генә ғәмәлдә тип һанала. Ҡалғандары, һуңыраҡ яҙылғандары иҫәпкә алынмай.

ИҢ МАТУР АУЫЛ

Республикала "Башҡортостан Республикаһының иң матур ауылы" конкурсына старт бирелде. Уны "БР Муниципаль берәмектәре советы" ассоциацияһы ойоштора.

Бәйгелә халҡы һаны 5000 кешегә барып еткән Башҡортостан ауылдары ҡатнаша ала. Улар йыйылышта конкурста ҡатнашабыҙ тигән ҡарар сығарырға тейеш, шулай уҡ муниципаль район етәкселеге тәҡдиме булыуы шарт. Быйыл конкурс өс этапта уҙасаҡ. Беренсеһендә 1 августан 15 августа тиклем ғаризалар ҡабул ителәсәк. Улар рәҫланған положение буйынса баһаланасаҡ.

Икенсе этап 2019 йылдың 1-20 сентябрендә уҙасаҡ. Унда Башҡортостан юлдаш телевидениеһы эфирында финалсылар тураһында видеояҙма күрһәтелеп, тамашасылар тауыш биреүе ойоштороласаҡ. Алынған нәтижә һәм беренсе этап йомғаҡтары менән конкурс комиссияһы биш ауылды билдәләйәсәк. Өсөнсө этапта иң күп йомғаҡ баһаһын алыусылар араһынан еңеүселәр асыҡласанаҡ. Конкурс еңеүселәренә дипломдар һәм аҡсалата премия тапшырыласаҡ. I урын яулаусы ауылда "Башҡортостан Республикаһының иң матур ауылы - 2019" яҙыулы стела ҡуйыласаҡ.

Ярышта ҡатнашыу өсөн "Башҡортостан Республикаһының Муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһының башҡарма аппаратына ғариза бирергә кәрәк. Адресы: Өфө ҡалаһы, Туҡай урамы, 46, 221-се ҡаб. Һорауҙар менән (347) 280-85-09, (347) 280-81-82. телефондарына шылтыратырға.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Урал алды дала һәм көньяҡ урмандала зоналарында яҙғы культураларҙы йыйыу башланды. Ғәҙәттәгесә, тәүгеләрҙән булып борсаҡ менән арпа өлгөрә. Ете процент майҙанда 7,7 мең тонна борсаҡ һуғылған, уңыш бер гектарҙан 21 центнер тәшкил итә. 2,8 мең гектарҙан 7,3 мең тонна арпа йыйылған, уңыш ҡеүәте - 26 центнер. Әлеге ваҡытта 17 районда ураҡ эштәре бара.

✓Өфөлә Октябрь районының Глумилин-3 биҫтәһендә 500 урынлыҡ балалар баҡсаһы төҙөйҙәр. Проект эштәренә тендер тураһында мәғлүмәт дәүләт һатып алыуҙары сайтында баҫылған. Иң юғары килешеү хаҡы - 13,2 миллион һум, проектты ҡала бюджетынан финанслау күҙаллана. Бинаны өс ҡатлы итеү ҡарала, унда 23, шул иҫәптән ясле төркөмдәре урынлашасаҡ.

✓Төбәктәге ҙур ҡалаларҙа ете яңы юл төҙөлә. Өфөлә Глумилин биҫтәһендә - Рудольф Нуриев, Сипайловола - Глумилин, Затонда Летчиктар урамдарының дауамын һалалар. Стәрлетамаҡта Көбайыш биҫтәһендә Октябрь проспектындағы юлды; Ҡаранай Моратов урамынан Раевка трактына сығыусы юлды; Төҙөүселәрҙән Магистралгә тиклем участкала Октябрь проспектында бульварҙы төҙөйҙәр. Эштәр ағымдағы йыл аҙағынаса тамамланырға тейеш.

✓Ашығыс ярҙам бригадаһын берҙәм система аша тиҙ генә полиция хеҙмәткәрҙәрен саҡыртыу мөмкинлеге ҡаралған мобиль планшеттар менән йыһазландырыу маҡсатын тормошҡа ашырып, Башҡортостанда тиҙ ярҙам хеҙмәте өсөн 345 планшет компьютеры һатып алына. Планшеттар телефон функцияларын үтәргә, 7.1-ҙән кәм булмаған версиялы Android операция системаһында эшләргә тейеш.

✓ Һигеҙ махсус "LADA Granta" автомобилен производствола зыян күргән республикала йәшәүселәр аласаҡ. Билдәләп үтергә кәрәк, 18 йыл эсендә Башҡортостанда 1100 кеше страховка тәьминәте булараҡ махсус автомобиль алған, 84-е 2018 йылда тапшырылған.

✓Башҡортостанда 2020 йылда республикала 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына әҙерләнеү һәм уны байрам итеү буйынса төп саралар планы рәҫланды. Тейешле бойороҡҡа республика башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ *Бурыстарын түләмәүселәргә 414 иҫкәрмә ебәрелгән, 72 ғаилә буйынса социаль найм килешеүен тарҡатыу ғаризаһы судҡа тапшырылған. Шуларҙың 43-өбурысын өлөшләтә йәки тулыһынса түләгән.*

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

САНАНЫ ЙӘЙ ӘҘЕРЛӘЙҘӘР...

Үткән аҙнала "Торлаҡ хужалығы тармағында һөнәре буйынса иң яҡшыһы" ҡала һөнәри оҫталыҡ конкурсы үтте. Ул ике: теоретик һәм ғәмәли этаптан торҙо. Ҡатнашыусылар барыһы ла үҙҙәренең һәләттәрен күрһәтеп, ысынлап та оҫта икәнлектәрен раҫлаһа ла, иң-иңдәр генә еңеүсе була һәм улар баш ҡала данын республика конкурсында яҡлаясаҡ. "Ярыш барышындағы рух, сәм әлегә күҙәтеүсе ролендә генә сығыш яһаған йәштәрҙе лә был тармаҡҡа килергә этәргес булырына ышанам", - тине сираттағы оператив кәңәшмәне алып барыусы хакимиәт башлығы урынбаҫары Салауат Хөсәйенов.

Шулай уҡ үткән аҙнала Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин баш ҡаланың велосипедсылар йәмғиәте активистары менән осраште. Һуңынан унда ҡатнашыусылар күсмә кәңәшмәне Киров, Совет райондарында дауам итеп, урамдар буйлап велосипедтарҙа үтте, был категория өсөн булдырылған шарттар менән таныштылар. Һөҙөмтәлә коммуналь хужалыҡ тармағы менән берлектә ҡаланың велоструктураһы йүнәлешенә үҙгәрештәр индерергә кәрәк, тигән һығымта яһалды. Әммә был йәйәүләләргә, автомобилселәргә ҡатмарлыҡтар һәм хәүеф тыуҙырырға тейеш түгел.

Ә инде кәңәшмәнең төп темаһы булып ҡышҡы йылытыу миҙгеленә әҙерлек мәсьәләһе торҙо. Уның буйынса УИС МУП-ының башҡарма директоры Максим Петров сығыш яһаны. Мәғлүм булыуынса, сираттағы йылытыу миҙгеле тамамланғас та баш ҡаланың ресурс менән тәьмин итеү ойошмалары йылылыҡ селтәрҙәрен һәм инженер ҡорамалдарын яңы миҙгелгә әҙерләй башлай. Максим Геннадьевич белдереүенсә, йылытыу миҙгеленә йылылыҡ селтәрҙәре һәм инженер ҡорамалдары тулыһынса әҙер буласаҡ. Әлбиттә, миҙал ике яҡлы булған кеүек, бында тәьминәтселәрҙе генә түгел, ҡулланыусыларҙы ла күҙ уңына тоторға кәрәк. Сөнки ресурстар менән ҡулланған өсөн ваҡытында иҫәпләшмәү ремонт эштәрен тулыһынса башҡарыуға йәки ниндәйҙер урында нимәнелер алмаштырыуға тотҡарлыҡ яһай. Ә инде ҡулланыу ваҡыты үткән ҡорамалды ҡулланыу авария менән янай. Юҡҡа ғына, ҡайҙа нескә - шунда йыртыла, тимәйҙәр бит.

Артабан һүҙ "Өфө ҡалаһының берҙәм иҫәп-касса үҙәге"нең эшмәкәрлеге һәм йылдың тәүге яртыһында ҡулланылған торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн халыҡтан аҡса йыйыу тураһында барасаҡ. Был хаҡта ойошманың генераль директоры Айгөл Винникова бәйән итте. Билдәләнеүенсә, ярты йылда Өфө ҡалаһында торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн 6 миллиард 324 миллион һумлыҡ хеҙмәт күрһәтелһә, ул 97 процентҡа үтәлеп, 6 млрд 122 миллион һум йыйылған. Йылдың тәүге яртыһында бурыстарын түләмәүселәргә 414 иҫкәрмә ебәрелгән, 72 ғаилә буйынса социаль найм килешеүен тарҡатыу ғаризаһы судҡа тапшырылған. Шуларҙың 43-өбурысын өлөшләтә йәки тулыһынса түләгәнлектән, судҡа еткерелмәгән, 28 эш ҡарала, 1 ғаилә икенсе торлаҡҡа күсерелгән.

Әлеге ваҡытта РФ Дәүләт Думаһына берҙәм түләү документын булдырыу тураһында закон проекты тәҡдим ителгән. Был халыҡтың уңайлығын һәм һәр ресурс ойошмаһына айырым квитанциялар буйынса түгел, ә берҙәм түләүҙе, һәм шуның менән ваҡытты экономиялауҙы күҙаллай, бынан тыш та башҡа ыңғай яҡтары етерлек.

Нисек кенә булмаһын, үҙгәрештәр халыҡтың кеҫәһенә һуғырға, уларҙан халыҡ зыян күрергә тейеш түгел. Юҡһа, күрһәтелмәгән хеҙмәттәр өсөн хаҡ ҡуйыу ҙа, бер хеҙмәт өсөн ике тапҡыр түләү ҡағыҙы ебәреү күренештәре лә юҡ түгел.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

ҠЫСҠАСА

ЕЛДӘЙ ЕЛЕП АТТАРҘА...

✓ **"Терра Башкирия" ат-спорт турнирының сираттағы һигеҙенсе этабында Йылайыр, Ҡалтасы, Мәләүез, Стәрлетамаҡ, Өфө райондары аттары ҡатнашты.** Уның һөҙөмтәләре буйынса Стәрлетамаҡ районынан Евгений Семенов иң яҡшы һыбайлы тип танылды. Ҡағиҙә буйынса турнир ике этапта уҙа: тәүҙә район чемпионы асыҡлана, һуңынан беренсе-икенсе урын алыусылар үҙ-ара йәрәбә буйынса "Аҡбуҙат" ипподромы аттарында ярыша. "Терра Башкирия" ат-спорт турнирының финалы 11 октябрҙә - Республика көнөндә үтәсәк.

✓ **Баш ҡалала "Бәхетле билет" тип аталған социаль проекттың тормошҡа ашырылыуы күптәргә мәғлүмдер.** Уның сиктәрендә июль башында ВДНХ майҙансығында, "Рәсәй - минең тарихым" паркында ойоштороло фотокүргәҙмә проектҡа йәнлелек өҫтәп ебәрҙе: 12 етем бала, Салауат, Белорет, Балтас райондарына, Өфө, Санкт-Петербург, Төмән, Түбәнге Новгород ҡалаларында үҙ йортон табып, атай-әсәйле булды. Тағы ла биш осраҡ буйынса эш алып барыла. Проект өфөләрҙең һәм республика халҡының иғтибарын етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы уллыҡҡа, ҡыҙ итеп алыу проблемаһына йүнәлтә.

✓ **Республиканың Дәүләт Йыйылышы "тахограф" төшөнсәһен нығытыу тураһында закон ҡабул итте.** Документ шулай уҡ йөк һәм пассажир ташыу менән шөғөлләнгән шәхси эшҡыуарҙарҙың һәм юридик шәхестәрҙең транспорт сараларына тахографтар ҡуйыуҙың мотлаҡ талаптарын тасуирлай. Республика парламентының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, закон юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итә. Тахограф бер туҡтауһыҙ транспорт сараһының тиҙлеген һәм маршрутын теркәй. Ул водителдең ҡасан туҡтауы һәм ял итеүе тураһында ла яҙа. "Тахограф" төшөнсәһенә бәйләнгән положениелар быйыл 1 ноябрҙән үҙ көсөнә инәсәк. Законда яҙылғанса, транспорт сараларының юл хәрәкәтендә ҡатнашыуына рөхсәт биреү тәртибе нормалары 4 августан эшләй башлаясаҡ.

✓ **Ошо көндәрҙә "Аҡбуҙат" ипподромында үткән, "Башҡорт ҡымыҙы" брендын тергеҙеү һәм пропагандалау, республикала ауыл хужалығы етештереүсеһен һәм кесе эшҡыуарлыҡты хуплау төп маҡсаты булып торған "Йәйләү" башҡорт ҡымыҙы республика этно-фестивале төбәктең барлыҡ райондарының ҡымыҙ оҫталарын йыйҙы.** БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Илшат Фазрахманов йылҡысылыҡ, ҡымыҙсылыҡ республиканың һәр кешеһенең генында ятыуын, ул республика халҡының традицион кәсепселеге булыуын юҡҡа ғына билдәләмәне. Ысынлап та, йылҡы һаны буйынса Башҡортостан Рәсәйҙә икенсе урынды биләһә, ҡымыҙ етештереү буйынса - беренсе (илдәге дөйөм күләмдең 46 проценты). Сара сиктәрендә ҡымыҙсылар съезы һәм үҙ продукцияһының иң яҡшыһы булыуын раҫлау хоҡуғы өсөн ҡымыҙсылар конкурсы ойошторолдо. Башҡортостан райондарынан 20 кеше ҡатнашып, баһалама ағзаларына үҙҙәре етештергән эсемлекте тәҡдим итте. Һөҙөмтәлә иң оҫта ҡымыҙсы тип Әлшәй районынан Әлфиә Ғәниева танылды. Шулай уҡ теләгән һәр кеше ҡымыҙҙарҙы тәмләп ҡарап, һатып алыу мөмкинлегенә эйә булды.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

ӨФӨЛӘ - ҠОРБАН БАЙРАМЫ

Ҡорбан байрамы - мосолман календарында төп һәм әһәмиәтле байрам. Ул Ураҙа ғәйетенән һуң 70 көн үткәс билдәләнә.

2019 йылда байрам 11 августҡа тура килә. Ҡорбан байрамы йәкшәмбегә тура килгәс, Башҡортостанда дүшәмбе - 12 август ял көнө тип иғлан ителгән. Мәрияла белдереүҙәренсә, Өфөлә Ҡорбан байрамында дини йолаларҙы башҡарыу өсөн ике махсус майҙансыҡ ойоштороу күҙаллана. Беренсе - "Каруан" сауҙа үҙәге алдында (Пригородная урамы, 55), ул Зинин ҡасабаһы янында урынлашҡан, ә икенсеһе - Орджоникидзе районында Төньяҡ автовокзал биләмәһендә. "Бындай ҡарар дөйөм махсус майҙансыҡ ойоштороуҙың ыңғай һөҙөмтәһен, шулай уҡ ҡаланың төньяҡ өлөшөндә йәшәүселәрҙең майҙансыҡты Черниковка һәм Инорс биҫтәләренә яҡыныраҡ булдырыу теләген иҫәпкә алып ҡабул ителде - 2018 йылда "Каруан" сауҙа үҙәге алдында тәүгә йолалар өсөн берҙәм майҙансыҡ эшләне", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр ҡала хакимиәтендә.

Өфө ҡалаһы мәсеттәре һәм мосолман ойошмалары был йоланы Ислам ҡанундарына ярашлы башҡарасаҡ, ә ҡаланың һәм республиканың ветеринария хеҙмәте ошо майҙансыҡҡа ниндәйҙер сир билдәләре булған ҡорбан малдарының эләгеүенә юл ҡуймаясаҡ. Байрам вәғәзе тамамланғас, "Ватан" этно-паркы биләмәһендә һәм "Башҡортостан" лайфстайл үҙәге алдында "Ферзь" эшлекле клубы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы "Ҡорбан Хәләл Fest" байрамын үткәрә. Фестиваль программаһында төрлө саралар - көрәш буйынса спорт ярыштары, байрам концерты һәм былау менән һыйлау ҡаралған. Йәмәғәт тәртибен һаҡлау өсөн байрам саралары уҙғарылған урындарҙа хоҡуҡ һаҡлау органдары һәм Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге вәкилдәре эшләй.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Бәпембә

❖ Бәпембә тамырын киптереп, он кеүек тартып алһағыҙ, хәтер юғалтыу менән бәйле атеросклероз ваҡытында артыҡ холестериндан ҡотолоу өсөн яҡшы дауа буласаҡ. Ашарҙан алда 5 грамм ошо порошокты ҡабул итһәгеҙ, 6 айҙан хәл яҡшырасаҡ.

❖ Түбән әселектәге гастрит мәлендә бәпембә япраҡтары шифалы. Япраҡтарҙы йыуып, 20-30 минутҡа тоҙло һыуға һалып тороргә. Һалҡын һыу менән сайып, эҫе һыуҙа бешекләргә лә, ит турағыстан үткәреп, ҡалын ғына туҡыма аша һығырға. Ошо һутҡа 1:1 күләмендә һыу ҡушырға һәм 2-3 минут ҡайнатырға. Көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 1/4 стакан эсергә.

Баҡса еләге

❖ Юғары ҡан баҫымы, атеросклероз ваҡытында 50 грамм баҡса еләгенә 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 50-шәр мл эсергә.

Мандарин һуты

❖ Аяҡта бәшмәк ауырыуы булһа, зарарланған тирегә мандарин һуты һөртөргә була.

Ҡартлыҡтан дауа

❖ Ҡартлыҡтан дарыу булмаһа ла, организмды йәшәртеүсе гормондар бүленеп сығыуға булышлыҡ итергә мөмкин. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, сүкәйеп ултырғанда аяҡтарға көсөргәнеш ныраҡ төшә һәм йәшлек гормоны бүленеп сыға икән. Был гормон күбәйһә, кәйеф күтәрелә, физик торош та яҡшыра.

Шәкәр диабеты

❖ Шәкәр диабетынан томат һуты файҙалы. Ул матдәләр алышыныуҙы яйлай, организмдан шлактарҙан таҙарта.

Йәшел сәй

❖ Йөрәгегеҙ ауыртҡан кеүек тойолһа, көнөнә 6-7 сынаяҡ йәшел сәй эсегеҙ. Унда ҡанды шыйығайтыусы матдәләр бар, был иһә миокард инфаркты үҫешенән һаҡлай.

Айбикә ЯҠУПОВА.

✓ *Йәмғеһе 30 йәш кеше проект төҙөгән, шуларҙың бишәүһе аҡсалата ярҙам алды, икәүһенә шәхси остазлыҡ тәҡдим ителде. Башҡорт йәштәре араһында бизнес-проект тәҡдим итеүселәр барлыҡҡа килеүе ҡыуандырҙы.*

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!

БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

Был орнамент Урта Азияла ныҡ таралған, ҡайһы бер тикшеренеүселәр уны Яҡын Көнсығыштың урта һәм боронғо сәнғәте менән бәйләй. Беҙҙең көндәргә тиклем ул Ҡырғыҙстандағы Өҙгөн (XI-XII бб.), Төркмәнстандағы Боронғо Ургенч (XII б) мавзолейҙары, Бохараның ошо уҡ ваҡытҡа ҡараған ҡоролмалары, Сәмәрҡандтағы XVI-XV быуаттарҙағы һәйкәлдәрҙең архитектура биҙәлешендә сағылыш тапҡан.

К. Антипина мәғлүмәттәренә яраш-лы, ромблы балаҫтарҙы көньяҡ ҡырғыҙҙар һуҡҡан, халыҡ телендә был балаҫтар "араби килем" - ғәрәп келәмдәре тип йөрөтөлә. Ошондай уҡ балаҫтар Үзбәкстандың ҡайһы бер райондарында һәм Урта Азияла йәшәүсе ғәрәптәрҙә осрай.

Ромб биҙәкле балаҫтар. Күгәрсен районы Бикбулат ауылы. Автор фотоһы. 1981

Башҡорттарҙың тарихи йәһәттән Урта Азия төбәге менән бәйле этник төркөмдәрендә был орнаменттың иң тәүге варианты һаҡланған. Алда телгә алынған Бикбулат ауылы һәм уға күршеләш булған Сапыҡ, Һәйетҡол, Муса, Түләбәй, Беренсе Юлдыбай, Икенсе Юлдыбай ауылдарында төркмән-ҡыпсаҡтар йәшәй. Һуңғараҡ Дим йылғаһы бассейнын төйәк иткән мең берлеге башҡорттары Урта Азиянан II меңйыллыҡтың башында килгән.

Ромблы композициялар фрагменттары. Дәүләкән районы. 1960

Боронғо орнаментты Дәүләкән районы оҫтабикәләре бик уңышлы ҡуллана. Буранғолдан Нәзирә Шафиҡова (1960 йылғы экспедиция материалдары) балаҫты 8-9 төҫтәге йөндән баҫа. 8 төҫтәге 8 ромб һәм өсмөйөштәр балаҫты тултырып тора. Баҫҡыслы линиялар һәм ике төҫтәге өсмөйөштәр композицияны тулыландырып тора.

Светлана ШИТОВА.
"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

"АҪЫЛТАШ"ҠА...

аҫыл йәштәр йыйылды

(Башы 1-се биттә).

Байрас Азаматов, БР Йәш яҡташтар берлектәре ассоциацияһы етәксеһе: Быйылғы форумдың төп маҡсаттарының береһе - "Аҫылташ" бренды аҫтында үткән төрлө проект эштәрен тормошҡа ашырыу өсөн йәштәрҙән командалар туплау булды. Шуға, тәү сиратта әүҙем, лидерлыҡ һәләттәре булған һәм артабан үҫешергә теләгән йәштәрҙе Башҡорт телендәге дебаттар, "Медиа-үҙәк", "Ресурс үҙәге" проекттарына йәлеп иттек. Бынан тыш, форумда үҙ проекттарын тәҡдим итеүселәргә 70 мең һумлыҡ грант бирелде, уны Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды, шәхси эшҡыуар Динар Шаһиев һәм БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ҡарамағындағы Йәштәр йәмғәт палатаһы рәйесе урынбаҫары Даян Солтанғужин финансланы. Йәмғеһе 30 йәш кеше проект төҙөгән, шуларҙың бишәүһе аҡсалата ярҙам алды, икәүһенә шәхси остазлыҡ тәҡдим ителде. Бөтә проекттар ҙа тормошҡа ашырырлыҡ кимәлдә уйланылған булыуы, башҡорт йәштәре араһында бизнес-проект тәҡдим итеүселәр барлыҡҡа килеүе ҡыуандырҙы. Әйткәндәй, быйылғы ҡатнашыусылар нисектер айырыуса әүҙемлек күрһәтеүе менән айырылып торҙо. Тәүге мәғариф форумдарында йәштәр ҡыҙыҡһынырмы, спикерҙар менән аралашырмы, һорауҙар бирерме тип борсола инек. Хәҙер йәштәр үҙҙәре теләгән майҙансыҡта әүҙем эшләйҙәр, береһен дә мәжбүрләргә кәрәкмәй. Бындай мәғариф саралары йәштәргә үҫешергә, донъяға ҡарашын киңәйтергә мөмкинлек биреүе менән әһәмиәтле. Хәҙер эшкә урынлашҡанда ҡыҙыл дипломға түгел, йәш белгестең үҙ һөнәренең оҫтаһы булыуына, система эсендә үҙ бурыстарын белеп һәм яуаплылыҡ тойоп эшләүенә, көтөлмәгән хәлдәрҙән сыға алыуына иғтибар итәләр. Беҙҙең форум шул һәләттәрҙе үҫтерергә ярҙам итә, быны башҡорт йәштәре яҡшы аңлауы ҡыуандыра.

Тиҙҙән "Аҫылташ" бренды аҫтында тағы бер яңы эш йүнәлеше - "Ресурс үҙәге" асыла, был проект сиктәрендә коммерция булмаған ойошма төҙөргә, милли проекттарҙы ғәмәлгә ашырырға булышлыҡ итеү, тәүге финанс ярҙамы күрһәтеүгә йүнәлтелгән эшмәкәрлек алып барыласаҡ. Бына шулай, беҙҙең киләсәккә пландар байтаҡ һәм бергә эшләргә, үҫешергә теләүсе йәштәрҙе тап "Аҫылташ" башҡорт мәҙәниәте форумында осратыҡ да инде.

Илһам Рәхимғолов, "Аҫылташ" форумында ҡатнашыусы: Мин әлеге ваҡытта Өфө дәүләт авиация техник университетының дүртенсе курсын тамамланым. Уҡыуҙан тыш, йәмәғәт эштәрендә лә актив ҡатнашам, Ейәнсура районы йәштәре берлеге рәйесемен. "Аҫылташ" башҡорт мәҙәниәте форумы иң яҡшы мәғариф сараларының береһе. Был юлы миңә айырыуса журналист Инга Йомашева һәм музыкант Зәһир Зәйнетдиновтың сығыштары оҡшаны. Улар башҡаларҙың: "Һин бер нәмә лә булдыра алмайһың", - тиеүенә ҡолаҡ һалмаҫҡа, тырышып эшләргә, алға барырға саҡырҙылар. Тағы ла йыр ижад итеү менән шөғөлләнгәс, йырсы Ринат Ниғмәтуллиндың лекцияһын ҡыҙыҡһынып тыңланым. Ул бөтөн кәрәкле аппаратураһын үҙе менән алып килгәйне, шунда уҡ махсус программа ярҙамында көй ижад итеп тә күрһәтте.

Быйылғы форум яңы мөмкинлектәргә юл асыуы булараҡ хәтерҙә ҡаласаҡ. "Гитара Battle" тигән башҡорт телендә генә үтәсәк бард ярышын ойошторояуға 30 мең һумлыҡ сертификат оттом. Быға оҡшаш сара - "Ҡош юлы" конкурсы бар, әммә "Гитара Battle" барышында ҡатнашыусылар импровизацияларға тейеш. Конкурсанттар билдәле ваҡыт эсендә төрлө темаларға тиҙ генә йыр һүҙҙәрен һәм көйөн уйлап сығарып, башҡарып күрһәтә. Был йәш музыканттарға һәләттәрен үҫтерергә, йырҙар ижад итергә этәргес бирәсәк. "Гитара Battle" ярышын бер тапҡыр үткәреп ҡараным, тәжрибә бар һәм артабан камиллашырға теләк ҙур. Әйткәндәй, тәҡдим ителгән 30 проект өс йөҙ ҡатнашыусы өсөн әҙ һымаҡ. Әммә быйыл бик күптәр мәғариф форумында беренсегә ҡатнашты, киләһе йыл улар әҙерләнеп килер һәм ҡыҙыҡлы идеялары менән жюри ағзаларын хайран итер, тип уйлайым. Иң мөһиме, ҡыйыу булырға, фекереңде башҡаларға дөрөҫ итеп еткерә белергә, һорауҙарға ҡаушамай яуап бирергә кәрәк.

Алһыу Аллағолова, Аҫылташ" форумында ҡатнашыусы: Бер ҡыҫала бизрәнән сығырға тырышып ҡыбырлай башлаһа, башҡалары ла хәрәкәткә килеп, уға ярҙам итә, тиҙәр бит әле. "Аҫылташ" форумы тап шундай сара, бында актив һәм алдынғы ҡарашлы йәштәр тиҫтерҙәренә комфорт зонаһынан сығырға ярҙам итә. Өс көн эсендә бик күп ҡыҙыҡлы шәхестәр менән таныштым, һәр кемдең күңеленә ятҡан шөғөлө һәм аныҡ маҡсаттары булыуы һоҡландырҙы, дәртләндерҙе. Бындай сарала тәүге тапҡыр ҡатнаштым һәм проектым еңеп сығыуына һаман да ышанып етә алмайым. Сөнки форум күберәк социаль проекттарға өҫтөнлөк бирә, ә мин фоамирандан декоратив сәскәләр эшләп һатыуҙы яйға һалырға ниәтләгәйнем. Экспертлар фекерен дә ишеттем, практик тәжрибәһе булған кеше менән дә кәңәшләшә алдым. Башҡа ҡатнашыусыларҙың сығыштарын күрҙем, эшҡыуарлыҡҡа йүнәлтелгәндәре тормошҡа ашырмалы булыуы, социаль проекттар илһамлы булыуы менән айырылып торҙо. Тиҫтерҙәрем кешеләргә ихлас ярҙам итергә, йәмғиәт өсөн файҙалы эштәр атҡарырға, тирә-яҡ мөхитте яҡшыртырға теләй. Башҡорт телен һаҡлауға йүнәлтелгән проекттар күп булды. "Аҫылташ" миңә күңелемә ятҡан эште башларға этәргес бирҙе, хәҙер биҙәү сәнғәтенә күберәк иғтибар бүләсәкмен һәм хатта һөнәремде лә үҙгәртергә уй бар.

ШУЛАЙ ИТЕП...

"Аҫылташ" башҡорт мәҙәниәте республика форумы ҡатнашыусылары Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә йәшәй, әммә бөтәһен дә башҡорт мәҙәниәте, аң-белем алыу, зиһендәрен үҫтереү теләге берләштерә. Фекерҙәштәр, дуҫтар һәм партнерҙар табырға ярҙам иткән ошондай саралар республикала йыш үткәрелә башланы. Был власть органдарының йәштәрҙең ихтыяжын иҫәпкә алып, тығыҙ бәйләнештә эшләү һөҙөмтәһе. Кәңәшле эш - бөткән эш, тип юҡҡа әйтелмәгән шул.

Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

КӨЛӨРһӨҢ ДӘ...

Ҡайһы бер көләмәстәр һәр заманда ла актуаль. Ярты быуат элек радио аша бер көләмәс ишеткәйнем. Бер ир, эш хаҡын алыу менән, уны бүлә икән: бер шешә араҡы хаҡы - фатирға түләргә, ике сирек араҡы хаҡы балалар баҡсаһы өсөн түләргә китәсәк. Ҡалған ике шешә араҡы хаҡы - аҙыҡ-түлеккә. Бәй, үҙемә бер шешә лә ҡалмай бит, тип уфтана ти ул.

Бөгөн дә беҙ пенсия алыу менән: "Өстән бер өлөшө - фатирға түләргә, ҡалған ике өлөшө -аҙыҡ-түлеккә. Бәй, дарыу алырға аҡса ҡалмай бит"-, тип уфтанабыҙ. Ҡайҙа ул кейем-һалым тураһында хыялланыу! Шәйехзада Бабичтың 1916 йылда яҙған "Йәшәһен ҡиммәтселек!" шиғырын уҡып йыуанырға ғына ҡала инде:

Эй, арыу булды, арыу булды мәғишәт айҡалып:
"Йәшәһен ҡиммәтселек!" тип һикерә, ырғый бай халыҡ.
Мин дә ер йыртып: "Йәшә!" - тип, һөйөнә-һөйөнә ҡысҡырам...

Ризыҡтың ҡиммәт булыуына түҙер инең дә ул, етештереүсенең ҡылығына аптырайһың. Ҡаймаҡҡа эремсек тултырып һатыуға сығара ул. Ә шырпы ҡабы яртылаш буш. Көтмәгәндә ҡунаҡ килеп инһә, һый булһын, тип, Өфөнөң билдәле бер кафеһының ошо уҡ атамалағы билмәнен һатып алдым. Саҡ ҡына тәмләп ҡарарға тип бешергәйнем, ит урынына онталған һөйәк тултырылған. Һыйларһың ҡунаҡты, оятҡа ҡалырһың бит. Ҡайҙа элеккесә хөкүмәт контроле? Урамға сыҡһаң, тағы аптырайһың. Халыҡ бигерәк һимерҙе. Ризыҡҡа әллә һимертеүсе берәй әйбер ҡушалармы икән?

Ирекһеҙҙән, бер һаҡаллы көләмәс иҫкә төшә. Троллейбус туҡталышында ике ауырлы ҡатын һөйләшә. "Кемде көтәһең?" - ти икән береһе икенсеһенә. "Кыҙ", - ти. "Ә мин малай көтәм, беҙҙең ҡыҙыбыҙ бар инде", - тип яуаплай икенсеһе. Ошоно ишетеп торған бер малай эргәлә торған ҙур ҡорһаҡлы ирҙән: "Ағай, кемде көтәһең?" - тип һораһа, уныһы: "Троллейбус", - тип әйткән ти. Бына шулай троллейбус тыуҙырырлыҡ хәлгә етә ҡайһы берәүҙәр.

Фәүзиә ЯХИНА.

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

Тамъян ырыуы, ғалим-этнограф Р.Ғ. Кузеевтың классификацияһына ярашлы, көньяҡ-көнсығыш башҡорттары төркөмөнә ҡарай. Тамъяндарҙың ата-бабаларының кем булыуы тураһында тарихи сығанаҡтар күп түгел. Тарихсы Салауат Хәмиҙуллин билдәләүенсә, тамъяндарҙың килеп сығышы хаҡында бынан 100 йылдан да элегерәк, XIX быуат аҙағында рус ғалимы Н.А. Аристов тарафынан фараз ителгән мәғлүмәттән башҡа телгә алырҙай икенсе версия булманы.

ШӘҒӘЛЕ ШАҠМАН БАБАБЫҘ, ТАМЪЯН БУЛЫР АТЫБЫҘ

Н.А. Аристов тамъян башҡорттарының XIX быуатта Һырдаръя йылғаһының үргә ағымы буйында йәшәгән тама атамалы ҡаҙаҡ ырыуы менән этник ҡәрҙәшлеге булыу мөмкинлеген тоҫмаллай. Тама ырыуы ҡаҙаҡтарҙың Кесе Жуз берләшмәһенә ҡарай. Әлбиттә, тамъян һәм тама этнонимдары бермә-бер тура килмәй, әммә шул уҡ тамырлы ырыу исемдәре башҡа төрки халыҡтарында ла бар. Ҡараҡалпаҡтарҙа тама, үзбәктәрҙә тама һәм ҡара тума, ҡырғыҙҙарҙа ҡара тума һәм аҡ тума, алтайҙарҙа ҡаратума һәм тумат, тываларҙа тумат ырыуҙары барлығы билдәле. Әммә төрки халыҡтарының ырыу атамаларында, башҡорттарҙан айырмалы рәүештә, -ан, -ян суффикстары осрамай. Р.Ғ. Кузеев был турала ошолай фекер йөрөтә: "Боронғо башҡорт ҡәбиләләренең -ан (-ән), -йән характерлы ялғауҙарына тамамланыусы этнонимдарының (бөрйән - бурджан, үҫәргән - мөйтән - митән, тамъян, һеңрән, уран) иран теле нигеҙендә хасил булыуы (йәки, дөрөҫөрәге, аҙағыраҡ формалашыуы) мөмкин. Күп кенә тикшеренеүселәр боронғо Һырдаръя буйы һәм Арал яны халыҡтарының сармат-иран субстраты менән бәйләнешкә инеүе һәм ҡушылыуына һәм, унан башҡа, Көнбайыш Себерҙең көньяҡ урманлы-далалы зонаһындағы уғыр төркөмдәрен үҙ мөхитенә индереү мөмкинлегенә иғтибар иткән".

Шулай ҙа, лингвистика күҙлегенән ҡарағанда, бөрйән һәм тамъян атамаларының -йән, -ян (-йан) өлөштәренең ябай ялғау итеп кенә ҡарау бигүк дөрөҫ тә булмаҫ кеүек. Бурджан һәм уға параллель бөрйән атамаларындағы джан-йән өлөштәренең ялғау түгел, ә башҡорт телендәге йән тигән айырым һүҙҙең мәғәнәһен белдереүенә иғтибар итергә кәрәктер. Тамъян атамаһының да там һәм йән һүҙҙәренән барлыҡҡа килеүе бик мөмкин: был осраҡта төркиҙәрҙәге тама ырыуы вариҫтарының тама йәнле, йәғни, тама нәҫелле башҡорттарға ҡәрҙәш булыуын инҡар итеп булмаҫаҡ. Ә тамъян һүҙенең баштағы тамйән вариантынан ҡалын әйтелешкә күсеүен башҡорт сингармонизмы (тәүге ҡалын ижеккә ҡалын ялғау ҡушылыуы) талабы менән еңел аңлатып була.

Р.Ғ. Кузеев тамъян ырыуы тамғаларынан "сыбыҡ" тамғаһының ҡаҙаҡ тама ырыуында ла булыуына иғтибар иткән. Шул уҡ ваҡытта тама ырыуына ҡәрҙәш булған икенсе бер ҡаҙаҡ ырыуы тана, тип атала икән. Ошо ырыу Кесе Жуздың байулы быуынына ҡарай, улар XIX быуатта Яйыҡ һәм Эмба йылғалары арауығында, башҡорттарға йәнәш йәшәй. Шулай уҡ төркмән-йомудтарҙа ла тана ырыу бүлеме бар.

Тамъян башҡорттары риүәйәттәрендә уларҙың ата-бабаларының Алтай яҡтарында йәшәүе хаҡында хәтирәләр бар. Р.Ғ. Кузеев та тамъяндарҙың боронғо этник тарихын, башҡа көньяҡ-көнсығыш башҡорттары менән бер рәттән, Алтай-Саян төбәгенең ҡатмарлы этногенетик мөхите менән бәйләй. Әммә ул түңгәүер һәм тамъян ырыуҙарын монгол сығышлы итеп күрә. Был осраҡта ул этнографтар В.В. Востров һәм М.С. Муҡановтарҙың фаразына таяна. Улар тама исемле ҡаҙаҡ ырыуын монголдарҙың тума ҡәбиләһе менән бәйләй. Ғәрәп ғалимы Рәшид ад-дин (1247 - 1318) тума (тумат) ҡәбиләһенең "Енисей ҡырғыҙҙары иле" сиктәрендә йәшәүе тураһында яҙа. Р.Ғ. Кузеев башҡорт түңгәүерҙәренә монголдарҙың тангур (тангор), ә тамъян ырыуына тумәт ырыуының тап килеүен билдәләй.

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.
(Дауамы бар).

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

БАШҠОРТТАР

Боронғо мәғлүмәттәр

Тарихсылырҙың күпселеге, башҡорт халҡы бик боронғо замандарҙа, беҙҙең эраға тиклем үк Урал тауҙары һәм уның тирә-яғындағы ерҙәрҙә формалашҡан, тигән ҡарашта торалар.

Ошо ерҙәрҙә һундарҙың һәм улар килгәнгә тиклем бында йәшәгән сәктарҙың, сарматтарҙың, аландарҙың ҡушылыуынан боронғо башҡорт халҡы формалаша башлай. Һундарҙың башҡорттарҙы формалаштырыуҙағы ролен айырым билдәләп, профессор Веселовский, башҡорттар боронғо һундарҙың туранан-тура вариҫтары, ти. Был профессорҙың ҡарашы менән билдәле урыҫ төркиәтсеһе С.Е.Маловтың ҡараштары ла тап килә. Малов башҡорттарҙы иң боронғо халыҡтарҙың береһе, улар әлеге ерҙәрендә беҙҙең эраға тиклем бишенсе быуатта уҡ йәшәгәндәр, ти һәм уларҙы формалаштырыуҙа һундарҙың роле ҙур булған, тигән ҡарашта торған.

Башҡорттар тураһында этнография фәнендә классикаға әйләнгән киң билдәле "Башкиры. Историко-этнографические очерки" тигән хеҙмәттең авторы С.И.Руденко башҡорттар Уралда бик боронғо замандарҙа формалашҡан һәм ошо ерҙең төп халҡы, тип яҙа.

Башҡорт мифологияһын, фольклорын өйрәнеп, уларҙы археологик табыштар менән сағыштырып, археолог В.Г.Котов, башҡорттар формалашыу этабын әлеге йәшәгән ерҙәрендә иртә тимер быуатта уҡ үткән халыҡ, тип яҙып сыҡты.

Ошо бик боронғо замандарҙа уҡ нығынып аяҡҡа баҫҡан халыҡ булараҡ, башҡорттар һуңынан Уралға төрлө ваҡытта килгән эреле-ваҡлы ырыу, ҡәбиләләрҙе, икенсе халыҡтарҙың ярсыҡтарын үҙ эсенә йота алған. Бынан башҡорттоң теле, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, хужалыҡ итеү ысулдары һәм физик ҡиәфәте лә артыҡ ҙур үҙгәреш кисермәгәнгә оҡшай, тип яҙа С.И. Руденко. Башҡорт хужалығын нығытып өйрәнгән Руденко башҡорттарҙың төп хужалыҡ итеү ысулы малсылыҡ булһа ла, ул Уралдың тәбиғәт шарттарына нығыты яраҡлашҡан һәм бер нисек тә күсмәндәр тормошо була алмай. Сөнки быға тәбиғәт шарттары мөмкинлек бирмәй, тип яҙған.

Башҡорттар хәҙер мосолман динен тотҡан халыҡ, әммә бик борон, әле христиан, Ислам кеүек, бер Алланы таныған диндәр барлыҡҡа килгәнгә тиклем үк формалашҡан халыҡ булараҡ, үҙҙәренең боронғо донъяуи ҡараштарын һаҡлап ҡалғандар. Ислам дине тарихи аренаға сыҡҡан ваҡытта башҡорттар инде күптән формалашып бөткән, үҙҙәренең башҡорт икәнен нығыты аңлаған һәм "башҡорт" тигән үҙаңы булған, аяҡта нығ баҫып торған, күрше-тирәне үҙҙәре менән иҫәпләшергә мәжбүр иткән көслө халыҡ булған.

XI быуатта йәшәгән, ижад иткән билдәле ғалим Мәхмүт Ҡашғари үҙенең бөтә донъяға билдәле "Диван Лөғәт әт-Төрк" тигән хеҙмәтендә башҡорттарҙы үҙе йәшәгән дәүерҙәге иң эре егерме төрки телле халыҡтар араһында һанап китә. Мәхмүт Ҡашғариҙың хеҙмәтенән күренеүенсә, ул замандағы башҡорттарҙың йәшәгән ерҙәре әлеге биләмәһе, йәғни Урал менән тап килә. Уның яҙыуынса, башҡорттарҙың көнсығыштағы ерҙәре Иртыш йылғаһы менән сиклә нә. Иртыш йылғаһы башҡорттоң көнсығыш сиге икәне үҙебеҙҙең "Ҡуҙыйҡурпәс менән Маянһылыу" эпосында ла әйтелә. Был эпоста башҡорт Ҡарабай Иртыш йылғаһы буйында көн иткән, тиелә.

Зәкирйән ӘМИНЕВ,
этнограф.
(Дауамы бар).

ХӘТЕРКИТАП

ИЛСЕ

"Ҡабаттан йәнләнгән фотоһүрәттәр" проекты гәзит уҡыусыларҙы "Беренсе Республика" фильмының геройҙары менән таныштырыуҙы дауам итә. Проектта шәхестәрҙең тарих архивтарынан, фәнни хеҙмәттәрҙән, музейҙарҙан тупланған фотолары һәм костюмдары буйынса рәссам Әлиә Байрамғолова тарафынан кинорежиссер Булат Йосоповтың "Беренсе Республика" тарихи нәфис фильмын төшөрөү майҙансығынан яһаған фотолары тәҡдим ителә.



Муллаян Халиҡов. Актер Фирғәт Ғарипов.

Муллаян Дәүләтша улы ХАЛИҠОВ (актер Фирғәт Ғарипов уйнай) - был шәхестең республикабыҙҙы төҙөүҙәге өлөшөн баһалап бөтөп булмай. Уның оҫта дипломат һәм парламентер булыуын Әхмәтзәки Вәлиди ҙә яҡшы белә, шуның өсөн иң мөһим килешеүҙәргә тап Муллаян Халиҡов йөрөй. Белемле, әҙәпле кеше, аҡыл менән эш итеүгә өҫтөнлөк биреүсе илсе булараҡ, 1919 йылдың 7 мартында Мәскәүгә "Автономлы Башҡортостанды таныу тураһындағы килешеүгә" ҡул ҡуйыу өсөн йүнәлгән делегация составында М. Халиҡов та була. 1919 йылдың майында Башҡорт ревкомы Халиҡовты Көнсығыш фронтының Көньяҡ төркөмө ғәскәрҙәре Реввоенсоветына үҙенең вәкиле итеп ебәрә. Әхмәтзәки Вәлидиҙең сәйәси аренанан китеүенән, йәғни, 1920 йылдың июленән алып башҡорт халҡы автономияһының төп яҡлаусыһы һәм һаҡсыһы булып Муллаян Дәүләтша улы Халиҡов ҡала. 1921 йылдың июленән БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе вазифаһына тәғәйенләнә, был мәлдә уға 27 йәш була. Был осор республика тарихында иң ҡатмарлы ваҡыт. 1922 йылдың 30 декабрендә ССР Советтарының I съезы союз килешеүе һәм Совет Социалистик Республикалары Союзы төҙөү тураһында декларация ҡабул итә. Документҡа ҡул ҡуйыуҙа Башҡортостан делегаты М. Халиҡов та ҡатнаша. СССР Үҙәк башҡарма комитеты ағзаһы итеп һайлана.

1937 йылдың 20 июнендә антисовет милли ойошмаһын ойоштороуҙа ғәйепләнеп, ҡулға алына. Ошо йылдың сентябрендә атыла. 1958 йылда аҡлана. Башҡортостан совет автономияһын иғлан итеүгә 90 йыл тулғанда Стәрлетамаҡ ҡалаһында Муллаян Халиҡовҡа таҡтаташ асыла.

Гөлнара ЯРУЛЛИНА,
тарих фәндәре кандидаты,
проект авторы.

✓ Рус халҡы ауыл ерлеген тиҙерәк ташлап китә, татарҙарҙа миграция кимәле уртасараҡ булһа, башҡорттарҙың үҙенең тыуып үҫкән ерендә йәшәргә теләүе көслөрәк.

ДЕМОГРАФИЯ

башҡорт

2020 йылда сираттағы Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы уҙғарыласаҡ. Был дәүләт кимәлендәге мөһим ваҡиға, уның һөҙөмтәләре Рәсәй халыҡтары хаҡындағы статистика мәғлүмәттәрен туплау менән генә сикләнмәйәсәк: улар XXI быуаттың өсөнсө тиҫтәһендә йәшәйешебеҙҙең барлыҡ өлкәләрен дөрөҫ күҙаллау, демографик хәлдең ил иҡтисадына, дөйөм ижтимағи үҫешкә йоғонтоһон алдан уҡ иҫәпкә алыу, киләсәгебеҙгә объектив ҡараш булдырыу өсөн ныҡлы нигеҙ булып торасаҡ. Башҡорт халҡы - бәләкәй этнос түгел, һаныбыҙ буйынса Рәсәйҙә дүртенсе урында торабыҙ. Тап шуның өсөн гәзитебеҙ биттәрендә башҡорт халҡының демографик проблемалары хаҡында мәғлүмәттәр баҫтыра башлауҙы, ошо хаҡта ғалимдарыбыҙҙың, башҡа белгестәребеҙҙең ҡараштарын уҡыусыларыбыҙға еткереүҙе хуп күрәбеҙ. Ошо проблемаға арналған тәүге әңгәмәбеҙҙә БР Стратегик тикшеренеүҙәр институтының ғилми хеҙмәткәрҙәре - тарих фәндәре кандидаттары Гөлдәр Хилажева, Наилә Шәмсетдинова һәм Гөлфинә Солтанова ҡатнашты.

Әңгәмәбеҙҙе бер ҡыҙыҡлы образ-сағыштырыуҙан башлар инем. Рәсәй халыҡтарын океанға тиңләһәк, башҡорт халҡы ошо океандың бер диңгеҙе булыр ине. Диңгеҙ нисек ҙур булмаһын, ул тамсыларҙан тора. Һәр беребеҙ башҡорт диңгеҙенең бер тамсыһылыр. Әгәр һәммәбеҙ хаҡында киң күләмле һәм аныҡ мәғлүмәт туплаһаҡ, бөтөн халҡыбыҙҙың объектив демографик йөҙө асыҡланасаҡ. Халыҡтың демографик хәле уның тарихи үткәне менән дә бермә-бер бәйле. Бөгөнгө демографик торошобоҙ ниндәйерәк икән, уға ниндәй факторҙар йоғонто яһай?

Г. Хилажева: Тарихтың иң яңы, һуңғы осоронда, йәғни XX быуаттан алып хәҙерге көндәргә тиклем, барса халыҡтар алдында ла элекке замандарҙа булмаған талаптар, яңы ҡаршылыҡтар барлыҡҡа килде. Халыҡ үҙен-үҙе һаҡлай алһын, уның үҫеш динамикаһы булһын өсөн ул йәшәйештең яңы шарттарына яраҡлаша алырға тейеш. Ғөмүмән, демографик ситуация күп төрлө факторҙар менән билдәләнә. Глобалләшеү шарттарында халыҡтың үҙ-үҙен, йәшәйешен үҙгәртә алыуы, яңыра, йәғни модернлаша алыуы бик мөһим.

Башҡорт халҡының тарихына күҙ һалһаң, уның көнитмешендә, йәшәү рәүешендә XVI быуатта Рус дәүләтенә ҡушылыу факты һәм ошоға бәйле тарихи ваҡиғалар хәл иткес факторға әйләнә. Башҡорттарҙың арта барыуын, йә ҡырҡа кәмеүен уларҙың эске тормошо, йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәренән бигерәк, тышҡы факторҙар - империя сәйәсәте, ихтилалдар, һуғыштарҙа ҡатнашыу һ.б. шундай ижтимағи сәбәптәр билдәләй. XX быуат башында Рәсәйҙең монархик ҡоролошо емерелеүе, революция һәм граждандар һуғышы, аслыҡ башҡорт халҡын иҫ китмәле демографик юғалтыуҙарға дусар итә.

Совет осоронда, бигерәк тә илде индустриялаштырыу башланғас, халҡыбыҙҙың йәшәү рәүешендә, көнитмешендә ҡырҡа үҙгәрештәр башланды, урбанизация процестары һөҙөмтәһендә ауылдарҙан ҡала мөхитенә күсеп китеүсе башҡорттар һаны арҡандан-арта барҙы. Ә ҡала мөхите демографик ситуацияны үҙгәртмәй ҡалмай.

Һеҙ урбанизация, йәғни башҡорттарҙың ҡалаларға күпләп күсеп китеүе демография йәһәтенән хәл иткес факторға әйләнә, тип фекер йөрөтәһегеҙме?

Г. Хилажева: Урбанизация - демография мәсьәләләрен тикшергәндә мотлаҡ иҫәпкә алына торған ижтимағи күренеш, әммә этнодемографик процестарға йоғонто яһаусы башҡа факторҙар ҙа байтаҡ. Әйткәнемсә, башҡорттарҙың күпләп ҡалаға китеүе совет дәүерендә башланғайны, ул саҡта мәжбүр итеү ҙә, ауыл мөхитен ихтыяри рәүештә ҡалдырыу ҙа күҙәтелде. Әйтергә кәрәк, әлеге ваҡытта башҡорттарҙың байтаҡ өлөшө (2010 йылғы мәғлүмәттәр буйынса - 59,3 проценты) ауылда йәшәүен дауам итә, урбанизация процестары тамамланмаған әле. Билдәле бер сәбәптәр арҡаһында ҡала мөхитендә тыуып үҫкән башҡорттар этник берҙәйлеген юғалта башлай, был хәүефле күренеш. XX быуатта башҡорт халҡының демографик үҫеше тотороҡло булды, уның динамикаһы билдәле сәбәптәр арҡаһында төрлөсәрәк ине. Бында төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының этник берҙәйлеге үҙгәреп тороуы ла сағылыш тапты. Белеүебеҙсә, 2002 йылдан 2010 йылға тиклем Рәсәйҙә башҡорттарҙың һаны 89 меңгә кәмегән, Рәсәйҙең башҡа субъекттарында йәшәүселәр 40 меңгә, Башҡортостанда - 49 меңгә. Быға тиклем бындай хәлдең булғаны юҡ ине.

Бында, ҡалалашыуҙан бигерәк, миграция процестарының йоғонтоһон иҫәпкә алырға кәрәктер бит. Ҡалаларҙа йәшәүсе башҡорттарҙың һаны артыҡ нык кәмемәгән - 2010 йылда 5 меңдән ашыуға, ә ауылдарҙа - 44 меңгә тиклем аҙайған…

Г. Хилажева: Ҙур ҡалаларҙа йәшәүсе башҡорттарҙың һаны арта бара, ә бәләкәйҙәрендә бер аҙға кәмей. Бигерәк тә ауылдарҙан, бәләкәй ҡалаларҙан ситкә китеүселәр күбәйә. Был хәлдең сәбәптәре барыбыҙға ла билдәле. Әммә киләсәктә халҡыбыҙҙың демографик торошо тағы ла бер үтә мөһим фактор менән бәйле буласаҡ - ул башҡорттарҙың этник берҙәйлегенең тотороҡло ҡала алыуы. Ҡала мөхитендә башҡорт этник берҙәйлеген һаҡлап ҡалыу өсөн тейешле шарттар етешмәй.

Заман башҡа - заң башҡа, тиҙәр. Заман менән бергә халҡыбыҙҙың уҙаңы, тормошҡа ҡараштары үҙгәрә бара. Элегерәк, мәҫәлән, башҡорт ғаиләһендә күп балалыҡ ҡәҙимге бер күренеш булһа, хәҙер 3 балалы ғаиләләр ҙә бик һирәк. Ижтимағи аңыбыҙҙағы ошондай үҙгәрештәр демографик хәлебеҙҙе яҡшырта алмайҙыр ул?

Н. Шәмсетдинова: Демография туранан-тура быуындар алышыныу менән бәйле: берәүҙәр тыуа, берәүҙәр китә. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарынан башлап Рәсәй демографияһында үтә хәүефле процестар күҙәтелә башланы: тыуым кәмегәндән-кәмей барып, үлем тыуымдан күпкә арта башланы. Был Рәсәйҙә халыҡ һанының йылдан-йыл кәмей барыуына, тәбиғи артымдың юҡҡа сығыуына килтерҙе. Ошондай ауыр демографик хәл публицистар тарафынан "рус тәреһе" тип аталғайны ул саҡта. Бында дәүләттә һәм йәмғиәттә барған киҫкен процестарҙың,үҙәрештәрҙең кире йоғонтоһо сағыла. Мин Башҡортостанда халыҡтарҙың тәбиғи үҫеше күрһәткестәрен барлап, 70-се йылдарҙан 2002 йылға тиклемге этник статистика материалдары буйынса сағыштырмаса тикшеренеү уҙғарҙым. Сағыштырыу өсөн барлығы 8 этнос алынғайны. Рус милләте республикабыҙҙа 90-сы йылдар башынан үҙенең демографик үҫешен туҡтатты, үлем күрһәткестәре тыуымдан арта барҙы. Татар этносында ошо осорҙа тәбиғи үҫеш тә, билдәле бер арауыҡта кәмеү ҙә булды. Фин-уғыр халыҡтарында ла демографик тотороҡлоҡ юҡ, бары мари халҡы үҙенең һанын һаҡлап ҡала алды. Башҡа халыҡтар араһында бары башҡорттарҙа ғына 2002 йылға тиклем тыуым үлемдән күберәк булып, тәбиғи үҫеш һаҡланып ҡалды. Был этностағы йәш нисбәтенән дә тора: халыҡ йәшерәк икән, тыуым өсөн мөмкинлектәр ҙә һаҡлана. Башҡорттар башҡа халыҡтарға ҡарағанда йәшерәк этнос, сөнки халыҡтың йәш структураһында балалар һәм йәштәр күберәк. Репродуктив йәштәгеләр күберәк булған хәлдә демографик үҫеш потенциалы ла һаҡланып ҡала. Әлбиттә, айырма әллә ни күп тә түгел, әммә халҡыбыҙҙың һанын нык кәметмәү йәһәтенән был ыңғай күренеш.

Гөлдәр ХИЛАЖЕВА: Ҙур ҡалаларҙа йәшәүсе башҡорттарҙың һаны арта бара, ә бәләкәйҙәрендә бер аҙға кәмей. Бигерәк тә ауылдарҙан, бәләкәй ҡалаларҙан ситкә китеүселәр күбәйә. Был хәлдең сәбәптәре барыбыҙға ла билдәле. Әммә киләсәктә халҡыбыҙҙың демографик торошо тағы ла бер үтә мөһим фактор менән бәйле буласаҡ - ул башҡорттарҙың этник берҙәйлегенең тотороҡло ҡала алыуы. Ҡала мөхитендә башҡорт этник берҙәйлеген һаҡлап ҡалыу өсөн тейешле шарттар етешмәй.

Әйтергә кәрәк, совет дәүерендә башҡорттар араһында эске миграция нык үҫешә. 1926 йылдан 1989 йылға тиклем Башҡортостандан ситтә йәшәүсе башҡорттар һаны 7 тапҡырға арта. Башҡорттарҙа ул осорҙа тыуым бик юғары булғас, ул демографик яҡтан Рәсәй төбәктәре өсөн донорға әйләнә, башҡа өлкәләргә күсеп китеүселәр күбәйә. Әлбиттә, миграция башҡа халыҡтарға ла хас күренеш, әммә башҡа төбәктәрҙә йәшәүсе башҡорттар бары 90-сы йылдарҙа ғына Башҡортостанға кире ҡайта башланы.

Бынан 10 йылдар самаһы элегерәк Дүртөйлө районының Аҡанай ауылында булғайным. Кисен ауылдың олораҡ быуын кешеләре менән аралашҡанымда улар ауыл егеттәренең кәләшһеҙ ҡалыуы, шуның арҡаһында йәштәр араһында эскелектең артыуы, инде ни хәл ҡылырға ла белмәүҙәре хаҡында зарланып һөйләгәндәр ине…

Н. Шәмсетдинова: Ысынлапта, ул йылдарҙа ҡалаларға китеүсе ҡатын-ҡыҙҙар күбәйҙе, ә ауылдарҙа, киреһенсә, ир-егеттәр күберәк ҡала ине. Бындай дисбаланс демографик хәлгә кире йоғонто яһай. Әлбиттә, һуңғы йылдарҙа егеттәребеҙ күпләп үҙҙәренә эш таба алған төбәктәргә китә башлағас, ауылдарҙа йәшәүсе ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар нисбәтендә әллә ни ҙур тигеҙһеҙлек тойолмай. Әммә ир-аттың сит төбәктәргә вахта ысулы менән эшкә йөрөүе лә ғаилә тотороҡлоғона, демографик үҫешкә кире йоғонто яһай.

Г. Хилажева: Әле Наилә Ғәзим ҡыҙы аңлатма биреп үткән социологик тикшеренеүҙәр ҙә, тормошобоҙҙа үҙебеҙ күреп белгәндәр ҙә халҡыбыҙҙың демографик торошоноң тотороҡлораҡ булыуына дәлил. Тормош нисек кенә ҡатмарлаша бармаһын, башҡорт халҡы үҙенең демографик потенциалын һаҡлап ҡала алды, һуңғы осорға тиклем, аҙ булһа ла, үҫеш тә күҙәтелде. Миграция яғынан да ошолай: рус халҡы ауыл ерлеген тиҙерәк ташлап китә, татарҙарҙа миграция кимәле уртасараҡ булһа, башҡорттарҙың үҙенең тыуып үҫкән ерендә йәшәргә теләүе көслөрәк. Ауылдарыбыҙҙан ситкә китеүселәр булған хәлдә лә, улар бөтөнләйе менән юҡҡа сыҡмаһын өсөн мөмкинлектәр бар әле.

Бер яҡтан ҡараһаҡ, башҡорт мөхитендә тыуым-үлем нисбәтендә хайран булырлыҡ айырма юҡ та һымаҡ. Икенсе яҡтан, беҙ Рәсәйҙә йәшәйбеҙ, һәм унда күҙәтелгән ижтимағи хәл-күренештәр халҡыбыҙҙы ла ситләп уҙмаясаҡ. Ошо көндәрҙә киң матбуғат сараларында Рәсәй Хөкүмәтенең вице-премьеры Татьяна Голикова сығыш яһап, илдәге демографик ситуацияның катастрофик йүнәлеш алыуын билдәләп үтте. Баҡтиһәң, 2019 йылдың 4 айында ғына ла Рәсәй халҡы 149 меңгә кәмегән икән. Был бөгөнгө демографик хәлебеҙҙең Рәсәй дәүләте етәкселәрен дә хафаға һалыуына бер дәлил. Ошо фактҡа нисек ҡарайһығыҙ?

Г. Солтанова: Теге йәки был халыҡтың республикабыҙ сиктәрендәге демографик хәлен төп 3 фактор билдәләй: тыуым, үлем һәм миграция торошо. Гөлдәр Фәрит ҡыҙының әле әйткәндәре хаҡ: халҡыбыҙҙың демографик потенциалы уның киләсәгенә өмөт менән ҡарарға ерлек бирә.

✓ Бындай эсемлектәр менән ағыуланыусылар 96 проценты "законлы"этанол менән ағыулана, сөнки самаһыҙ араҡы эсеүсе кеше үҙен-үҙе белә-күрә тороп ағыулай. Әммә бына ошо фактты улар бер нисек тә аңларға теләмәй.

КӨҘГӨҺӨНДӘ...

йөҙө

Әммә барлыҡ демографик проблемаларҙан беҙҙең өсөн үлем күрһәткестәренең юғары булыуы хәүефле. Башҡорттарҙың күпселеге ауылдарҙа йәшәй һәм, билдәле сәбәптәр арҡаһында, унда был проблема байтаҡҡа көсөргәнешлерәк.

Билдәле булыуынса, кеше ғүмеренең оҙайлығы уның сәләмәтлеге менән бәйле. Төрлө сир-ауырыуҙар кешеләрҙең тәбиғи йәшәү ресурстарын кәметә, ваҡытынан күпкә алда үлемгә алып бара. Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә үлем күрһәткестәрен кәметеү менән бәйле "эпидемиологик күсеш", тип аталған феномен бар, ул 3 этаптан тора. Был тегеге йәки был илдең социаль үҫеш кимәленән тора. Иң тәүге этапта инфекцион-паразитар ауырыуҙарға ҡаршы көрәш алып барыла, сөнки үҫешмәгән илдәрҙә тап ошо сирҙәр киң таралып, халыҡтың күпләп үлеүенә килтерә. Бындай ауырыуҙарҙан балаҫаға ныҡ ҡырыла, ә был көтөлгән ғүмер оҙайлығын үтә ныҡ кәметә. Был эште тик дәүләт үҙе генә башҡарып сыға ала, илдәге санитария һәм гигиена торошо, вакциналаштырыу аша хәлде ыңғай яҡҡа үҙгәртеп була. Уҙған быуат урталарында Рәсәй ошо этапты уңышлы үтеп сыға алды.

Икенсе этапта тышҡы сәбәптәр арҡаһындағы үлем осраҡтарын кәметеү проблемаһын хәл итергә кәрәк. Бында һүҙ бәхетһеҙлек осраҡтары, ағыуланыу, үлтереш, суицидтан үлеү һ.б. шундай сәбәптәр хаҡында бара. Шулай уҡ ошо этапта хроник ауырыуҙарҙы профилактикалап, ғүмер оҙайлығын арттырыу мәсьәләһе лә бик мөһим. Өсөнсө этапта медицинала яңы технологиялар булдырып, бигерәк тә онкология, йөрәк-ҡан системаһы ауырыуҙарын да, йәшәү сифатын да күтәрә алыу маҡсаты ҡуйыла. Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙ үткән быуаттың 70-се йылдарынан бирле икенсе этапта тотҡарланып ҡалдыҡ. Европа һәм ҡайһы бер башҡа илдәрҙә әле күрһәтеп үтелгән проблемаларҙы уңышлы хәл итеп, үҙ халыҡтарына оҙайлы һәм сифатлы йәшәү мөмкинлектәрен бирҙе. Беҙ уларҙан ныҡ артта ҡалғанбыҙ. Уртаса ғүмер оҙайлығы ла саҡ-саҡ 70 йәшкә етте, ә ир-аттың унан да түбәнерәк. Ирҙәрҙең ғүмер оҙайлығы ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡынан 10 йылдан ашыуға кәмерәк - был бик аяныслы күрһәткес. Ғөмүмән, республикабыҙҙа һәр 1000 кеше иҫәбенә тура килгән үлем күрһәткесе лә юғары ҡала, 2018 йылда ул 12,4 промилле булды (сағыштырыу өсөн: 1970 йылда - 7,3, 1990 йылда - 9,7). Үлем Башҡортостандың депрессив райондарында күпкә артығыраҡ. Алкоголь менән ағыуланыуҙан, суицидтан, юл фажиғәләрендә үлеүселәр бик күп. Иң аяныслыһы - ваҡытынан алда, хеҙмәткә яраҡлы йәштә үлеүселәр барлыҡ үлем осраҡтарының 25 процентын тәшкил итә.

Ни өсөн беҙ ошо үкенесле статистиканы яҡшырта алмайбыҙ һуң?

Г. Солтанова: Әйткәнемсә, халыҡтың һаулығын нығытыу буйынса эшмәкәрлектең икенсе этабында күп нәмә илдең социаль-иҡтисади кимәленең тотороҡло, үҫешкән булыуы менән бәйле. Иҡтисади яҡтан юғары кимәлгә еткән илдәрҙә дәүләт тә, матди яҡтан етеш йәшәгән граждандар ҙа сәләмәт тормош булдырыу өсөн сығымдарын һис кәметмәй. Ә беҙҙә һаулыҡ һаҡлауға бюджеттан алынған сығымдар арта барһа ла, улар хәҙерге медицина технологияларын һәр кешегә ҡуллана алырлыҡ кимәлдә түгел. Икенсе яҡтан, беҙҙең граждандарыбыҙҙың күпселеге сәләмәтлегенә тейешле иғтибар менән ҡарамай, ғәмәлдә, үҙенең шәхси тормошонда сәләмәт йәшәү рәүешен ҡабул итмәй. Кеше үҙенә-үҙе ҡарашын үҙгәртмәһә, ул йыш ҡына йәш сағынан уҡ хроник ауырыуҙарға дусар була, ә был уның йәшәү сифатына ла, ғүмеренең оҙайлығына ла кире йоғонто яһай.

Ысынлап та, беҙҙә пенсия йәшенә лә етмәйенсә үлеп ҡалыусылар уғата күп бит. Бигерәк тә ир-ат затынан булғандар иртә үлә. Эскелек, тәмәке тартыу, дөрөҫ туҡланмау ҙа төрлө ауыр сирҙәргә дусар итә уларҙы. Был аяуһыҙ тенденцияны бер нисек тә үҙгәртеп булмаймы ни?

Г. Солтанова: Мин башҡорттар күпләп йәшәгән (65 проценттан ашыу), социаль-иҡтисади яҡтан төрлө кимәлдәге 8 район буйынса махсус тикшеренеү уҙғарҙым. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш районларынан, төньяҡтан Илеш, Аҫҡын һәм Салауат районларынан статистик мәғлүмәттәр алынды. Төп һығымта шунан ғибәрәт: социаль-иҡтисади яҡтан депрессив районларҙа халыҡтың һаулыҡ торошо һәйбәт түгел, үлем күрһәткестәре лә күпкә юғарыраҡ. Тимәк, бындай негатив ситуацияны бары дәүләт власы, муниципаль идаралыҡ органдарының урындарҙағы иҡтисади проблемаларҙы уңышлы хәл итә алыуы аша үҙгәртеп буласаҡ. Башҡортостан социаль-иҡтисади яҡтан 7 зонаға бүленгән, шуларҙың өсәүһе - көньяҡ-көнсығыш (Урал аръяғы), төньяҡ-көнсығыш һәм төньяҡ зонаһы иҡтисади яҡтан үҫешмәгән, артта ҡалыусы райондарҙан тора. Иҡтисади яҡтан тотороҡло зоналарҙа үлем күрһәткестәре түбәнерәк, был үҙенән-үҙе депрессив зоналарҙа демографик хәлде нисек яҡшыртып була икәнен асыҡтан-асыҡ күрһәтеп тора. Шуның өсөн демографик проблеманың киҫкенләшеүенә кешеләрҙең үҙҙәрен, уларҙың йәшәү рәүешен төп сәбәпсе итеп ҡарап булмай.

Психологияла "йәшәргә ынтылыш", тип аталған төшөнсә бар. Ул тәбиғәттән һәр кешегә һалынған. Йәшәргә ынтылыш айырым кешегә генә түгел, ә тотош этносҡа ла хас сифат, тип уйлайым. Юғиһә, халҡыбыҙ үҙ тарихында күп тапҡырҙар ҡабатланып торған трагик осорҙарҙы бер нисек тә йырып сыға алмаҫ ине. Бөгөн ошо сифат халҡыбыҙҙа һаҡланып ҡалдымы икән?

Н. Шәмсетдинова: Ҡәҙимге тормош тәжрибәһе лә, социологик тикшеренеүҙәр ҙә халҡыбыҙҙың үҙаңында патриархаль ҡиммәттәрҙең хәҙерге осорға тиклем һаҡланып ҡалыуын күрһәтә. Ул этностың күп быуатлыҡ ижтимағи тәжрибәһенән хасил булып, уның йәмғиәт ҡанундарына ярашлы йәшәргә тырышыуында күренә. Был, бер яҡтан, яҡшы сифат, икенсе яҡтан - хәҙерге заман талаптарына яраҡлаша алыуҙы тотҡарлай, этностың тиҙ арала модернлаша алыуына ҡамасаулай. Совет осоронда күп нәмә ана шул патриархаль аңға нигеҙләнгән ине, ул халыҡты туплап, уны власҡа яраҡлы һәм кәрәкле йүнәлештән тайпылдырмайынса идара итеү мөмкинлеген бирҙе.

Ысынлап та, элек халыҡ дәүләткә ышанып йәшәне, ниндәй булһа ла ауыр хәлдән дәүләт ярҙамында ҡотолоп булырына инаныс көслө ине...

Н. Шәмсетдинова: Хәҙер заман талаптары үҙгәрҙе - кеше үҙ көсөнә, үҙ мөмкинлектәренә таянып йәшәргә тейеш. Әммә бының өсөн шул уҡ ауылдарҙа, шул уҡ депрессив райондарҙа яҡшыраҡ, сифатлыраҡ йәшәргә тырышыусыларға ла билдәле бер шарттар булдырылыуы мотлаҡ. Ә быны бары дәүләт кенә эшләй ала. Ниҙер эшләргә, булдырырға тырышып та, социаль-иҡтисади инфраструктура үҫешмәгәнлектән, билдәле ҡаршылыҡтарға осрап, кеше төңөлөп тә ҡала. Ауылдарҙа әлегә тиклем колхоз тормошон һағынып һөйләйҙәр, элек тормошобоҙ матур ине, ә хәҙер йүнле тормош бөттө инде, тиҙәр. Әммә барыбер элекке патриархаль йәшәү рәүешен үҙгәртеп, кешеләрҙә заманға яраҡлаша алыу, үҙ-үҙендә яңыса эшмәкәрлек итеү һыҙаттарын үҫтерә алыу мотлаҡ. Шунһыҙ бер нисек тә алға китеш булмаясаҡ.

Наилә ШӘМСЕТДИНОВА: Ниҙер эшләргә, булдырырға тырышып та, социаль-иҡтисади инфраструктура үҫешмәгәнлектән, билдәле ҡаршылыҡтарға осрап, кеше төңөлөп тә ҡала. Ауылдарҙа әлегә тиклем колхоз тормошон һағынып һөйләйҙәр, элек тормошобоҙ матур ине, ә хәҙер йүнле тормош бөттө инде, тиҙәр. Әммә барыбер элекке патриархаль йәшәү рәүешен үҙгәртеп, кешеләрҙә заманға яраҡлаша алыу, үҙ-үҙеңдә яңыса эшмәкәрлек итеү һыҙаттарын үҫтерә алыу мотлаҡ. Шунһыҙ бер нисек тә алға китеш булмаясаҡ.

Башҡорттар араһында ир-аттың иртә үлеүе хаҡында әйтеп үттек. Уның сәбәбе - һаулыҡҡа зыянлы йәшәү рәүешенән азат булмау, бигерәк тә алкоголле эсемлектәрҙе самаһыҙ ҡулланыу. Йәмғиәтебеҙ киләсәктә ошондай кире күренештәргә ҡаршы тора алырмы?

Г. Солтанова: Алкоголь кешенең һаулығына, ғаиләһенә туранан-тура зыян килтерә, ваҡытһыҙ үлем осраҡтары йыш ҡына спиртлы эсемлектәрҙе ҡулланыу менән бәйле. Совет дәүерендә "мәҙәни эсеү" тип аталған күренеш халыҡта ныҡ таралып өлгөрҙө. Был совет кинофильмдарында ла сағылыш тапты, ошондай "культуралы" эскелек йәмғиәттә хатта норма һымаҡ ҡабул ителә башлай. Башҡортостанда ирҙәр араһында эскелек Бөйөк Ватан һуғышынан һуң ныҡ таралып китә. Эскелекте араҡыны тыйып ҡына бөтөрөп булмаясаҡ, иң элгәре халыҡты ана шул "мәҙәни эскелек" тоҙағынан ҡотҡарыу юлын һайлау зарур. Бына контрафакт, йә булмаһа суррогат араҡы менән көрәш алып барыла, әммә был ғына көтөлгән һөҙөмтәне бирмәйәсәк. Бындай эсемлектәр менән ағыуланыусылар 4 процент, ҡалған 96 проценты шул уҡ "законлы"этанол менән ағыулана, сөнки самаһыҙ араҡы эсеүсе кеше үҙен-үҙе белә-күрә тороп ағыулай. Әммә бына ошо фактты улар бер нисек тә аңларға теләмәй, сөнки уларҙың организмында алкоголгә бәйлелек барлыҡҡа килгән була. Ҡайһы берәүҙәр даими рәүештә эсмәүҙәренә һылтанырға тырыша. Әммә йыш ҡына бер ултырғанда ла саманан тыш күп эсеп, үлемесле дозанан вафат булыусылар ҙа бар бит. Шуның өсөн иң тәүҙә араҡы кеүек ныҡ алкоголле эсемлектәрҙән арыныу юлына баҫыу, уны спирты аҙ булған эсемлектәр, башҡорт ҡымыҙы, буҙа менән алыштырыу кеүек саралар уңышлы булыр ине.

(Дауамы 10-сы биттә).

✓ *Шул уҡ Торатауҙы ла, Ирәмәлде лә, Шүлгәнде лә файҙалана улар. Тик туризмдың тәбиғәтте бысратыу, халыҡты йыйып йөрөтөп тапатыу түгеллеген генә күҙ уңынан ысҡындыра. Дөрөҫ ойоштороlмай беҙҙә был эш...*

ДЕМОГРАФИЯ КӨҘГӨҺӨНДӘ...

башҡорт йөҙө

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

Кешенең үҙ тормошонан билдәле бер мәғәнә табыуы ла мөһим бит. "Ташландыҡ" булып ҡалыу һәр кемгә лә ҡыйындыр. Психологтар "пенсионер синдромы" тураһында бына нисек яҙа: пенсияға сығып, башҡа эш менән мәшғүл булмағандар үҙҙәрен бер кемгә кәрәге булмаған кешеләй тоя башлай. Был хроник депрессияға килтерә, улар йышыраҡ сирләй, физик әүҙемлектәре ныҡ кәмей.

Н. Шәмсетдинова: Кешеләр үҙҙәрен инде бер кемгә лә кәрәктәре ҡалмағандай тоймаһын ине. Элекке аграр система емерелгәс, был ауыл кешеләре тарафынан бик ауыр кисерелде. Әммә ауыл ерлегендә барыбер яуаплылыҡ әле лә көслө булып ҡала. Һәр кем үҙенең мөмкинлектәрен барлап, ошо шарттарҙа ни эшләй алыуы, кемдәр менән хеҙмәттәшлек, партнерлыҡ мөнәсәбәттәренә инә алыуы хаҡында уйлана һәм аныҡ эштәргә тотона алһа, социаль яраҡлашыу (адаптация) процестары ауыл ерлегендә лә көсәйәсәк. Һуңғы ваҡытта Стратегик тикшеренеүҙәр институты депрессив райондарҙа тап ошо тема буйынса проекттар башланы, улар беҙгә яҡшы һөҙөмтәләр бирер, тигән ышаныс бар.

Бәлки, халҡыбыҙҙы айыҡ тормош юлына алып сығыу өсөн киң матбуғат сараларында, бигерәк тә радио һәм телевидение аша өгөт-нәсихәт алымын киңерәк ҡулланыу кәрәктер?

Г. Солтанова: Килешәм, беҙҙә алкоголгә ҡаршы пропаганда етерлек түгел, уныһы ла ҡоро мораль уҡыуға ҡоролған була. Әлбиттә, балаларға, мәктәп йәшендәге үҫмерҙәргә алкоголдең кеше һаулығына зыянлы булыуы хаҡында аңлатыу эштәре алып барырға кәрәк. Ә ололарға килгәндә, һәр осраҡта ла аныҡ мәғлүмәттәрҙән торған, ышаныслы күрһәткестәргә нигеҙләнгән материалдар менән таныштырыу файҙалы. Ғөмүмән, айыҡ тормошта йәшәү рәүешен норма ғына итеп ҡарауҙан уны билдәле бер модаға әйләндерә алыу фарыз беҙгә. Быны тиҙ арала эшләп булмай, әммә йәмғиәт алдында шундай маҡсат ҡуйырға кәрәк. Бындай эш Польшала бик һөҙөмтәле булды. Бынан 25 йыл элек поляктарҙа алкоголле эсемлектәрҙе ҡулланыу структураһында 70 процент юғары градуслы эсемлектәргә тура килһә, әлеге көндә ошо яңы моданы ғәмәлләштереү һөҙөмтәһендә араҡы кеүек эсемлектәргә 30 процент ҡына урын бирелә. Бында дәүләт сәйәсәте бик ҙур роль уйнай: көслө алкоголле эсемлектәргә хаҡ ныҡ күтәрелә, ә башҡа эсемлектәр хаҡы элеккесә ҡала. Әйтергә кәрәк, һуңғы йылдарҙа алып барылған пропаганда бер ни тиклем һөҙөмтә бирә башланы: алкоголле эсемлектәрҙе ҡулланыуҙан тыйылған йәштәребеҙ күбәйә бара, быны төрлө йәштәге төркөмдәр араһында уҙғарылған социологик тикшеренеүҙәр ҙә раҫлай.

Минеңсә, йәштәребеҙ араһында йәш егет-ҡыҙҙарыбыҙҙың үҙ башланғысы менән айыҡ тормош мәҙәниәтенә юл ярыуы бик күркәм күренеш. Ваҡытында ошо юҫыҡта Марат Абдуллин, Роберт Дәүләтшин кеүек йәш лидерҙар күп эш башҡарҙы.

Н. Шәмсетдинова: Әлбиттә, ундай лидерҙарҙың эшмәкәрлеге хуплауға лайыҡ. Шулай ҙа ошондай яңыса йәшәү образын һайлау, айыҡ тормош алып барыуҙы модаға әйләндереү күмәкләп һәм берҙәм эш алып барыусы йәштәр төркөмдәре тарафынан ғәмәлгә индерелә. Йәштәр араһында ошондай хәрәкәт башланған, ул бары тик хуплауға һәм өлгө алыуға лайыҡ. Ундай төркөмдәребеҙ күп хәҙер, улар барса байрамдарҙы, күңел асыуҙарҙы алкоголһеҙ ойоштороpға өйрәнде. Өгөт-нәсихәт менән түгел, ә шәхси ғәмәлдәре, үҙҙәренең яңыса йәшәү тәртибе аша улар башҡаларҙы ла үҙҙәре кеүек тормош ҡороpға өйрәтә. Шул уҡ Яңы йыл байрамында уларға шараптың да, шампандың да һис бер кәрәге ҡалмаған. Бына ошолай яңыса мәҙәнилеккә нигеҙ һалына, айыҡ байрамдар модаға инә башлай.

Демография темаһын дауам итеп, башҡортлоҡ мәсьәләһендәге бер сетерекле һорауға ла иғтибар итеү кәрәктер. Бер кем өсөн дә сер түгел, ҡайһы бер милләттәштәребеҙ ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында үҙҙәренең этник берҙәйлеген үҙгәртә, был халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләрендә сағылмай ҡалмай. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?

Г. Хилажева: Алдараҡ башҡорттарҙың демографик торошонда урбанизация, йәғни ҡалалашыу процестарының сағылышы булыуы хаҡында әйтеп үткәйнем. Уның икенсерәк яғы ла бар бит әле. Ауылдан ҡалаға күсеп килеүсе башҡорттарҙың икенсе быуыны ҡала мөхите йоғонтоһонда үҫә. Ҡалала рустар күпселекте тәшкил итә, һәм доминант булып торған этнос аҙ һанлы халыҡ балаларында үҙенә хас булған сифаттарҙы барлыҡҡа килтерә. Бындай ситуацияла ассимиляцияға бирелеү күренештәре арта бара, һан яғынан аҙсылыҡта булған этноска ҙурыраҡ халыҡ тарафынан йотолоу хәүефе янай. Унан һуң, ҡалаларҙа рус мәҙәниәте өҫтөнлөк итә, уның йәш быуын өсөн тәьҫирле көс булыуын инҡар итеп булмай. Шул уҡ рус теле ҡалала төп аралашыу теле булып ҡалыуын да иҫәптән сығарып булмай. Тап шуның өсөн ҡала башҡорттарына үҙҙәренең этник берҙәйлеген һаҡлап ҡала алыу мөһим һәм ҡатмарлы бурыҫҡа әйләнә. 90-сы йылдарҙа Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарында социологик тикшеренеүҙәр уҙғарғанда ундағы ҡала башҡорттары балаларының руслаша барыуын күреп, ныҡ аптыраған инем. Бындай ситуацияла ошо быуында башҡортлоҡ тойғоһо кәмей башлауы менән уларҙың этник берҙәйлегенең дә ҡаҡшауы мөмкин. Был - объектив процесс. Шуның өсөн уларға ҡарата яңы ҡараш, улар менән эш итеүҙә яңы, заманса инструментарий булдырыу зарур. Был иң беренсе телгә ҡағыла. Үҙ телен яҡшы үҙләштерә алмаған башҡорт балаларын ситләтеү дөрөҫ булмаҫ ине. Уларҙың башҡортлоғон һаҡлап ҡалыр өсөн төрлө юлдар табып була. Был турала ғалимдарыбыҙ 90-сы йылдарҙан бирле иҫкәртә килде. Әйтергә кәрәк, һуңғы осорҙа ҡалаларҙағы йәштәребеҙҙең милли үҙаңы көсәйә бирҙе, улар үҙ милләтенән ситкә тайпылмаясаҡ. Бында төньяҡ-көнбайыш башҡорттары менән сағыштырыу урынлы булыр ине. Улар, башҡорт әҙәби теленән ситләтелгәс, үҙҙәрен татар милләте вәкиле итеп күрһәтә башланы. Әммә этник сығыштарын, шәжәрәләрен өйрәнгәс, күптәре яңынан башҡорт берҙәйлегенә күсә алды.

Демографик проблемаларҙа никахҡа инеү, ғаилә мөнәсәбәттәре сағылыш табамы?

Г. Хилажева: Никах, ғаилә институттары бар донъяла ла үҙгәреш кисерә, һәм ул демографтар тарафынан етди өйрәнелә. Хәҙерге осорҙа никахҡа инеү олораҡ йәшкә күсә бара, балалар һаны аҙая, ғаиләләр тиҙерәк тарҡала һ.б. Ғаилә мөнәсәбәттәренә килгәндә, мин бер ҙур проблемаға иғтибар итер инем. Хәҙер ауылдарҙан сит өлкәләргә вахта ысулы менән йөрөп эшләүселәр күбәйҙе. Башҡорттар араһында вахтаға йөрөп эшләүселәр өлөшө башҡа халыҡтарҙыҡына ҡарағанда күберәк. Быны ваҡытлыса хеҙмәт миграцияһы, тип тә нарыҡлайҙар. Элегерәк, башлыса, ир-ат вахтаға йөрөһә, хәҙер шундай ҡатнаҡышҡан ҙа байтаҡ. Был ғаилә мөнәсәбәттәрендә бөтөнләйгә яңы ситуация барлыҡҡа килтерҙе: оҙайлы ваҡыт дауамында ғаилә ағзалары бергә була алмай. Ғалимдар хатта махсус терминдар ҙа ҡуллана башланы, улар транслокаль ата-әсәлек, транслокаль хәстәрләү, тип атала. Йәнәһе, айырым йәшәп тә, ата-әсә бурыстарын үтәргә тырышыу була инде. Әлбиттә, был балалар тәрбиәләүгә ҡамасаулай, улар менән мөнәсәбәттәр сифатын насарайта. Ғаилә тотороҡлоғон һаҡлау, наулыҡ торошоноң насарайыуы, башҡа ауырлыҡтар ҙа барлыҡҡа килә. Республика етәкселеге был юҫыҡта вахтасылар менән диалогҡа инеп, ниндәйҙер саралар планлаштырыу тураһында иғлан итте. Был бик ваҡытлы булыр ине.

Гөлфинә СОЛТАНОВА: Халыҡтың һаулығын нығытыу буйынса эшмәкәрлектең икенсе этабында күп нәмә илдең социаль-иҡтисади кимәленең тотороҡло, үҫешкән булыуы менән бәйле. Иҡтисади яҡтан юғары кимәлгә еткән илдәрҙә дәүләт тә, матди яҡтан етеш йәшәгән граждандар ҙа сәләмәт тормош булдырыу өсөн сығымдарын һис кәметмәй. Ә беҙҙә һаулыҡ һаҡлауға бюджеттан алынған сығымдар арта барһа ла, улар хәҙерге медицина технологияларын һәр кешегә ҡуллана алырлыҡ кимәлдә түгел. Икенсе яҡтан, беҙҙең граждандарыбыҙҙың күпселеге сәләмәтлегенә тейешле иғтибар менән ҡарамай, ғәмәлдә, үҙенең шәхси тормошонда сәләмәт йәшәү рәүешен ҡабул итмәй. Кеше үҙенә-үҙе ҡарашын үҙгәртмәһә, ул йыш ҡына йәш сағынан уҡ хроник ауырыуҙарға дусар була, ә был уның йәшәү сифатына ла, ғүмеренең оҙайлығына ла кире йоғонто яһай.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Халҡыбыҙҙың демографик проблемалары хаҡында башҡорт ғалимәләре менән әңгәмәбеҙ тамамланғас, кинәт кенә А.С. Пушкиндың бер шиғри әкиәтендәге үҙенә-үҙе ғашиҡ батшабикә образы иҫкә төштө. Ул һәр көн үҙенең тылсымлы көҙгөһөнән былай тип һорай торған була: "Минме донъяла иң гүзәле, иң алһыуы, аҡ йөҙлөһө?" Бер саҡ ул үгәй ҡыҙын үҙенән гүзәлерәк булыуын хәбәр иткән тылсымлы көҙгөнө селпәрәмә килгәнсе ватып ырғыта. Беҙ ҙә, демография көҙгөһөнә ҡарап, халҡыбыҙҙың ниндәй һүрәттә булыуын күрәбеҙ. Ошо көҙгө беҙҙе күркәмерәк күрһәтһен, тиһәк, йәшәйешебеҙҙе ысын башҡортлоҡ өлгөһөндә ҡора алыу фарыҙдыр.

Бәҙри ӘХМӘТОВ әңгәмә ҡорҙо.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

ТӘБИҒӘТТЕ ҺАҠЛАУ ТҮГЕЛ БЫЛ!

Ишембай районында күптән түгел ойоштороlған Торатау йыйынының иҫ киткес шәп үткәнен беләбеҙ. Әммә... халыҡ өсөн байрам да, ә Торатау өсөн байрам булдымы икән был? "Торатау беҙгә фатихаһын бирә", тип яҙҙым мин үҙем дә был йыйындың сценарийында. Ә һуңынан... Видеояҙмаларҙа тауҙың төн уртаһында шунсама уттар аҫтында ялпылдағанына, шунсама халыҡтан тапалғанына ҡарап, эсем бошто. Изге урын тибеҙ, тәбиғәт ҡомартҡыһы тибеҙ Торатауҙы. Ул тауҙағы Ҡыҙыл китапҡа индерелгән үҫемлектәрҙең, ҡош-бөжәктең... изгеләрҙең рухтарының ни йәне ҡалды икән?

Шул уҡ хәл Шүлгәндә лә күҙәтелә. Халыҡ ағымы йылға кеүек. Юл насар, ашап сығыр таҙа урын тапмаҫһың, һәр аҙымда ҡайырып аҡса һуралар, иҫерек туристар, сүп-сар, шунда уҡ һыраһы ла, бал балы ла һатылып тора... Халҡыбыҙҙың мәшһүр эпосының тыуған төйәге булған изге ерҙәрҙең шулай хаяһыҙ тапалғанына, бысратылғанына ҡарап әрнелә...

Бөгөн Башҡортостанда туризмды үҫтереүҙе алға ҡуябыҙ. Шул ыҙанда аҡса һуғып ҡалырға ашыҡҡан йылғырҙар ҙа күҙгә ташлана башланы. Улар интернет селтәрендә үҙ хеҙмәттәрен өҙлөкһеҙ рекламалай. Шул уҡ Торатауҙы ла, Ирәмәлде лә, Шүлгәнде лә файҙалана улар. Тик туризмдың тәбиғәтте бысратыу, халыҡты йыйып, һөрлөктөрөп йөрөтөп тапатыу түгеллеген генә күҙ уңынан ысҡындыра. Дөрөҫ ойоштороlмай беҙҙә был эш, ай, дөрөҫ түгел...

Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.

✓ Ул йылына 300 спектаклдә уйнаны, был рекордты балетта берәү ҙә ҡуйғаны юҡ ине. Венала "Аҡҡош күлен" бейегәндән һуң, Фонтейен менән Нурыевты бис аҫтында 89 тапҡыр сәхнәгә саҡырып сығарҙылар.

УЛ ТОРНАЛАР МЕНӘН БЕРГӘ ОСТО

Фәрзәнә Аҡбулатова

Хикәйә

Тейешле урынға: "Низағсы, тәкәббер, коллектив дисциплинаһына буйһонмаған артист Рудольф Нурыев Парижға аяҡ баҫыу менән үҙенең элекке холҡон үҙгәртергә уйламаны ла. Киреһенсә, совет артисы режимын боҙоп, Францияның шикле кешеләре, буржуаз элементтар менән бәйләнеш нығытырға кереште",- тигән шиҡәйәт осто.

Отель фойеһында Нурыев яңы дуҫтары менән осрашҡанда бүлмәләше Соловьев ҡай саҡ улар янына килеп киткеләне. Шулай ҙа берәүҙә лә шик уятмаҫ өсөн тиҙерәк китергә тырышты. Икенсенән, Рудольфтың французса, инглизса һупалауын бик ишетергә теләмәне ул. Нурыевты "провинциаль" тип кәмһетһә лә, Соловьев үҙе нәфис телдәрҙең береһе иҫәпләнгән француз телен аңламай ине.

Шулай тура килдеме, әллә осраҡлыҡмы, фойеға төшкәс, ул Рудольфты йәнә француздар ҡамауында күрҙе.

- Кил әле, Егор, - тине Нурыев.- Күрәһеңме, мин кемдәр менән! Донъя балетында уларҙы яҡшы беләләр. Һине гел эйәртеп йөрөмәгәнгә асыуланма. Улар минең дуҫтар! Һәм дуҫ булыуҙарына бик шаттар. Ни өсөн тип уйлайһың? Улар алып килгән гәзиткә күҙ һал: "Рудольф - балет сәнғәтенең космонавты"!

-Ҡотлайым... Ярай, киттем, эш бар.

-Ҡасан да булһа һине лә сәхнәлә танырҙар. Әгәр мин теләһәм. Киров театрында, - Рудольф тағы үҙенсә шаяртты.

"Был шаҡтай һуҡмыш!" тип уйлап алды Соловьев.

-Мин һиңә ярҙам итермен. Икенсе театрҙа танылыу ала торофноң, - тип һүҙен дауам итте Нурыев.

-Икенсе театрҙа? Ни өсөн?- тип һорамайынса булдыра алманы Егор.

-Мин шулай теләйем. Бар, юлыңда бул. Һин үҙ юлыңды беләһеңме?

"Беләм, - тине Егор теш араһынан. - Хәҙер беләм. Көслөнөкө донъя. Миндә ниндәй көс барлығы тураһында һинең башыңа ла килмәй, азиат."

Шаҡтай ғына ҡыҙмаса булһа ла, Рудольф шул мәл көйҙөргөс ҡарашты тойҙо. Ни өсөндөр Рудикҡа Егорҙың йөҙө ала-сола булып күренде. Йөрәге өшөп китте. Егор башын ситкә борҙо. Был нимә? Ни өсөн һөнәрҙәше тура ҡарамай? Ала-сола, һы... Нишләп күҙгә юҡ-бар нәмә күренә? Әллә, ысынлап та, үҙе дуҫтары менән күберәк һыйланып ташланымы? Шикле уй шундуҡ осоп китте.

Рудольф Нурыевты француз журналистары атаған яңы исемдәр менән ҡотлауҙар ресторанда дауам итте. Таң атыр алдынан ғына дуҫтары уны отель ишеге ҡашында ҡалдырып хушлаштылар. Бүлмәләше Егор Соловьев уның нисәлә ҡайтырын теркәр өсөн күҙен дә йоммағайны. Ирекһеҙҙән, кирелгән кеше булды.

- Егор! Шундай иҫ киткес Париж төнөндә йоҡлап ятаһыңмы? Ебегән һин! Беләһеңме кемдәр менән таныштым мин! О Егор! - ҡосаҡтарын йәйеп уға атланы. - Һинең төшөңә лә инмәйәсәк... Кил әле!

Ҡапыл Егор өҫтөндәге япмаһын атып бәрҙе лә коридорға атылды.

-Ҡотҡарығыҙ! Аралағыҙ был кешенән!..

Шул мәлдә мөйөштән К. килеп тә сыҡты: "Мин бөтәһен дә күрҙем, мин шаһит!"

Рудольф тормошон, яҙмышын үҙгәртер өсөн барған аҫтыртын алыштың ни тиклем етди икәнен электән үк аңлай ине. Тик бала саҡтан көрәшеп, үҙен яҡлап, хаҡлығын даулап өйрәнгәнлектән, был юлы ла бирешмәйәсәкмен, тип, күңелгә инеп ултырған хәүефте ситкә ҡыуҙы. Һа, кем ул, Егор? Егорға бәйләнергә уй ҙа юҡ! Рудольфты быҫраҡ юл менән юҡҡа сығарырға һәм үҙеңдең маҡсатыңа өлгәшергә маташаһыңмы? Үҙеңде талант эйәһе, алыштырғыһыҙ артисмын, тип иҫәпләһәң, әйҙә, ярыш сәхнәлә! Был егетлек, исмаһам! Ҡара ниәт һәм ағыулы тел һинең меҫкенлекте асты! Көтмәгәндә баш ҡалҡытҡан (хәйер, көтмәгәндәме икән?) һинең кеүек йыландан Рудольф сағылмаясаҡ. Һәм Нурыев артабан килеп тыуған ығы-зығыға ла, имеш-мимештәргә лә иғтибар бирмәҫкә тырышты. Ләкин Системаның уны ауыҙлыҡлау эшенә тотонғанын, был аҙым Системаның теләге менән башланғанын башына ла килтермәй ине. Ул Соловьевтың ҡылығында бары актер, партнер көнсөллөгөн генә күрҙе.

Ә бына К-ға нимә булды? Декорация-биҙәү эштәре менән шөғөлләнгән, театрҙағы ығы-зығыларға ҡыҫылмаған был әҙәм ҡапыл ғына ҡайҙан пәйҙә булды? Бығыһы инде бөтөнләй аңлашылмай...

* * *

Тағы ла ике көндән Рудольф Нурыев көнсығыштан көнбайышҡа табан атлаясаҡ. Ҡайтыу юлы бикләнәсәк. Сәйәсәт, идеология, синыфтар тураһында гәп натыуҙан ҡасҡан кеше тап шул синфи идеологияның бер ҡорбанына әйләнәсәк. Хәйер, ниндәй ҡорбан, ти? Уның балет сәнғәтендәге бөйөк юлы башланды.

Совет артистарын араһынан "иң тәүге ҡасҡынсы" исемен алған сәнғәт маһирының уңышлы сығыштары Парижда, артабан Данияла дауам итте. Ярты йылдан Нурыев Лондондағы король балеты йондоҙо булып танылды. Нурыевҡа үҙенең ижад ғүмерендә классик балеттағы барлыҡ тиерлек төп ир-ат партияларын башҡарыу насип булды.

Хистәр ҡайнарлығын бирә алған тасуир бейеүе, кеше тәненең хәрәкәттә матурлығын, камиллығын үҙ ролдәре аша күрһәтеп, Рудольф балет сәнғәтендә партнер роленең баһаһын күтәрҙе һәм ир артисты балеринаны ғына йөрөтөүсе булыуҙан "азат итте".

Ул йылына 300 спектаклдә уйнаны, был рекордты балетта берәү ҙә ҡуйғаны юҡ ине.

Венала "Аҡҡош күлен" бейегәндән һуң, Фонтейн менән Нурыевты бис аҫтында 89 тапҡыр сәхнәгә саҡырып сығарҙылар. Был ваҡиға Гиннестың рекордтар Китабына индерелде. Британия балеты менән Рудольф Европаны ғына түгел, Американы ла яуланы. Ә бит арҙаҡлы дуэттың спектаклдәренә эләгеү аһһат булмаған. Ул килгән саҡта халыҡ билет алыр өсөн "Метрополитен-опера" бинаһы эргәһендә палаткаларҙа йәшәп, өсәр көн сиратта торған халыҡ. Балет сәнғәтен яңы бейеклеккә мендереште Рудольф.

Кеше булараҡ, Нурыевты яратмаусылар күптер, ләкин, бейеүсе булараҡ, уны барыһы ла таный. Беҙ ҙә уның ошо яғына, даһи артист булыуына, матур хеҙмәтенә иғтибар итәбеҙ. Сөнки күпме дәүер үтһә лә ул бүтәндәрҙе уҙырмай торған сәнғәт генийы булып ҡаласаҡ.

Президент Кеннедиҙың ҡатыны уны ҡунаҡҡа саҡырҙы. Был дуҫлыҡ оҙаҡ йылдар дауам итте.

Бер бейеүсегә лә Лондонда король ғаиләһе алдында яланаяҡ бейеү рөхсәт ителмәй, ләкин Англия королеваһы ҡаршыһында сығыш яһағанда Нурыев туфлийын сисеп ырғыта. Артистың был ҡылығын күрмәмешкә һалышалар.

Иордания королеваһы Фатима әсәһе һәм ҡыҙы менән Өфөгә визит яһай, Рудольф Нурыевтың әсәһе менән күрешә, талантлы улының сәләмен еткерә.

"Әсәй, һин ҡасандыр дүрт баланды етәкләп, бер билетҡа "Сыңрау торна" балетына алып барҙың. Театрға билетһыҙ инеп, балет сәнғәтенә яҙмыш билеты тотоп сыҡтым. Тәүге ҡанатты Өфөлә елпенем. Барыбер, бер нәмәгә ҡарамаҫтан, ҡоштар осор бейеклеккә мендем! Тик һиңә уңыштарым ишетелмәй. Минең хаҡта бер нәмә лә тиерлек белмәйһең..."

1976 йылда уҡ танылған мәҙәниәт эшмәкәрҙәренән торған комитет төҙөлә, улар СССР-ҙан Фәриҙә Нурыеваны сит илгә сығарыуҙарын һорап, меңәрләгән ҡултамға йыя. АҠШ-тың ҡырҡ ике сенаторы ил етәкселегенә мөрәжәғәт итә, БМО рөхсәт юллап ҡарай, ләкин СССР етәкселеге бар үтенестәргә битараф ҡалды, әсәне сит илгә сығарманылар. Был кем өсөн нығыраҡ ғазап булғандыр, уныһын инде уҡыусы үҙе әйтер. Ә беҙ тасуирлағаны икенсе нәмә тураһында.

* * *

Кыҫынҡы ғына ике бүлмәле фатир. Уның ҙурырағында, йәғни залда бөгөн, ғәҙәттә булмағанса, йәнлелек. Унда халыҡ күберәк һәм һөйләшеүҙәрендә ниндәйҙер тулҡынланыу тойола. Һүҙҙәре, башлыса, буласаҡ осрашыу тураһында. Кемделер көтәләр, кемделер ҡаршы алырға әҙерләнәләр.

Икенсе бүлмәлә - тынлыҡ. Бындағы тормош күрше бүлмәнән айырыла. Аяҡ баҫҡан, һүҙ ҡатҡан кеше юҡ. Ике карауатта ятҡан ике йән эйәһе залдағыларҙың ығы-зығыһына ҡыҫылмай. Ундағыларҙа бөтөнләй эштәре юҡ. Был карауаттарҙа әсә менән ҡыҙ ята. Фәриҙә апай инсульт алғандан һуң, иҫенә килмәй, тиерлек. Бәләкәй саҡтан һалҡын тейҙереп зәғиф ҡалған ҡыҙы Лилиә лә ҡаты ауырып түшәккә ятты. Залдағы туғандары уларҙың хәлдәрен белеп, инеп сығҡылайҙар. Дарыу эсереү, укол ҡаҙау, шунан артығын улар эшләй алмайҙар.

- Рудикҡа ҡайтырға рөхсәт бирҙеләр. Бына мөғжизә! - ти Рәзидә. - Тик әсәйем ул ҡайтҡан мәлдә һушына килерме икән? Ҡайтҡанын белмәһә, ҡалай үкенес буласаҡ.

- Әйҙәгеҙ, аэропортҡа, - тип ашыҡтыра Лилиәнең ҡыҙы Әлфиә.

- Иртәрәк бит әле.

- Юҡ-юҡ, шулай яҡшыраҡ булыр!

Бер аҙҙан өй тып-тын булып ҡалды. Хәйер, тынлыҡ тураһында беҙ нимә беләбеҙ?

- Лилиә ҡыҙым, ниңә йылмаяһың?

- Әсәй, һинең әрнеүҙәрҙән, һағыныуҙан, өмөт өҙмәй көтөүҙән сафланған, нур менән тулған йөрәгеңде күрҙем.

- Көтөүҙән?...

- Улыңды көтәп йәшәнең. Эргә-тирәңдәгеләр, туғандар, дуҫтар, таныштар, партиялаштар уны әрләгәндә лә уға ҡарата ауыр һүҙ әйткәнең булманы.

- Улай уҡ түгел, ҡыҙым.

- Шулай, әсәй. "Ниңә ҡайтманы икән? Ҡайтһын ине ул!" Улыңа булған иң ауыр һүҙҙәрең бына шулар ғына булды.

Әсә ҡыҙы менән һөйләште. Эйе, шундай бер мәл була. Ул саҡта тел кәрәкмәй.

- Әллә ниндәй туҙға яҙмаған хәбәрҙәр еткерҙеләр. Әрнеүҙәрем шунандыр. Ул, имеш, боҙоҡ, аҙған. Балаҡайымды яман итеп күрһәтергә теләгәндәр, көнсөлдәр уйлап сығара ундай хәбәрҙе.

- Әсәкәйем, боҙоҡлоҡ тураһында мин бер нәмә лә әйтә алмайым. Ул йәшәгән, шөһрәт яулаған яҡтарҙа бер ҡасан да булмаясаҡбыҙ.

- Бындай имеш-мимештәргә һис кенә ышанаһым юҡ!. Дошмандары күп баламдың. Ул киткән яҡ бай, әммә боҙоҡ. Ә мин улымды беләм... Хәләл күкрәк һөтөмдө имеҙгән улым улай түгел!..

- Ә мин шуны беләм. Ниндәй генә насарлыҡ тураһында яҙмаһындар, быларын Рудик уйлап сығармаған. Көнбайыштың боҙоҡлоғо үҙендә ҡалыр - был улар асышы.... Беҙҙең Рудольф - бейеү даһийы. Уның асыштары бейеү сәнғәтендә ҡаласаҡ. Тарихта ул матур хеҙмәте менән ҡаласаҡ, бөйөк балерон булып ҡаласаҡ.

- Ҡыҙым, беҙ һинең менән былай асыҡтан-асыҡ, иркенләп һөйләшкәнебеҙ юҡ ине. Ҡасан һинең телең асылды?

- Әсәй, күңелдәр һөйләшһен өсөн тел кәрәкмәй. Мин күңелемдән бик күп нәмәләрҙе һөйләй торғайным. Хыялдарым, ҡыуаныстарым тураһында. Тик уны аңлаусы булманы. Әле һин күңел телен аңлайһың, әсәй. Хәҙер һин шундай халәттә.

- Нисек элек аңламаным икән?

- Күп булды мәшәҡәттәрең, тормошто бөтәйтеү, осто осҡа ялғау. Күп булды һинең мәшәҡәттәрең... Шуныһы бигерәк үкенес, ошо йылдар эсендә артист туғаным күпме әсәләрҙе үҙеңә бейеүе менән ҡыуандырҙы. Тик үҙ әсәһе өсөн генә бейей алманы.

- Улай тимә, Лилиә. Киров театрында уйнағанда атайың менән барып ҡайттыҡ. Шул күргән бер спектакль тотош ғүмеремә торошло... Ә Рудил барыбер бер ҡайтыр ул. Көтәм...

- Бер станцияла сиған ҡарсығы: "Ғүмер буйы көтөрһөң," тигәйне.

- Ул һөйләшкәнде һин ишеттеңме ни? Нисек, ни рәүешле, балаҡайым?

- Күңелем менән ишеттем. Бына әлеге кеүек... Беҙ әле һөйләшкән кеүек. Йондоҙ тураһында әйткәс, беҙ уны атай, тип уйлағайныҡ,шулаймы?

- Владивостокҡа атайың янына илтәсәк поезға ҡабат менеп ултырғас, кем хаҡында һүҙ барғаны башыма барып етте... Шунан тулғаҡ тота башланы. Һуңынан да ул һүҙҙәрҙе ҡабул итмәҫкә тырыштым. Тик яҙылған яҙмыш... Ғүмер буйы уны көттөм!

(Дауамы бар).

✓ *Проценттар килешеүенең тағы бер кире яғы - капиталдың фәҡәт байҙар ҡулында ғына булыуы. Байҙар байлығына сумып, кинәнеп йәшәгәндә, ярлыларҙың бурысҡа аҡса алып йәшәүе уларҙың хәлен ауырлаштыра.*

ИНТЕРНЕТТАН

ЙЫЛМАЙЫУ - ШАТЛЫҠ ТҮГЕЛ ӘЛЕ

■ Ер шарында йәшәүселәрҙең 50 проценты тирлек (яҡынса 3,5 млрд кеше) ауыҙ ҡыуышлығы ауырыуҙары, шул уҡ кариес, теш ҡаҙнаһы сирҙәре, ауыҙ ҡыуышлығы яман шеше менән яфалана. Ирен һәм ауыҙ ҡыуышлығы яман шеше донъяла иң күп таралған яман шештәр исемлегендә. Әммә бөгөн дә ауыҙ ҡыуышлығы гигиенаһына тейешенсә иғтибар бирмәүселәр бар. Лондондың Университет колледжы профессоры Ричард Уотт билдәләүенсә, үҫешкән илдәрҙә был ауырыуҙарҙы профилактикалауға түгел, ә дауалауға иғтибар бүленә. Шул уҡ ваҡытта, Евросоюзда стоматология хеҙмәттәре иң ҡиммәте иҫәпләнә, хаҡы буйынса ул диабет һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен дауалауҙың хаҡынан һуң өсөнсө урында тора. Юғары технологиялар ғына халыҡты был сирҙәрҙән ҡотҡара алмаясаҡ, ти белгестәр. Шәрбәт эсемлектәрҙең, һағыҙҙарҙың популяр булыуы ла был проблеманы киҫкенләштерә. Табиптар шулай уҡ рекламаға ла үҙгәрештәр индерергә кәңәш итә, әйтәйек, теш пастаһын маҡтау урынына теште таҙартмай йөрөүҙең ниндәй эҙемтәләргә килтереүен күберәк һөйләргә кәрәк.

■ Кешенең кәйефе йөҙөнә яҙылған, тип уйларға күнеккәнбеҙ. Һуңғы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был хата фекер. Йөҙ мускулдары хәрәкәтенә ҡарап ҡына кешенең нимә кисереүен аңлау мөмкин түгел. Ғалимдар быға тиклем кешенең 6 төрлө хисен асыҡ аңларға була тип раҫлай ине. Улар: асыу, моңһоуланыу, бәхет, ытырғаныу, ҡурҡыу һәм аптырау. Әммә быны инҡар итеүсе ғалимдар төркөмө бар. Әйтәйек, ҡараңғы сырай йәки йылмайыу бер нисә хис-тойғоно белдерә. Һытыҡ йөҙ менән ултырыусыларҙың 25 проценты ғына асыу тойғоһон кисергән була. Ҡалған осраҡтарҙа был кешенең баш баҫып эшләүе, йәки һыҙланыу кисереүе тураһында һөйләй. Шулай уҡ йылмайыусыларҙың барыһы ла шатлыҡ тойғоһо кисерә тип әйтеп булмай.

■ Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы иҫәпләүенсә, балалар туҡланыуы баҙарындағы продукттарҙың күпселек өлөшө насар сифатлы. Уларҙа башлыса шәкәр кимәленең юғары булыуы дәлилләнгән. Шуға ла был ризыҡтар хәүеф төркөмөнә инә, етмәһә, балала тәм-томға ҡарата өйрәнеү барлыҡҡа килтерә. Киләсәктә бала татлы булмаған ризыҡтарҙан баш тартып яфалаясаҡ, сөнки ул сабый саҡтан уға өйрәнгән. Емеш-еләк пүреларының энергетик ҡиммәтенең 70 процентын алып торған шәкәрҙән тыш, уларҙа емеш һуттары, төрлө тәмләткестәр күп. Был һәр өсөнсө етештереүсенең продукцияһына ҡағыла. Экспперттар 6 айҙан бәләкәйерәк балаларға уларҙы биреүҙән тыйылырға кәңәш итә. Әлеге көндә ғалимдар балаларға тәғәйенләнгән ризыҡтарға шәкәр өҫтәүҙе тыйыу тураһында ҡанун кәрәклеген дә билдәләй.

■ Терамо университеты хеҙмәткәрҙәре киләсәктә бөжәктәрҙе ашай башлаясаҡбыҙ, тип белдерә. Ҡыр сиңерткәһе, күбәләк, ҡарышлауыҡтарҙа антиоксиданттар күләме әфлисунға йәки зәйтүн майына ҡарағанда күберәк икән. Сәләмәтлекте яҡшыртыу өсөн рационға ҡырмыҫҡа, ебәк күбәләге индерергә була, уларҙа аҡһым, минераль матдәләр, витаминдар күп. Ғалимдар әйтеүенсә, бөжәктәр үрсетеү аңһатыраҡ та, экологик йәһәттән дә ҡулайлыраҡ. Шуға ла тиҙҙән итте тап бөжәктәр алыштырасаҡ тип фаразлай улар. Әйткәндәй, әле 2 млрд кеше бөжәк ашай, популярлығы буйынса тәүге урында ҡуңыҙҙар, унан һуң африка ҡарышлауығы, бал ҡорто, һағыҙаҡ һәм ҡырмыҫҡа тора.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

АҠСАНЫ ҮТЕСКӘ БИРҺӘҢ - САУАП,

процентҡа бирһәң - оло гонаһ

Ростовщиклыҡ һәм проценттарҙан килем алыу менән шөғөлләнеүҙән дә ҙур гонаһ юҡ. Ҡөрьәндә: "Әгәр һеҙ быны эшләмәһәгеҙ (йәғни, Алла язаһынан һаҡланмаһағыҙ, өҫтәмә хаҡ алыуҙың хәрәмлегенә ышанмаһағыҙ йәки ышанып та унан баш тартмаһағыҙ), Алланан һәм Уның рәсүленән һуғыш тураһында ишетегеҙ, әгәр тәүбәгә килһәгеҙ, һеҙҙең төп малығыҙ - үҙегеҙгә!" (Әл-Баҡара сүрәһе. 2-279).

Бәйғәмбәр, өҫтәмә хаҡ ҡуйыу менән шөғөлләнеү кешелекте бәхетһеҙлеккә килтерә, шунан да ҙур гонаһ юҡ, унан ҡасырға кәрәк, тигән. Проценттарҙан өҫтәмә килем алыуға килешеүҙәр төҙөүҙе тыйыу - ул, тимәк, кешеләрҙең үҙ-ара аңлашып, татыу йәшәүенә булышлыҡ итеү. Уны тыйып һәм зәкәт индереп, динебеҙ байҙар менән ярлыларҙы яҡынайта, кешеләрҙе сабырлыҡҡа, бер-береһен ихтирам итергә саҡыра. Зәкәткә ярашлы, аҡсаны өҫтәмә килем алыу өсөн түгел, ә үтескә биреү сауаплы эш, был осраҡта кешеләр бер-береһе өсөн ғибәҙәт ҡыла, күңелдәренә тыныслыҡ һәм ҡыуаныс алыуға өлгәшә.

Проценттан килем алыу хәләл көс менән эш хаҡы алыуға, йәғни кәсепселеккә, сауҙагәрлеккә һәм башҡа эштәргә кәртә ҡуя, кешенең эшкә теләген һүндерә. Аҡсаны хәләл йә хәрәм юл менән табыуҙың айырмаһын аңламаған, проценттар ярҙамында аҡсаһын арттырып, байлыҡ туплау мөмкинлеген күргән кеше ялҡаулыҡҡа һалыша. Был мауығыуы, иртәме-һуңмы, иҡтисади йәһәттән уның хәле мөшкөлләнеүгә алып килә. Ул процент кредиты ярҙамында алынған аҡсаһына ниндәйҙер эш аса икән, табышының күп өлөшө шул процентты ҡаплауға ғына китеп торасаҡ. Шулай итеп, кредитҡа аҡса алыусы кредит биреүсегә (айырым кеше булһынмы ул, йә юридик шәхесме) бойондороҡло булып ҡала. Бындай хәл социаль йәһәттән кешеләрҙең үҙ-ара килешеп тыныс йәшәүенә, гөмүмән, бөтөн донъя именлегенә хәүеф-хәтәр менән янай. Икенсе Бөтә донъя һуғышы тоҡанып китеүҙең бер факторы ла XX быуаттың 30-сы йылдарында Көнбайыш илдәрен ялмап алған иҡтисади кризисҡа бәйле була бит. Был иҡтисади кризистың иң төп сәбәпсеһе, әлеге лә баяғы, процентҡа кредит биреүҙең киң таралыуы ла инде.

Ябай кеше аҡсаһын үҙенә 40 процент килем вәғәҙә иткән банкҡа һала. Банк үҙ сиратында был аҡсаны кредит сифатында эшҡыуарға, һатыусыға йәки етештереүсегә йылына 60-70 процентҡа бирә. Һатыусы һәм етештереүсе был процентты тауар хаҡына индерә. Шулай итеп, ҙур процент түләүе менән алынған кредит аҡсаһына сығарылған тауарҙың хаҡы күҙгә күренеп арта. Һөҙөмтәлә, тауарҙы һатып алыусылар зыян күрә.

Проценттар килешеүенең тағы бер кире яғы - капиталдың фәҡәт байҙар ҡулында ғына булыуы. Байҙар байлығына сумып, кинәнеп йәшәгәндә, ярлыларҙың бурысҡа аҡса алып йәшәүе уларҙың хәлен ауырлаштыра. Процент ярҙамында өҫтәмә табыш алыу берәүҙәрҙе әхлаҡыҙлыҡҡа, ялҡаулыҡҡа алып килһә, икенселәрҙең ҡәнәғәтһеҙлеге, нәфрәте, башҡаларға ҡаршылығы көсәйә. Шуның өсөн донъяла тыныслыҡҡа, тәртипкә һәм үҙ-ара килешеп йәшәүгә ынтылыусы кешелек бөтөн көс менән ошондай финанс мөнәсәбәттәренә ҡаршы көрәшергә тейеш. Процентҡа кредит биреү ни-

БЫЛ - ҠЫЗЫҠЛЫ

ОҘАҠ ЙӘШӘҮ СЕРЕ НИҘӘ?

Хатта иң сәләмәт кешеләр ҙә үҙҙәренә бирелгән ғүмерҙе 30-40 процентҡа кәмерәк йәшәй. Әммә Ер йөҙөндә барыһы ла тиерлек йөҙ йәшкә еткән халыҡ бар.

Полицияға эш юҡ…

Яңырыу дәүеренең бөйөк табибы Парацельс, кеше ғүмере - 600 йыл, тип раҫлаған. Илья Мечников менән Александр Богомолец 160 йыл тип һанаған. Япония-ла 40 меңдән ашыу кеше 100 йәшен тултырһа, Ер йөҙөндәге иң оло кешегә быйыл 118 йәш тулған.

Бары тик хунза халҡы вәкилдәре генә йөҙ йәштән күберәк йәшәй һәм шул уҡ ваҡытта тәндәре лә бәлтерәмәй, кариесты ла, еңел аҡыллылыҡты ла белмәйҙәр.

Ҡәбилә Һиндостанда, Гималайҙың Хунза йылғаһының боҙло ярында, тирә-яҡтан тауҙар уратып алған Бөхет үҙәнендә йәшәй. 15 мең генә булған был үҙенсәлекле халыҡ хаҡында XX быуат башында Төньяҡ Һиндостандың таулы райондары халҡын дауалаусы Британия хәрби табибы Роберт Мак-Каррисон донъяға белдерә: "Был ҡырыҫ урындарҙағы ҡәбиләләр һаулыҡтары менән артыҡ маҡтана алмай, туберкулез, тиф, диабет, Базедов сире, нәҫелдән килгән кретинлыҡ, тағун, ваба һәм сифилис та киң таралған, - тип яҙа ул. - Әммә хунза ҡәбиләһендә генә барыһы ла һау-сәләмәт. Мин бары тик бер нисә һынған урын һәм бер осраҡта ғына күҙ ялҡынһыныуын таптым". Хунзалар уртаса 120 йыл йәшәй, ә 100 йәшлектәр баҫыуҙарҙа эшләй, тауҙарҙа һунар итә, тип яҙа Мак-Каррисон. "40 йәшлек ҡатындар йәш ҡыҙҙар кеүек, хатта 60 йәштә лә улар йәш күренә, ә 65 йәштә сәләмәт бала табалар, - тип аптырай британлы. - Европалыларға оҡшағандар. Тормоштары ауыр булыуға ҡарамаҫтан, ныҡ тыныстар һәм шаттар. Һуғышмайҙар ҙа, енәйәт тә ҡылмайҙар, урлашмайҙар ҙа. Һөҙөмтәлә полиция ла, төрмәләр ҙә юҡ. Ҡәбилә менән аҡһаҡалдар ҡоро һайлап ҡуйған юлбашсы етәкселек итә. Ҡарттар ғүмер ахырына тиклем асыҡ, айыҡ аҡыллы һәм абруйлы булып ҡала". Хунзалар үҙ-ара ғына ғаилә ҡора һәм ҡатнаш никахҡа инмәй. Медиктар бындай никахтарҙы тоҡом боҙолоуға килтерә тип раҫлаһа, хунзаларға был ҡағылмай - балалар һау-сәләмәт булып тыуа.

Күпселек уҡый-яҙа белмәй. Бары тик юлбашсы һәм абруйлы ғаиләләрҙән сыҡҡан һәм мосолман мәктәптәрендә белем алғандар ғына был өҫтөнлөккә эйә. Хунза-

✓ ***Кешенең тәбиғи ғүмер оҙайлығы 100-120 йәш. Үкенескә күрә, күптәр был йәшкә етә алмай. Әгәр кеше үҙ организмына иғтибарлы, тәртипле, түҙемле, сабыр булһа, был һан ҡыҫҡармаҫ ине һәм һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәр ине.***

геҙенә ҡоролған учреждение һәм ойошмаларҙың хеҙмәтенән файҙаланмай, эш хаҡы табыуҙың икенсе юлдарын табырға тырышыу йәмғиәтебеҙ яҙмышына битараф булмаған һәр мосолмандың ғына түгел, һәр намыҫлы кешенең төп бурысы.

Фәхри Разиҙың әйтеүе буйынса, процент юлы менән өҫтәмә табыш алыуҙы хәрәм тип иҫәпләүҙең өс сәбәбе бар:

1. Процент, тимәк бушлай тауар алыу йәки бер ниндәй сәбәпһеҙ хаҡты арттырыу ул.

2. Процценттар халыҡ мәнфәғәтенә хеҙмәт итергә тейешле сауҙала бик күп проблемаларға һәм дефицитҡа алып килә, намыҫлы хеҙмәттең абруйын төшөрә.

3. Йәмғиәттә киң таралған процентһыҙ ссуда биреү, уны яйлап процентлыға әүерелдереү кешеләр араһындағы яҡшы мөнәсәбәттәрҙең боҙолоуына алып килә.

Эскелек эскесенең генә гонаһы булмаған кеүек, процценттар ҙа уның менән кинәнеп файҙаланыусының ғына гонаһы түгел. Мөхәммәт бәйғәмбәр: "Кем табыш аҡсаһын ала, кем уны түләй, кем процент килешеүҙәрен теркәй, кем уларҙың шаһиты - ләғнәт шунда", тигән. Процент килеме алып, капиталымды арттырам, тиеүселәр төптө хаталана. Был күренештең тышҡы яғы менән генә алданырға ярамай. "Алла рибаны һәләк итә, ә саҙаҡаны үҫтерә" (Әл-Баҡара сүрәһе, 2-276). Процценттар тауар етештереүсенең эшен ҡорт һымаҡ кимерә һәм тора-бара уның капиталын тулыһынса һурып бөтөрә. Саҙаҡа иһә - ихтирамлыҡ, именлек, тормош сығанағы.

"Алланың һәм Бәйғәмбәренең һуғышы" тигән төшөнсәнең ҡайһы бер осраҡта ысынлап та һуғыш булараҡ ҡаралыуын оноторға ярамай. Икенсе осраҡта ул гонаһ ҡылыусыға уның ни тиклем ҙур енәйәт ҡылыуын аңлатыу өсөн бирелгән яза булараҡ ҡарала. Әлеге осраҡта быны ике мәғәнәлә лә аңларға мөмкин.

Процценттар килешеүе төҙөүҙә ҡатнашҡан теләһә ҡайһы кешенең Алланың асыуынан ҡаса алмауын аңлауы мөһим."Ислам дине хәрәмгә илтеүсе теләһә ниндәй юлды тыя" принцибына ярашлы, гонаһҡа батырыусы бөтә төр процценттарға тыйыу киң таратыла. Хәҙистә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең шәхси өлгөһө менән яҙыҡ эштәргә юл ҡуймауы күренә. Билал бәйғәмбәргә яҡшы сортлы финиктар тәҡдим иткәс, Алла илсеһе унан был финиктарҙы ҡайҙан алдың, тип һорай. "Беҙҙең финиктар бигүк яҡшы түгел ине, Алла илсеһен ныйлар өсөн бер үлсәм насар финикты ике үлсәм яҡшыһына алыштырҙым", тип яуаплай Билал. "Һин процент алыу менән эш иткәнһең. Башҡаса бер ваҡытта ла улай эшләмә. Финиктарыңды һатырға теләһәң, хаҡын финиктар менән алма һәм аҡсаһына теләһә ҡайһы сорттан финик һатып ал", тигән. Сөнки бәйғәмбәр насар тауарҙы яҡшыһына алмаштырыу ғәҙелһеҙлек тип иҫәпләгән.

Был миҫалдан күренеүенсә, әгәр бер үк тауарҙы алыштырырға кәрәк булһа, улар сифаты һәм күләме менән дә бер иш булырға тейеш. Әгәр сифаты насар булһа, алыштырырға тәҡдим ителгән тауарҙың хаҡы аҡса менән түләнергә тейеш. Үҙ-ара һүҙ ҡуйышып эш итеүҙең икенсе бер үҙенсәлеген Ислам дине "Алты тауар тураһында"ғы хәҙистә сағылдыра: "Алтынды алтынға, көмөштө көмөшкә, бойҙайҙы бойҙайға, финиктарҙы финиктарға һәм тоҙҙо тоҙға алыштырыу күләме, сифаты һәм хаҡы менән бер иш булырға һәм алыштырған саҡта улар ҡулда булырға тейеш. Әгәр тауарҙар сорты, сифаты һәм тышҡы йөҙө менән бер-береһенән айырылһа, уларҙы алыштырмаҫҡа, ә һатырға кәрәк" (Бохари, Буйу. 77-81). Был хәҙистә үҙ-ара килешеп эш иткәндә, тауарҙы алыштырыуҙың оҙайлы ваҡытҡа һуҙылыуына юл ҡуймау маҡсатында, аҡсаны шунда уҡ ҡулға биреү тураһында ла әйтелә. Бәйғәмбәр бер заман мохтаждар үтескә алған бер килограмм арпа урынына, уны аҙаҡтан өс-дүрт килограмм итеп ҡайтарып бирергә лә ризалашҡан. Тауар алмашыуҙың был күренеше эксплуатацияға, йәғни байҙарҙың ярлыларҙы буйһондороуына алып килгәс, ул Бәйғәмбәр тарафынан ҡәтғи тыйылған.

Хәҙистә йәнә лә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тауарҙар төрлө булғанда ирекле тауар алышыуға, мәҫәлән, 10 килограмм бойҙай өсөн 20 килограмм арпа бирергә рөхсәте бәйән ителгән. Иң мөһиме, тауарҙар менән алыш-биреш итеү ҡасан да булһа берәй ваҡытта түгел, ә килешеү ваҡытында уҡ бойомға ашырылырға тейеш. Тауарҙың берәүһе йә икеһе лә оҙайлы ваҡыттан һуң тәҡдим ителеүе лә мөмкин, тигән раҫлауҙар төптө хата.

Мөхәммәт бәйғәмбәр килешеү төҙөгәндә оҙаҡҡа һуҙылған бурыс йөкләмәләрен тыйыуына ҡарамаҫтан, тауар хаҡтарының айырмаһын билдәләргә рөхсәт иткән. Заманса термин менән әйткәндә, ирекле сауҙаға рөхсәт бирелгән. "Алты тауар тураһында"ғы хәҙис процент килешеүҙәрен тыйыуҙың ғәмәлдә ҡулланылыуын, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең иҡтисад һәм финанс мәсьәләләрендә компетентлы булыуын да күрһәтә. Алла бәйғәмбәре 14 быуат элек үк социаль ғәҙеллек принциптары боҙолмаған баҙар иҡтисады принциптарын урынлаштырған. Ул һатыу-алыуҙа аҡсаның мөһим урын тотоуын билдәләгән, тауар алмашыу системаһының камил булмауына ваҡыты менән аҡсаның ҡиммәте үҙгәреренә лә иғтибар иткән.

Хушлашыу хажы ваҡытында Мөхәммәт бәйғәмбәр: "Һаҡ булығыҙ. Джахилия осорондағы ростовщиклыҡтың бөтөн төрҙәре лә ысын түгел. Төп капитал ғына һеҙҙеке. Шул рәүешле, һеҙ кемгә ҡарата булһа ла ғәҙелһеҙлек ҡылыуҙан ҡотолоп, үҙегеҙгә ҡарата ла ғәҙелһеҙлектән арына алырһығыҙ", тип иҫкәртткән.

Был күренеш нисек тыйылған? Йәмғиәттә тәрән тамыр йәйгән зарарлы традицияларҙы, ғәҙәттәрҙе, ышаныуҙарҙы бер һелтәүҙә юҡ итергә ынтылыу - ауыр эш. Уны хатта абруйлы бер шәхестең йә төркөмдөң ихтыяры һәм тырышлығы менән дә юҡ итеп булмай. Бәлки, бер мәлгә ул тамырынан бөтөрөлгән һымаҡ та тойолор, ләкин мөмкинлек булыу менән йәмғиәт үҙе үк уға әйләнеп ҡайтасаҡ. Шуға ла динебеҙҙә теге йәки был зыянлы традицияларҙан арыныу өсөн күпкә йоғонтоло, ныҡлы, оҙайлы барһа ла, файҙалы ысулдар ҡулланыла.

ларҙың үҙ әҙәбиәте юҡ; улар һынлы сәнғәттең, скульптураның йәки ағасты һырлап биҙәүҙең нимә икәнен дә белмәй, туҡыма ла туҡымайҙар. Хатта үҙҙәренең музыканттары ла юҡ - байрамдарға күрше ҡәбиләләрҙән саҡыралар.

Һыуыҡ ҡартайтмай

Мак-Каррисон хунзаларҙың көслө һыуыҡтарҙы еңел үткәреүе, уларҙың сыҙамлылығы тураһында яҙа. Ҡарттар 100-120 километр араны үтә ала, ә бейек таулы урындарҙа хәл тиҙ бөтә, хатта йәш марафонсылар ҙа тиҙ арый. "Ҡарттар, ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар Европа кешеһе бармағын тығып ҡарарға ла ҡурҡҡан һыуыҡ һыуҙа, һыуыҡ ел иҫеп тороуына ҡарамаҫтан, ҡыуанып йөҙә, - тип яҙа Мак-Каррисон. - Сығырыуға тәҙрәһеҙ таш йорттар ҙа булышлыҡ итә. Уларҙа таш эскәмйәләрҙә йоҡлайҙар. Малдары ла шунда тора. Йорттарҙа бик һыуыҡ: был урындарҙа ағастар бик үҫмәй, тимәк, утын да юҡ. Утта улар бары тик ашарға ғына бешерә, йыуынырға һәм кейем-һалым йыуырға һыуыҡ һыуҙы тотоналар. Һабын урынына көл ҡатыш аҡ балсыҡ ҡулланалар. Шундай шарттарҙа ла һәр ваҡыт таҙа йөрөйҙәр һәм хатта, тирә-яҡ ҡәбиләләрҙә беттәрҙән ыҙалауҙарына ҡарамаҫтан, беттең нимә икәнен дә белмәйҙәр..."

Мәжбүри диета

"Хунзаларҙың төп аҙығы - йәшелсә һәм емеш-еләк, - тип яҙа британлы. - Улар көнөнә ике тапҡыр: иртән һәм кис ашай. Аҡ һәм үҫемлек майының нимә икәнен дә белмәйҙәр. Йылына бер нисә тапҡыр ғына ит ҡуллаланалар, ә йыл уңышһыҙ булғанда алдан әҙерләнгән емеш-еләк һәм емеш һуттары, ярмалар һәм кипкән өрөк менән туҡланалар. Көрпәле ҡара икмәк ашайҙар; шәкәрҙе бөтөнләй белмәйҙәр, әммә ризыҡҡа саҡ ҡына тоҙ һалалар. Майҙы өрөк һөйәгенән һыҡтырып, уны бөтөн нәмәгә ҡушалар".

Бындай мәжбүри диетаны мак-Коррисон ҡәбиләнең хәйерселеге менән аңлата. "Уңдырышлы ерҙең һәр аяһы бында алтынға бәрәбәр. Хунзалар емеш ағастары, йәшелсә (шпинат, кишер, салат-латук, шалҡан, борсаҡ, кәбеҫтә, ҡауын, картуф) ултырта, арпа, тары, бойҙай, ҡарабойҙай үҫтерә. Әммә улар бик насар үҫә: дымһыҙ ерҙә бик һыуыҡ, ямғыр-ҡар ҙа һирәк яуа. Бында һыйырҙар ҙур эт кеүек, ә ябыҡ һарыҡ-кәҙәләр бына-бына йығылып үлер төҫлө. Хунзалар бөтөнләй тиерлек һөт эсмәй - һыйырҙар көнөнә ике литрҙай ғына аҡ бирә, уныһы ла быҙаулағандан һуң һәм ул майһыҙ тиерлек. Һарыҡ-кәҙәләрҙең бөтөнләй һөтө юҡ, иттәре ҡоро, майһыҙ, тарамыштан тора". Март һуңына ризыҡ запасы бөтә һәм яҙҙың ике айын бында "ас яҙ" тип атайҙар, мәжбүри ураҙа яңы уңышҡа тиклем дауам итә. Шул ваҡытта ла хунзалар ғәҙәти тормош алып бара: һунарға сыға, мал көтә һәм баҫыуҙарҙы эшкәртә. Хатта шаярырға-көлөргә лә ваҡыт табалар.

Ҡырыҫ Гималай йәйе килгәс (йылына 9 йылы ай) хунзалар өйҙәренән сығып, асыҡ һауала йәшәй. "Хунзаларҙың нервы системаһы канат кеүек ныҡ, ҡыл кеүек нәҙек һәм нескә, - тип яҙа Мак-Каррисон. - Улар бер ваҡытта ла асыуланмай, түҙемһеҙлənмәй, үҙ-ара талашмай, физик ауыртыуҙы, күңелһеҙлекте, тауышты һәм башҡа уңайһыҙлыҡтарҙы ныҡлы рухи тыныслыҡ менән үткәрә". Беҙгә, ҙур ҡалаларҙа йәшәүселәргә, уларҙың нервы системаһының тотороҡлоғона көнләшергә генә ҡала.

Интернет селтәренән.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Кемдер, "һәр йәштең үҙ матурлығы", ти. Ышанмағыҙ, алдаҡ! Олоғайыу - ҡурҡыныс... Бөйөк Н. В. Гоголь: "Йомшаҡ үҫмерлек йылдарынан сығып, тупаҫландырыусы ҡырыҫ ирлек осорона сыҡҡанда кешеләге барлыҡ хәрәкәттәрҙе үҙегеҙ менән алығыҙ, уларҙы юлда ҡалдырмағыҙ, һуңынан күтәрә алмаҫһығыҙ! Алда көткән ҡартлыҡ уҫал, ҡурҡыныс һәм бер нәмәне лә кире бирмәй", - тип яҙған. Ҡулдар һәм аяҡтар ауыртҡанда, тештәр төшкәндә, сәстәр ҡойолғанда, күреү һәләте кәмегәндә һәм хәтер юғалғанда, тире һырҙар менән ҡапланғанда, ҡасандыр тығыҙ булған тән көсһеҙләнеүе һәм бәлтерәүе матурмы? Гәфү итегеҙ... Быныҡ менән көрәшергә кәрәк. Көрәшергә һәм нисек булһа ла еңергә!

Күптән мәғлүм булыуынса, кешенең тәбиғи ғүмер оҙайлығы 100-120 йәш. Үкенескә күрә, күптәр был йәшкә етә алмай. Бөйөк физиолог Иван Павлов, әгәр кеше үҙ организмына иғтибарлы, тәртипле, түҙемле, сабыр булһа, был һан ҡыҫҡармаҫ ине һәм һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәр ине, тип яҙған. "Йәшлек - йылдар менән үтә торған етешһеҙлек", - тигән шағир. Бары тик бала саҡта ғына ваҡыт яй үтә, һәр ай йыл кеүек һуҙыла. Үҫеүсе организмда, оло кешенеке менән сағыштырғанда, бик күп физиологик һәм психологик үҙгәрештәр бара (психологтар белдереүенсә, 10 йәшлек бала өсөн ваҡыт 50 йәшлек кешегә ҡарағанда 4 тапҡырға яйыраҡ үтә). Ҡасандыр үҙенең билдәле йырында Марк Бернс йырлағанса, "Йылдар оса, беҙҙең йылдар ҡоштар һымаҡ оса". Артыңа әйләнеп ҡарарға ла өлгөрмәйһең, 60 та тула, һәр саҡ ниндәйҙер уңайһыҙлыҡ тояһың, йә теге, йә был ерең ауырта башлай... Кәйеф юҡ, тән ауырая. Өҫтәүенә, уйламағанда йөрәк-ҡан тамырҙары эшмәкәрлеге боҙола, терәк-хәрәкәт аппараты ауырыуҙары барлыҡҡа килә, нервы-писхик сирҙәр табыла...

"Нескә урын тиҙ йыртыла", тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Организмға оҙаҡ йылдар дөрөҫ булмаған йәшәү рәүеше, насар ғәҙәттәр, даими стресс хәл-торошо тәьҫирендә, тәү сиратта, наҫелдән килгән йәки тыумыштан бирелгән "көсһеҙ звено" зыян күрә. Организм эшмәкәрлеге боҙола. Һәм шул ваҡытта дауаланыу башлана ла инде. Ҡартлыҡ яҡынлашыуын тойоусылар услап-услап "йөрәктән", "баш ауыртыуынан", "ҡан баҫымынан", "йоҡоһоҙлоҡтан" һ.б. дарыу ашай башлай. Үкенескә күрә, бик күп оло йәштәгеләр дарыуҙарҙың "мөғжизәле көсөнә" ышана, үҙҙәре менән һәр саҡ ниндәйҙер дарыу алып йөрөй. Бындай "запас" айырым осраҡта ярҙам итә, әммә ҡайһы берәүҙәр, дауалаусы табип менән кәңәшләшмәйенсә, үҙ белдектәренә йәиһә таныштары, дуҫтарының кәңәше буйынса дауалана. Әлбиттә, бындай баш-баштаҡлыҡҡа юл ҡуйырға ярамай. Әгәр дарыу күршеңә ярҙам иткән икән, ул һеҙгә лә ярҙам итеренә гарантия юҡ. Бәлки, һеҙҙә уға аллергия булыр? Өҫтәүенә, күп дарыуҙарҙың башҡа ағзаларға йоғонтоһо бар. Бигерәк тә гормональ препараттарҙы бик һаҡ ҡулланырға кәрәк. Улар эске секреция биҙҙәре эшмәкәрлеген боҙоп ҡына ҡалмауы, ә тотош эндокрин системаны эштән сығарыуы ихтимал.

С. КУЗИНА.

(Дауамы бар).

5 АВГУСТА
ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.10, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Экспроприатор". [16+]
23.30 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
0.00 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
2.15 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
4.10 Т/с "Семейный детектив". [12+]

БСТ

7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.
14.00 Итоги недели (на рус. яз.).
14.45 Специальный репортаж. [12+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [6+]
16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
16.15 Гора новостей.
16.30 Т/с "Сируси". [16+]
18.00 Ради добра. [6+]
18.15, 21.00 Бизнес-обзор. [12+]
18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).
19.00, 22.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
23.15 Колесо времени. [12+]
0.15 Х/ф "В небо за мечтой". [6+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.15 Спектакль "Последнее море Чингисхана". [12+]
5.00 Автограф. [12+]

6 АВГУСТА
ВТОРНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.05, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Экспроприатор". [16+]
23.30 "Семейные тайны" с Тимуром Еремеевым. [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
0.00 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
2.15 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
4.10 Т/с "Семейный детектив". [12+]

БСТ

7.00, 9.15 Сәләм. [12+]
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]
11.15 Республика Live. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час.
13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.[12+]
14.30 Дорога к храму. [6+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.15 Гора новостей.
18.00 Специальный репортаж. [12+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Криминальный спектр. [16+]
20.45 Бизнес-обзор. [12+]
21.00 Уфимское "Времечко".
22.00 "Честно говоря". [12+]
23.15 Күстәнәс. [12+]
23.45 Замандаш. [6+]
0.00 Х/ф "Другое небо". [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Зятек". [12+]

7 АВГУСТА
СРЕДА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 0.25, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Экспроприатор". [16+]
23.30 Премьера. "Про любовь". [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
0.00 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
2.15 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
4.10 Т/с "Семейный детектив". [12+]

БСТ

7.00, 9.15 Сәләм. [12+]
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]
11.15 "Честно говоря". [12+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 Счастливый час.
13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.[12+]
14.30 "Аль-Фатиха. [6+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15, 23.15 Бала-саға. [6+]
16.15 Гора новостей.
18.00 Бай бакса. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Дорожный патруль. [16+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 Историческая среда. [12+]
22.00 Вечерний телецентр. [12+]
0.00 Х/ф "Борцу не больно". [16+]
1.45 Бәхетнамә. [12+]
2.45 Спектакль "Тамарис". [12+]
4.45 Весело живем. [12+]

8 АВГУСТА
ЧЕТВЕРГ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.20, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Экспроприатор". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант" . [16+]
0.25 На ночь глядя. [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
0.00 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
2.15 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
4.10 Т/с "Семейный детектив". [12+]

БСТ

7.00, 9.15 Сәләм. [12+]
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]
11.15 100 имен Башкортостана. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час.
13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә.[12+]
14.30 Автограф. [12+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.15 Гора новостей.
16.30 Д/ф "Тюлени Лоры Белоиван". [12+]
18.00 Бизнес-обзор. [12+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Криминальный спектр. [16+]
20.45 Деловой Башкортостан. [12+]
21.00 Уфимское "Времечко".
22.00 Республика Live. [12+]
23.15, 5.00 "Песня года". [12+]
23.45 Современник. [12+]
0.00 Х/ф "Любить нельзя забыть". [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Бесталанная". [12+]

9 АВГУСТА
ПЯТНИЦА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. Международный музыкальный фестиваль "Жара" . [12+]
23.55 "Вечерний Ургант" . [16+]
0.50 Х/ф "Вне времени". [16+]
2.50 "Про любовь". [16+]
3.35 "Наедине со всеми". [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Х/ф "Ищу мужчину". [12+]
21.05 Х/ф "Не было бы счастья..." [12+]

БСТ

7.00, 9.15 Сәләм. [12+]
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
10.00, 5.45 Д/ф "Тюлени Лоры Белоиван". [12+]
11.15 100 имен Башкортостана. [12+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 "Йома". [0+]
12.30 Башкорттар. [6+]
13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).
13.30 Автограф. [12+]
14.00 Неизвестный Башкортостан. [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00 Интервью.
15.15 Алтын тирмә. [0+]
16.15 "Выше всех!" [6+]
16.30 "Архивы - хранители истории". [12+]
17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
17.45, 20.30 Интервью. [12+]
18.00 У дачи. [12+]
19.00 "Башкорт йыры-2019". [12+]
19.45 Сәңгелдәк. [12+]
20.00 Новости (на рус.яз.). [0+]
20.15 Ради добра. [6+]
20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
21.00 Бизнес-обзор. [12+]
22.00 Вечерний телецентр.
23.15, 4.30 Караоке по-башкирски. [12+]
0.00 Х/ф "Из жизни отдыхающих". [12+]
2.00 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]
5.15 Башкорттар. [12+]

10 АВГУСТА
СУББОТА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.40, 6.10 Х/ф "Его звали Роберт". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.10 Х/ф "Неподсуден". [6+]
9.00 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.10 Д/ф "Олег Стриженов. Любовь всей жизни". [12+]
11.10 Честное слово с Юрием Николаевым. [12+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.10 Д/ф "Михаил Боярский. Один на всех". [16+]
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.30, 21.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
23.00 Х/ф Премьера. "Бывшие". [16+]
0.35 Х/ф "Огненные колесницы". [0+]
2.55 "Про любовь". [16+]
3.40 "Наедине со всеми". [16+]

РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.15 "По секрету всему свету".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Смеяться разрешается.
14.00 Х/ф "Закон сохранения любви". [12+]
16.00 Х/ф "Злая судьба". [12+]
21.00 Х/ф "Клуб обманутых жён". [12+]
1.00 Х/ф "Не было бы счастья-2". [12+]

БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).
8.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]
8.45 Д/ф "Башкирская яшма". [12+]
9.15 Моя вершина. [12+]
9.30 "Физра". [6+]
9.45 "Перекличка". [6+]
10.00, 11.00, 12.00, 15.00, 16.00, 17.00, 19.30, 19.45 "Лидеры Башкортостана".
10.15 "Книга сказок". [0+]
10.30 МузКәрәз. [0+]
10.45 "Городок АЮЯ. [0+]
11.15 Күстәнәс. [12+]
11.45 "Большие театры малых городов". [12+]
12.15 Хазина о Хазине. [0+]
12.45 Весело живем. [12+]
13.00 "Дарю песню. [12+]
14.30 "Дочь лета". [12+]
15.15 Из фондов ТВ. [12+]
15.45 "Йөрәк һүзе". [12+]
15.50, 19.40, 6.50 Выборы-2019. [12+]
16.15, 19.00 Бизнес-обзор. [12+]
17.15 Колесо времени. [12+]
18.15 Инцидент-репортаж. [12+]
20.30 "Байык" представляет... [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Соотечественники. [12+]
22.30, 1.00 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15, 4.15 Х/ф "Бинго Бонго". [16+]
1.45 Спектакль "Наследство". [12+]
3.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]
6.00 "Архивы - хранители истории". [12+]

11 АВГУСТА
ВОСКРЕСЕНЬЕ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.20, 6.10 Т/с "Научи меня жить". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.35 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.15 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.50, 10.10 "Жизнь других". [12+]
11.00 "Курбан-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
11.40, 12.15 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости с субтитрами.
13.25, 4.05 "Наедине со всеми". [16+]
14.15 Д/ф "Людмила Хитяева. "Я не могу быть слабой". [12+]
15.10 Х/ф "Стряпуха". [0+]
16.35 "КВН". Премьер-лига. [16+]
18.00 "Точь-в-точь". [16+]
21.00 Время.
21.50 Т/с Премьера. "Поместье в Индии". [16+]
23.40 Х/ф "Восстание планеты обезьян". [16+]
1.35 Х/ф "Судебное обвинение Кейси Энтони". [16+]
3.20 "Про любовь". [16+]

РОССИЯ 1

5.20 Х/ф "Любовь и Роман". [12+]
7.20 "Семейные каникулы".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 Сто к одному.
10.10 Д/ф "Дорожная карта". [12+]
11.00, 20.00 Вести.
11.20 Праздник Курбан-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
12.10 Т/с "Русская наследница". [12+]
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
2.05 Х/ф "Отдалённые последствия". [12+]
4.10 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 Курай даны. [12+]
9.00 "Курбан-байрам". Прямая трансляция из Уфимской соборной мечети Ляля-Тюльпан.
10.00 "Праздник веры и добра!" Концерт. [12+]
10.30 Бирешмә. Профи. [6+]
11.15 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.30 Байтус. [6+]
11.45 "Сулпылар". [0+]
12.00 Бай бакса. [12+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз.).
13.15 Алтын тирмә. [0+]
14.00 "Дарю песню. [12+]
15.00, 16.00 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".
15.50, 19.40, 6.50 Выборы-2019. [12+]
19.00 "Иман нуры". Концерт. [12+]
19.45 Әлләсе... [6+]
20.30 "Теге өсәү". [12+]
21.00 Республика Live. [12+]
21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
22.30 "Красная кнопка". [16+]
23.15 Х/ф "Дети Дон Кихота". [12+]
0.45 Спектакль "Семейный портрет с посторонним". [12+]
2.30 Д/ф "Млечный путь". [0+]
3.30 Х/ф "Дети Дон Кихота ". [12+]
5.00 Историческая среда. [12+]
5.30 100 имен Башкортостана. [12+]

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1440 һижри йыл.

Август (Зөлхизә)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалҡа	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Ақшам намаҙы	Йәстү намаҙы
5 (4) дүшәмбе	4:04	5:34	13:30	19:38	21:08	22:38
6 (5) шишәмбе	4:06	5:36	13:30	19:36	21:06	22:36
7 (6) шаршамбы	4:08	5:38	13:30	19:34	21:04	22:34
8 (7) кесе йома	4:09	5:39	13:30	19:32	21:02	22:32
9 (8) йома	4:11	5:41	13:30	19:30	21:00	22:30
10 (9) шәмбе	4:13	5:43	13:30	19:28	20:58	22:28
11 (10) йәкшәмбе	4:15	5:45	13:30	19:26	20:56	22:26

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

РӘСӘЙҘЕҢ ЕРЛЕ ХАЛЫҠТАРЫ

"Дәртһеҙ егет - (...) ташы"
Музыка ҡоралы
Милләш (диалект)
Кеңәйҙ, төңьяҡ этнографик төркөмгә бүленгән халыҡ
Урапда йәшәгән ерле халыҡ (1)
Күнекмәләрҙе яҡшы үтәгән эт тоҡомо
1931 йылға тиклем "тунгус" халҡы
Менделеев таблицаһында 88-се элемент
Дағстан, Чечня һәм Төньяҡ Осетияла йәшәгән халыҡ (4)
"Атлы тунгустар" тип йөрөтөлгән халыҡ
Аляска һәм Чукотканы берләштергән халыҡ (3)
Петра-заводск халҡы
"Көслө ырыу хан ҡуйыр, үсле ырыу (...) ҡойор"
Ҡыҙыл ҡанатлы йыртҡыс балыҡ
Болан үрсетеп, чумдарҙа йәшәгән халыҡ
"Тадарлар" йәки "Минус татарлары"
Һиндостан ҡатын-ҡыҙы кейеме
"Егет булһа, (...) булһын"
Үңәстең өҫкө өлөшө
"(...) аш булмаҫ, ейән иш булмаҫ"
"Илдә - илле, береһенән-береһе (...)"
Ҡазан халҡы
"Ҡалас ашатыусы"
Батша ултырғысы
"(...) - алтын һаҙаҡ, инә - алтын ҡанат"
Модель Кемпбелл исеме
Ҡрәстиәндәрҙе һынландырған эш ҡоралы
Һыуҙың "дошманы"
Дауалаусы
Ир-егеттең уң ҡанаты
Йошкар-Ола халҡы
Ижевск халҡы
Байкал күле эргәһендә йәшәүсе халыҡ (2)
"Унаҡан" тип йөрөтөлгән Камчатка халҡы
Үҙҙәк Азияның көньяғындағы тау системаһы
Сихотэ-Алинь территорияһында йәшәгән халыҡ
Урамдарға һыу биреүсе колонка
Бал ҡорттары өйө
Бер тиҫтә
"Ауыҙ - (...), тел - тоҙаҡ"
Көн (антоним)

Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

29-сы һандағы сканворд яуаптары.

Горизонталь буйынса: Ҡумта. Украина. Тотҡа. Ҡойма. Таған. Ғәйрәте. Тау. Шәкәр. Нэпман. Көсөк. Төн. Әрмәк. Соус. Сама. Инсан. Аунау. Ауыр. Ҡот. Ант. Әтлек. Тағараҡ. Оркестр.

Вертикаль буйынса: Үзбәкстан. Ҡазағстан. Тәңҡәсуҡ. Урам. Ойотҡо. Ағуна. Ҡорот. Трап. Атташе. Төркмәнстан. Уты. Аҫаба. Ҡор. Теш. Әсирә. Әжер. Әйшә. Нур. Күнәк.

ҠОЛАҠ ҺАЛ!

Фәкирлек тураһында уйлама

Аҡса етешмәүе тураһында уйҙар - был һәр ваҡыт үҙеңә нимәлер алырға йыйынған саҡта барлыҡҡа килгән борсолоу. Әгәр үҙеңде етешмәүгә программалаштыраһаң, һин бөтөн нәмәлә - ашауҙа, кейемдә, электр энергияһын тотоноуҙа экономиялай башлаясаҡһың. Әгәр даими рәүештә насар һауа торошо тураһында уйлаһаң, йонсоу көндәр көт тә тор.

Аҡса йәлеп итеү күнекмәһе

Көшөлөгөңдө ас та, уға сит күҙлектән ҡараған кеүек күҙ һал. Ул һинең турала нимә һөйләй? Аҡсаларың тигеҙләп, бер-бер артлы, йыйнаҡ итеп һалынғанмы, әллә аралаш, бөтәрләнеп туҙып ятамы? Аҡсаны ваҡ-төйәк тип ҡарарға ярамай. Аҡса - ул бик көслө энергия, улар тәрбиә һәм хәстәрлекте бик тә ярата. Был турала онотма.

Бөгөндән башлап көшөлөгөңдө көн дә тәртипкә килтереүҙе, бөтәрләнгәндәрен, тигеҙләп, үҫә барған тәртиптә (50 һумлыҡтар артынан 100, 500, 1000 һумлыҡтарҙы) һалыуҙы ҡағиҙә итеп ал. Был процедура ваҡытында аҡсаларыңды һыйпа, яғымлы һүҙҙәр әйт һәм был "аҡса массажын" түбәндәге аффирмациялар менән тамамла:

- Минең килемем даими арта.
- Аҡса мине ярата.
- Аҡса миңә торған һайын күберәк тартыла.

Булғандың ҡәҙерен бел

Үҙ тормошонда ыңғай үҙгәрештәр теләһәң, булғандың ҡәҙерен белергә өйрән. Әйтәйек, яңы фатир хаҡында хыялланып, иҫкеһе тураһында: "Күрә алмайым ошо аласыҡты", - тиергә ярамай. Шулай фекерләп, һин хыялыңдағы йорттo, киреһенсә, ситкә этәрәһең генә. Булғанына яратып ҡара, уны таҙа тот һәм кәрәк саҡта һинең менән бергә булғаны өсөн рәхмәт әйт. Шул саҡта һин яңыһын алыу өсөн юлдар асыраһың. Шатлыҡ һәм хуплау донъяһы булдыр үҙеңдә. Рухыңдың көсөн той. Үҙеңде баһаларға өйрән. Үҙ шәхесеңде ихтирам ит һәм уны үҫтер, үҙ тәнеңде ярат һәм уны тәрбиәлә. Тәнең - ата-әсәйең һәм Тәңре һиңә яратып килтереп биргән матур бүләк бит. Һинең тәнең Аллаһы Тәғәлә һәм кешеләрҙең мөхәббәте менән булдырылған. Шуға күрә лә ул үҙенә ҡарата һөйөү күрһәтеүгә ләззәтләнеп яуап бирә.

Наталья ПРАВДИНА.

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

ҠАЙНАТМА ҠАЙНАТ

Йомарт йәйҙең еләк-емештәре менән һыйланып туйһағыҙ, уларҙан ҡышҡылыҡҡа ҡайнатма әҙерләй башлаһағыҙ ҙа була. Һаҡлауы ла уңайлы, тәмле лә. Ҡайнатма әҙерләүҙең бер ауырлығы ла юҡ. Бары тик ҡайһы бер үҙенсәлектәрен оноторға ярамай. Мәҫәлән, баҡса еләген каса япрағын алып ташларҙан алда йыуалар. Юғиһә, еләктәр һыуҙы һеңдереп, тәмһеҙләнә, етмәһә, һуты айырыуса күп бүленеп, ҡайнатма шыйыҡ буласаҡ. Әгәр ҙә ҡурай еләген үҙегеҙҙең баҡсанан ҡоро көндә үҙегеҙ йыйып алһағыҙ, йыумаһағыҙ ҙа була.

Ҡурай еләгенән

3 кг ҡурай еләге | 3 кг шәкәр

Ҡурай еләген йыуырға тура килә икән, дуршлаг ярҙамында эшләгеҙ. Дуршлагҡа еләктәрҙе һалып, һыуыҡ һыулы һауытта бер аҙ тотоғоҙ ҙа, һыуын ағыҙыу өсөн ярты сәғәткә ҡуйып тороғоҙ. Әҙер еләкте ҡайнатма ҡайната торған һауытҡа һалып, өҫтөнә шәкәр һибегеҙ, ул бүлмә температураһында бер нисә сәғәт торһон. Ваҡыты-ваҡыты менән еләктәрҙе иҙмәҫ өсөн ипләп кенә болғатығыҙ. Талғын утта ҡайнатып сығарғас, тағы ла 15-20 минут ҡайнатырға, болғатып торорға. Күбеген һыпырып алығыҙ, юғиһә, ул ҡайнатманы әсетеүе ихтимал. Әҙер ҡайнатманы таҙа ҡоро банкаларға һалып алырға. Ҡараңғы һалҡынса урында һаҡларға.

Ҡыҙыл ҡарағаттан

3 кг ҡыҙыл ҡарағат | 3 кг шәкәр

Ҡыҙыл ҡарағаттан, ғәҙәттә, ҡайнатма ҡайнатып тормайҙар, сөнки ҡарағаттың тышы һытылып, уның йәмен ебәрә. Йыуылған ҡыҙыл ҡарағаттың өҫтөнә шәкәр һалып, һут бүленеп сыҡҡансы ҡараңғы урында тоталар. Һуңынан шәкәре иреп бөткәнсе талғын утта ҡайнаталар. Сироп ҡуйырғансы утта тотаһың, даими болғатып тораһың. Әгәр ҙә ҡайнатма матур булһын тиһәгеҙ, ҡайнар көйөнсә иләктән үткәреп алығыҙ.

Ҡара ҡарағаттан

3 кг ҡара ҡарағат | 4,5 кг шәкәр | 4,5 стакан һыу

Йыуылған ҡарағатты ҙур булмаған өлөштәр менән 4,5 стакан ҡайнап ултырған һыуға 2-3 минутҡа тығып алаһың. Аҙаҡтан ошо һыуға шәкәр өҫтәп, сироп ҡайнатырға. Ҡайнар сиропты ҡара ҡарағат өҫтөнә ҡояһың һәм 3 сәғәткә ҡалдыраһың. Ошо ваҡыттан һуң утҡа ҡуйып, әҙер булғансы ҡайнатаһың.

Крыжовниктан

3 кг крыжовник | 3 кг шәкәр | 4,5 стакан һыу

Йәшел крыжовниктың бешкән емештәренең ике яҡтан ҡойроҡтарын ҡырҡаһың һәм 2 сәғәткә һыуыҡ һыуға һалаһың, һыу һәм шәкәр сироп ҡайнатаһың һәм бер аҙ һыуытаһың. Крыжовник ултырған һыуҙы түгәбеҙ, емештәрҙе киптерәбеҙ. Ҡайнаған саҡта крыжовник ярылмаһын тиһәң, уны бер нисә урындан тишергә кәрәк. Сиропҡа һалып, талғын утта ҡайнау хәленә еткерергә, һыуытырға һәм тағы ла ҡайнатып сығарырға. Ошо рәүешле 3 тапҡыр эшләргә. Был крыжовник сиропты һеңдерһен һәм формаһын һаҡлаһын өсөн кәрәк. Тәм өсөн банканың төбөнә сейә япрағы һалырға була.

Сливанан

3 кг слива | 3,6 кг шәкәр | 1 литр һыу

Ярты сәғәт һалҡын һыуҙа тотҡандан һуң, сливаларҙы йыуырға һәм киптерергә. Урталай ҡырҡып, төшөн алырға, шунда уҡ ҡайнар сиропҡа төшөрөргә. Талғын утта ҡайнау хәленә еткерергә, бер нисә минут ҡайнатырға. Һыуытҡандан һуң тағы ла 2 тапҡыр ҡабатларға.

✓ *Яҡшынан яҡшы тыуыуы - ғәҙәт, яҡшынан яман тыуыуы - ғәжәп.*
(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

ӘКИӘТТӘР БУЙЫНСА ЙӘНЊҮРӘТТӘР

"Башҡортостан" киностудияһы башҡорт телендә анимацион фильмдар серияһын әҙерләй. Бөтәһе 5 йәнһүрәт буласаҡ. Проект Башҡортостан Башлығының дәүләт һәм республика халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса грантына төшөрөлә, уның күләме - 2,2 млн һум.

Һүрәт төшөрөү анимацияһы техникаһындағы был фильмдар 3-әр, 4-әр минутлыҡ. Республиканың бер нисә мультипликаторы эш башлаған да инде. Йәнһүрәттәр ҡыҙыҡлы булыуы өҫтөнә ниндәйҙер файҙалы мәғлүмәткә лә эйә буласаҡ. Режиссер Рим Шәрәфетдинов әйтеүенсә, әлеге мәлдә әкиәттәр һайлана, сценарийҙар яҙыла, рәссамдар персонаждар өҫтөндә эшләй, эскиздар төшөрөлә. Һәр фильм жанры һәм художестволы стиле менән бер-береһенән айырыласаҡ. Халыҡ көйҙәре лә ҡулланыласаҡ. Проекттың презентацияһы декабрь айына планлаштырылған. Әйткәндәй, тап ошо гранттар һөҙөмтәһендә 2019 йылда башҡорт телендә яңы аудиокитаптар донъя күрәсәк, форумдар, фестивалдәр, мәҙәни акциялар уҙғарыласаҡ. Гранттарҙың дөйөм күләме - 72 млн һумдан ашыу.

АҠБУҘАТ БӨРЙӘНГӘ ҠАЙТА

Августа Бөрйән районында Аҡбуҙатҡа һәйкәл ҡуйыласаҡ. Ул башҡорт халҡының эпос һәм легендалары буйынса ҡуйылған тәүге һәйкәл буласаҡ.

Һәйкәл өсөн Йылҡысыҡҡан күле буйы һайланған. Эпос буйынса тап ошо урындан Аҡбуҙат сыҡҡан. Район хакимиәте, Кейекбай ауыл советы, Башҡортостандың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге вәкилдәре ҡатнашлығында ултырыш үтте. Билдәле булыуынса, Аҡбуҙат һәйкәленең иң яҡшы проектына конкурс булғайны һәм унда башҡорт скульпторы Өлфәт Ҡобағошовтың эскизы еңеп сыҡты. Йәй башында һәйкәлдең гипстан яһалған һыны Кәҫле заводына оҙатылды, суйын һын августа Шүлгән мәмерйәһенә барып етәсәк. Уны рәсми асыу тантанаһы ла августҡа билдәләнгән.

ТӘҮГЕ УҢЫШТАР

Режиссер Булат Йосоповтың "Беренсе Республика" фильмын яҡынса 40 мең тамашасы ҡараған. Прокаттың тәүге өлөшө 16 мартан 21 июлгә тиклем дауам иткәйне.

Республиканың 54 районында, 16 кинотеатрында, Башҡортостандың, Татарстандың, Сыуашстандың, шулай уҡ Силәбе, Ырымбур, Владимир, Пенза, Һарытау өлкәләренең 200-гә яҡын ауыл һәм ҡалаларынан тыш, фильмды Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта һәм Лос-Анджелеста күрһәттеләр. "Беренсе Республика" кинофестивалдәрҙә ҡатнашып та өлгөрҙө. 41-се Мәскәү халыҡ-ара кинофестивале, Чебоксар халыҡ-ара кинофестивале, FESTPRO Мәскәү халыҡ-ара кинофестивалендә "Иң яҡшы сценарий" (Таңсулпан Бабичева, Гөлсәсәк Саламатова), "Иң яҡшы рәссам-ҡуйыусы эше" (Рөстәм Баймөхәмәтов) номинацияларына, шулай уҡ һуңғы фестивалдә бер нисә номинация буйынса лайыҡ булды. "Тере таҫма" кинокомпанияһынан белдереүҙәренсә, августа прокат дауам итәсәк.

МИЛЛӘТЕҢДЕ КҮРЊӘТ

18-22 августа Чебоксарҙа IV "Төркиҙәр алтыны" Бөтөн Рәсәй төркиҙәр йәштәре форумы уҙа. Һайлап алыу туры был аҙнала тамамланды.

Форумда ҡыҙыҡлы программалар, эксперттар, власть, мәҙәниәт, бизнес вәкилдәре менән осрашыуҙар, тренингтар, төркиҙәр ҡыҙыҡтарҙың мәҙәни-тарихи мираҫын өйрәнеү һәм һаҡлау өлкәһендәге иң яҡшы өлгөләр менән танышыу ҡаралған. Сара Милләттәр эше буйынса федераль агентлыҡ тарафынан үткәрелә һәм Рәсәй халыҡтары мәҙәниәтен үҙ-ара байытыу, йәштәр араһында граждандарҙыҡ тойғолары уятыу маҡсаты ҡуйыла. Ғаризалар ҡаралғандан һуң, 7 август көнө 150 кешенән торған төркөм исемлеге билдәле була, һәр ҡатнашыусы махсус сертификат аласаҡ.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

ҠАРТУФ ҠЫТЫҠЛАП ҠАРАНЫҒЫҘМЫ?

Йәй генә тәмләй торған ризыҡтарҙың береһе инде ул йәш картуф. Ҡабығын ҡул менән генә ыуып йыуып, тереләй генә бешереп, һыуытҡыстағы иртансаҡҡы шыйыҡ ҡаймаҡҡа ҡушып ашаһаң, үҙе бер хан һыйы. Миҙгеленә күрә иҫкә төшкән ошо ябай ризыҡ әллә күпме һүҙҙәрҙе лә хәтерҙә уятты.

Әбйәлилдең күбәләк ырыуы вәкилдәре йәшәгән төйәгендә, мәҫәлән, ошо йәш картуфты картуф төбөнән ҡытыҡлап алалар. Ҡаҙмайҙар ҙа, соҡоп та тормайҙар. Йәғни, ипләп кенә, артабан үҫеүенә зыян килтермәй генә бармаҡтарға эләккәнен йыбырлатып, ҡытыҡлап-ҡытыҡлап ҡына сығараһың. Бер ашарлыҡ булһын өсөн бер нисә төптө ҡытыҡлайһың. Картуфтың ҡабығы ла зарарланмай. Беҙҙең яҡта ер ныҡ уңдырышлы, картуфты ла күпләп үҫтерәләр, көҙгә тиклем тыштағы баҙҙа бер сифатын да юғалтмаған эре картуф була. "Йәш картуфты бер ашаһаң, иҫкенен ашағы килмәй, уныһы баҙҙа ята ла ҡала", - ти торғайны әсәйем. Йәшен шуға ла ҡыҙыҡ өсөн генә ҡытыҡлап ҡарағандарҙыр инде. Унан һуң, шул рәүешле картуф нисек үҫә, булырлыҡмы, юҡмы икәнен дә самалағандарҙыр. Сөнки бик белгеҙ килгән берәй хәбәр, яңылыҡты ла беҙ "ҡытыҡлап" ҡарайбыҙ. Йәки, берәйһенең серен әйттереү маҡсатынан уға төрлө һорауҙар биргеләп, ҡылын тартҡылап ҡарайһың. "Ярай, иртәгә ҡытыҡлап ҡарармын әле, нимә тиер икән", - тип уй ҡораһың.

Әйткәндәй, картуфтың орлоғо ла русса "семена"нан "симана" формаһында нығынған. Йыл һайын 1 майға ауылға ҡайтып, симана сығарып киләбеҙ. Элек әсәй симана тип һөйләһә, эй ятып көлә инек. Әммә үҙебеҙ ҙә бөгөн шулай һөйләшәбеҙ икән. Башҡа бер орлоҡто ла симана тимәйҙәр, тик картуфтыҡын ғына. Картуфты тереләй бешереүгә килгәндә, бөтәүләй, уртаға ярмай ғына бешереүҙе шулай тиҙәр. Артыҡ ваҡыт булмағанда, ҡапыл ғына кәрәк булғанда: "Тереләй картуф бешер ҙә ҡуй", - тигәнерәк кәңәш бирep ебәргән булаһың. Йоморолай тигән варианты ла бар. "Иртансаҡҡы" тигәне ҡызыл һөйләшендә "иртәнге" тигәнде белдерә.

Ләйсән НАФИҠОВА.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәкикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

ҠЫУЫШЫҢ ЯНДЫМЫ?

Хоҙай мәрхәмәте яҡындыр…

Яҡшынан яҡшы тыуыуы - ғәҙәт, яҡшынан яман тыуыуы - ғәжәп.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Фәрештәләй түҙем булыу өсөн аждаһаныҡы кеүек көс кәрәк.

(Александр Кумор).

Ҡатын-ҡыҙ ир-егеттең үҙе өсөн ни эшләгәнен күрмәһә лә, уның өсөн нимә эшләмәгәнен шунда уҡ шәйләй.

(Жорж Куртелин).

Балалары һәм... әбейҙәре матур булған милләттең ҡаны затлы иҫәпләнә.

(Григорий Ландау).

Кешелектең мөмкинлектәре сикһеҙ булыр ине, әгәр ҙә ул сикләнгәндәр власын сикләй алһа...

(Габриэль Лауб).

Яратылыу - ҡайһы саҡта яза. Яратлармы һине, юҡмы икәнде белмәү - икеләтә яза...

(Роберт Лембке).

Күпселек аҙсылыҡ билдәләгән ҡараштар тотҡонлоғонда йәшәй.

(Станислав Ежи Лец).

Сәйәсәттә, грамматикалағы кеүек, барыһы ла бергә ебәргән хатаны ҡағыҙә итеп алалар.

(Андре Мальро).

Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Корабль һәләкәткә осрай һәм берҙән-бер кеше генә ҡотолоп ҡала. Уны тулҡын тере йән булмаған утрауға алып барып ташлай. Кеше туҡтауһыҙ Аллаға ялбара, үҙе ҡотҡарыусылар килмәйме икән, тип, әленән-әле океанға күҙ һала. Былай ултырып арый һәм һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөүсе бүрәнәләрҙе йыйып, үҙенә бәләкәй генә ҡыуыш ҡороп ала. Ләкин берҙән-бер көндө утрау буйлап ашарлыҡ ризыҡ эҙләп йөрөп ҡайтһа, ҡыуышын ут ялҡыны ялмап алған. Кеше ҡайғыға ҡала, асыуланып, илап, күккә ҡарап ҡысҡыра:"Аллам, ниңә мине былай язаларға булдың?"

Иртән кеше ярға яҡынлашыусы корабль тауышына уянып китә. "Һеҙ мине нисек эҙләп таптығыҙ?"- ти ул ҡотҡарыусыларына. "Беҙ һинең ут яғып, сигнал биреүеңде шәйләп ҡалдыҡ", - ти ҡотҡарыусылар…

Әйләнә-тирәлә барыһы ла насар булғанда күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүе бик еңел ул. Ләкин нисек кенә ауыр булғанда ла Хоҙай беҙҙең менән бергә икәненә ышанырға кәрәк. Шуны бел: әгәр ҙә һинең бәләкәй генә ҡыуышың янып китә икән, быныҢ Хоҙай мәрхәмәтен саҡырыусы сигнал булыуы ла ихтимал бит.

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририәт:
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 2 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 1492/08